ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 июнь (һөтай) 2024

№24 (1117)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һуң булһа ла, уң булһын!**



2-3

**Табип булғын килһә...**

табип кәңәшенә ҡолаҡ һал!



5-6

**Яратҡан уҡытыусыларыбыҙҙы...**

яһалма интеллект алмаштыра алмаясаҡ



8-9

**Имән олонона йәбешеп...**

тормош тураһында уйланып тороуҙар



10

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***"Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн 897 һум 06 тингә баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА*

**Утыҙ биш йыл ғүмеремде башҡорт матбуғатына арнаған кеше мин. Йыл һайын гәзит-журналдарға яҙылыу осоро етһә, халыҡҡа мөрәжәғәт итәбеҙ, ваҡытлы баҫмаларға яҙылырға, алдырып уҡырға өндәйбеҙ. Ялҡытып та бөтәбеҙҙер, бәлки. "Ватандаш"тың баш мөхәррире булараҡ, журнал тураһында һөйләй башлаһам, "Эйе, беләбеҙ, атайым менән әсәйем алдыра торғайны", - тиҙәр. "Ә үҙегеҙ нишләп алдырмайһығыҙ?" - тип һорайым да, "Хәҙер ни, интернет булғас", - тигән һымаҡ яуаптар алам. Эх, шул интернет! Милли матбуғатты алыштыра аламы һуң инде ул!..**

# МАТБУҒАТҠА ЯҘЫЛЫҒЫҘ!



Бер күренеш гел күҙ алдымда. Көнө буйы почта килерен көтөп, ҡапҡа тышындағы йәшникте алмашлап ҡарай-ҡарай йөрөйбөҙ. Ә кискеһен урындыҡҡа ултырып алып, атайым "Совет Башҡортостаны"н уҡый, әсәйем район гәзитен ҡулына ала, ағайым берәй журнал ҡараштыра, миндә - "Башҡортостан пионеры". Хәйер, минә генә түгел, күптәргә таныш һәм яҡын ошо күренеш. Элек бит матбуғат уҡымаған кеше, гәзит-журнал алдырмаған ғаилә булманы. Өйҙәге һәр кемдең яратып көтөп алған гәзите йә журналы бар ине. Почтальон бер ҡосаҡ баҫма килтереп киткәс, бөтә ғаилә бергәләшеп ултырып уҡый: шунда уҡ яңылыҡтар менән бүлешеү, фекер уртаҡлашыу, йәғни ғаиләнең йәнле аралашыуы башлана. Өлкәндәрҙең белергә, аң-белемен арттырырға тырышыуы балаларға матур үрнәк була торғайны ул заманда.

Мәктәптә иһә уҡытыусылар һәр уҡыусының пионер баҫмаларына яҙылыуын күҙ уңынан ысҡындырманы. 1-се класҡа уҡырға барғас, уҡытыусыбыҙ Лена Ҡаһарман ҡыҙының дәрестә: "Балалар, хәҙер уҡыусы булдығыҙ. Ә һеҙҙең өсөн "Башҡортостан пионеры" тигән гәзит сыға. Уға яҙылырға һәм уҡырға кәрәк", - тигәнен һис тә онотмайым. Тимәк, гәзит уҡыу уҡыусы өсөн дәрескә әҙерләнеү, китап уҡыу, тәртипле булыу, бөхтә кейенеп йөрөү кеүек ҡағиҙәләр рәтендә торған. Ата-әсәләр ҙә гәзиткә яҙҙырыуҙы балаһына портфель, форма һатып алып биреү кеүек бурыс итеп күргән.

(Дауамы 2-се биттә).

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## "ҒАИЛӘНЕ ӨЙРӘНЕҮ" ДӘРЕСЕ

**Быйыл 1 сентябрҙән Рәсәй мәктәптәрендә өлкән класс уҡыусылары өсөн "Ғаиләне өйрәнеү" тигән яңы предмет индерелә.**

Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Хөкүмәт ағзалары менән кәңәшмәһендә вице-премьер Татьяна Голикова ошо турала белдерҙе. "Уны "Мөһим төшөнсәләр тураһында һөйләшеү", йәки кластан тыш эш сиктәрендә индерәбеҙ. Әйткәндәй, был ғәҙәти дәрес түгел. Уҡытыусы менән балалар араһында ғаилә ҡороуға ыңғай ҡараш булдырыуға йүнәлтелгән һөйләшеү булырға тейеш, - тине Татьяна Голикова. - Мәктәп эскәмйәһенән үк ғаилә ҡиммәттәрен формалаштырыуға баҫым яһаясаҡбыҙ".

18-35 йәшлек йәштәрҙең алдына ҡуйған тормош маҡсаттары араһында 71 проценты бәхетле ғаилә ҡороуға, балалар тәрбиәләүгә өҫтөнлөк бирә, шуға күрә был теләкте хуплау бик мөһим, тип билдәләне ул. Хәҙер "Ғаилә" милли проектын булдырыу өҫтөндә эш алып барыла.

*АФАРИН!*

## САЛАУАТ ЕРЕ САҠЫРА



**Республикала Салауат Юлаевтың 270 йыллығы билдәләнгән көндә, 16 июндә, милли батырыбыҙҙың тыуған ягында - Салауат районының Тәкәй ауылы урынында "Салауат ере" тарихи-мәҙәни комплексы асылды. Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

Проект Мостай Кәримдең "Салауат. Өн аралаш ете төш" әҫәренә нигеҙләнеп әҙерләнгән. Парктың дөйөм майҙаны - 4,5 гектар, төҙөлөштөң хаҡы - 128,5 миллион һум. Был архитектураһы, күләме һәм дизайны буйынса үҙенсәлекле булған тарихи парк. Концепцияны әҙерләгәндә урындағы тәбиғәтте һаҡлап ҡалыу мотлаҡ шарт булып торған. Республиканың Туризм министрлығы хәбәр итеүенсә, йыл һайын ошо гүзәл тәбиғәт мөйөшөнә 17 меңдән ашыу турист килә. Был парк асылғас, уларҙың һаны бер нисә тапҡырға артыр тип көтөлә.

"Кешеләрҙе ниндәйҙер тарихи ваҡиғалар һәм, әлбиттә, тәбиғәт үҙенә йәлеп итә. Ә бында икеһе лә бар. Был ерҙә элек Салауат Юлаевтың тыуып үҫкән һәм бала саҡ, үҫмер йылдары үткән ауыл булған. Салауат Юлаевтың Башҡортостан өсөн ни тиклем мөһим икәнен барыһы ла белә. Ул яугир ғына түгел, ижади кеше лә булған. Уның шиғырҙары тәрән мәғәнәле һәм аҡыллы. Икенсенән, бындағы күркәм тәбиғәт тә үҙенә ылыҡтыра туристарҙы. Бында йылға буйлап ағырға мөмкин", - тине Радий Хәбиров "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы журналисының һорауына яуап биреп.

Республика етәксеһе Радий Хәбиров геопарктарҙы үҫтереү буйынса киң мәғлүмәт кампанияһын ойошторорға, "Салауат ере" комплексын "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" программаһына индерергә ҡушты.

12+

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

# МАТБУҒАТҠА ЯҘЫЛЫҒЫҘ!

(Башы 1-се биттә).

Бына ошолар барыһы бергә матбуғат уҡыу мәҙәниәтен хасил итә ине. Шуға ла халыҡтың ан-белем кимәле лә, әхлағы ла юғары ине. Бөгөн "Атайым менән әсәйем йыйылып ятып гәзит уҡыны", - тип һағынып иҫкә алыусылар өлкән быуындың ипле, тыйнаҡ булыуына һоҡлана. Ә ни өсөн улар шундай булған һуң? Сөнки улар классик әҙәбиәт, сифатлы матбуғат өлгөһөндә тәрбиәләнгән.

Һуңғы 30 йыл эсендә ваҡытлы матбуғат уҡыу ғәҙәте юҡҡа сыҡты. Гәзит-журнал алдырыусылар кәмегәндән-кәмей. Хатта социаль селтәрҙәрҙә "Мин гәзит йәки журнал уҡымайым", "Яҙылып та тормайым", тип яҙыусылар, шуны шәплек күреүселәр ҙә булғылай. Үҙҙәрен ниндәй рухи байлыҡтан мәхрүм иткәндәрен аңламай инде ундайҙар.

Һүҙ ҙә юҡ, интернетта хәҙер бөтә нәмә лә бар. Ләкин ундағы мәғлүмәт милли матбуғатты алыштыра алмай. Шулай була торған булһа, донъяла электрон техника етештереүҙә алдынғы урында торған Японияла гәзиттәр күптән инде юҡҡа сығып, электрон баҫмалар ғына ҡалған булыр ине. Әммә гәзиттәрҙең дөйөм тиражы буйынса был ил донъяла 1-се урында тора - 72,7 млн дана. Япондарҙың 76,2 проценты көн һайын гәзит-журнал уҡый! Уларҙың 64,3 проценты баҫма матбуғатты иң ышанаслы һәм абруйлы мәғлүмәт сығанағы тип һанай, 50,5 проценты үҙенең белемен күтәреү өсөн уҡый, 48,8 проценты фекер һәм ҡараш формалаштырырға ярҙам итә тип иҫәпләй. Илдә гәзит-журналдарҙың 93,2 проценты подписка аша тарала, ә "Асахи", "Ёмиури", "Майнити" тигән баҫмалар хатта көнөнә икешәр тапҡыр сыға, уларҙың иртәнге һәм киске сығарылыштары бар. Унда хатта "Асахи кешеһе" тигән төшөнсә барлыҡҡа килгән. "Асахи" гәзитен уҡыған һәм заманса ҡараште торған интеллектуалдарҙы шулай тип атап йөрөтәләр икән. Уларҙың күбеһе - йәштәр.

Мәғлүмәт технологиялары туктауһыҙ үҙгәреп, камиллашып тора, улар ярҙамында ябай аҡыл менән аңлап та етмәҫлек эштәр башҡарыла. Әммә мәғлүмәт технологияларын белеү - аҡылды, өҫтән-мөҫтән генә уйлау фекер тәрәнлеген алмаштыра алмай. Фекерләй белеү мәҙәниәте элек-электән ташҡа баҫылған һүҙ менән, яҙма тел менән бәйле булған. Гәзит-журналдарҙың тиражы кәмеүе ул журналистарҙың, нәшерселәрҙең генә проблемаһы түгел. Милли һәм кешелек мәҙәниәтебеҙҙең бер өлөшөн юғалтыу ул.

Интернет биргән мәғлүмәт менән генә "туклана" осоро ла бер заман үтеп китер, беҙҙә лә "Асахи кешеләре" барлыҡҡа килер. Яңы быуындар аҡыллыраҡ булыр һәм бөгөн беҙҙең баҫмаларҙа яҙылғандарҙы эҙләп табыр, уҡыр, өйрәнер. Ташҡа баҫылған юйылмай ул. Шундай өмөт менән сығарылышы башҡорт теленгәге гәзит-журналдарыбыҙҙы. Шундай ышаныс менән уҡыусыларыбыҙға йәнә мөрәжәғәт итәбеҙ: 2024 йылдың 2-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу дауам итә. Алдырығыҙ, уҡығыҙ!

**Рәшиҙә МӘҺӘҘИЕВА,**
**"Ватандаш" журналының баш мөхәррире,**
**филология фәндәре кандидаты,**
**Рәсәйҙең атҡаҙанған журналисы.**

КӨНАУАЗ

# ҺУҢ БУЛҺА ЛА, УҢ БУЛҺЫН!

**Ниһайәт! Ә бит һигеҙ йыл үтеп тә киткән. Намыҫлы хеҙмәте менән осон-осҡа ялғарға тырышып, күпселек осраҡта әҙ генә эш хаҡына ла риза булып эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың аҡсаһын күпһенеп, 2016 йылда уларҙың пенсияларына законлы индексация түләүҙәрен туктатыуҙарына, шул тиклем ваҡыт үтеп киткән, тием.**




Һигеҙ йыл... Был ваҡыт эсендә, әлбиттә, дәүләт власының бындай тупаҫ рәүештә закон һәм кеше хоҡуҡтарын боҙоу фактына ҡул һелтәп, өмөтөн өҙөп, арабыҙҙан мәңгелеккә киткәндәр ҙә булғандыр, ә инде күрәләтә гәҙелһеҙлек күренешен күтәрә алмағандары һәм әле эшләрлек көс-дарманы булғандары әхлаҡ йәһәтенән матур булмаған был сараға шундай уҡ "көҙгөләгесә" тәртиптә яуап биреп, бер ниндәй законға ла нигеҙләнмәгән "вето"ны ашатлап үттеләр ҙә, бер айға эштән сығып, пенсияларына индексация алғас, кире үҙ урындарына сығып, эштәрен дауам иттеләр. Ғәмәлен күрә әмәле булды был. Әмәлһеҙҙән, тип әйтәйек, сөнки улар хәләл көсөн, тирен түгеп, ғаилә хәлдәрен аҙға ғына булһа ла яҡшыртырға, айлап-көнләп ҡабара барған хаҡтарға "ямаулыҡ" хаҡына барҙы был аҙымға. Эш биреүселәрҙең дә күбеһе ҡурҡып торманы, пенсионерҙарына ундай мөмкинлекте бирҙе, рәхмәт уларға; нисек кенә гәжәп булмаһын, хөкүмәт тә өндәшмәне, күрмәмешкә һалышты, һис бер йәшертене юҡ - унының өсөн дә рәхмәт инде. Ә кемдәргә ундай мөмкинлек булманы, улар эш хаҡын рәсми рәүештә түгел, ә конвертта алыу тәртибенә күсте. Әйткәндәй, бына шундай сәбәптәр арҡаһында 2016-2023 йылдар эсендә эшләүсе пенсионерҙар һаны 7 млн кешегә кәмене һәм был ил предприятиелары бай тәжрибәгә эйә булған юғары квалификациялы кадрҙарға мохтажлыҡ кисергән йылдарҙа булды. Әлбиттә, ил өсөн дә еңел булмаған йылдар ине был, уны ла аңларға була. Мәҫәлән, 7,8 млн пенсионерҙың индексация түләүҙәрен тергеҙеү өсөн, Рәсәй вице-премьеры Т. Голикова белдереүенсә, 100 млрд һум аҡса кәрәк.

Шуға күрә Дәүләт Думаһы депутаты, иҡтисад профессоры Оксана Дмитриеваның хафаланыуҙары аңлашыла. Әлеге 8 йыл эсендә эшләүсе пенсионерҙарға индексация түләүҙәре 71 процент тәшкил итә. Үҫеш партияһы депутатының хәүефләнеүе шуға бәйле: закон проектында индексация бөтөн төшөп ҡалған йылдарҙы иҫәпләмәйенсә, 2025 йылдан

БЫНАҒАЙЫШ!



# ҠЫТАЙҘЫҠЫН АШАЙҺЫҢМЫ?

## Үҙебеҙ үҫтерәйек!

**Быйыл яҙ ниндәйҙер аңлашылмаған киҙеү йөрөнө: грипп тиһәң, грипп та түгел һымаҡ, ОРВИ-ға ла оҡшамаған. Роспотребнадзор мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә марттың тәүге аҙнаһында ОРВИ һәм грипп менән ауырыусылар 677 мең кеше тәшкил итһә, тажзәхмәт тә беҙҙең менән һаман хушлашырға ашыҡмай, әлеге осор эсендә ул 23 меңдән ашыу кешелә асыҡланған. Былар, әлбиттә, яҡынса һандар, сөнки быйылғы сир төрҙәре еңелсәрәк үткәнлектән, бөтөн сирлеләр ҙә поликлиникаларҙа оҙон-оҙаҡ сират көтөп ултырырға теләмәй, өйҙә ҡул аҫтында булған халыҡ дауалау сараларын ҡулланыуҙы артығыраҡ күрә.**

"Ҡул аҫтындағы саралар" тигәндән, шифалы үләндәр, ҡиммәтерәк булһа ла лимон, имбир һатыуҙа һәр саҡ бар, ә бына һарымһаҡтың йүнлеһен һатып алыу мөмкин түгел, тиерлек. Сауҙа кәштәләрендәге бөтә булған һарымһаҡ Ҡытайҙан килтерелгән. Көҙ көнө шул грипп-фәләндә күҙҙә тотоп, баҡсасы әбейҙәрҙән һатып алған һарымһаҡты яҙға тиклем һаҡлау мөмкин дә түгел. Яҙ килеүен һиҙеп, улар шыта башлай, ә шытмағаны ҡороп кибә һәм буш ҡабыҡҡа әүерелә. Ошоноң менән бәйле һорау тыуа: ни өсөн һарымһаҡты яратып ҡулланған Рәсәй халҡы уны үҙе сәсеп үҫтермәй? Беҙҙең магазиндарҙағы һарымһаҡтың 80 проценты - Ҡытайҙан килтерелгән. Унан ҡала Мысыр менән Үзбәкстан ебәрә беҙгә был йәшелсәне. Ниңә һуң беҙ ошоғаса ундырышлы Рәсәй ерендә үҫкән һарымһаҡтан күпкә ҡайтыш, химия менән ашландырылған сит ил продукцияһын һатып алырға мәжбүрбеҙ?

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына әҙерләнеү һәм уны билдәләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Указдан күренеүенсә, Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына әҙерлек буйынса республика ойоштороу комитеты булдырыла һәм уның составы раҫлана. Ойоштороу комитеты Бөйөк Ватан һуғышының хәл иткес алыштарына һәм башҡа мөһим ваҡиғаларына арналған тантаналы сараларҙы ла иҫәпкә алып, саралар планын әҙерләргә һәм раҫларға тейеш.

✓Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы етәксеһе Александр Куренков Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа һәм республиканың идара итеү командаһына кеше гүмерҙәрен янғындан һәм һыуҙа һәләк булыуҙан һаҡлау буйынса һөҙөмтәле эш өсөн рәхмәт белдерҙе. "Былтыр утта - 7800, һыу объекттарында 3000-дән ашыу кешенең ғүмере өҙөлгән. Комплексלы эш һөҙөмтәһендә был күрһәткестәр мең кешегә булһа ла кәмергә тейеш. Республикала ошо йүнәлештә ҙур эш алып барылыуын күрәбеҙ. Мин һеҙгә, һеҙҙең идара итеү командаһына шуның өсөн рәхмәт әйткем килә", - тине Александр Куренков Радий Хәбировҡа мөрәжәғәт итеп.

✓Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Азат Бадранов Рәсәй Журналистар союзының "Профессиональ берләшмә алдындағы хеҙмәттәре өсөн" почет билдәһе менән бүләкләнде. Награданы уға Рәсәйҙең Журналистар союзы секретары Вячеслав Умановский тапшырҙы. "Һуңғы ике йылда Башҡортостандан 34 журналист махсус хәрби операция биләмәһенә барҙы. Барыһы ла хәүефле командировканан тулы составта, иң мөһиме, иҫән-һау әйләнеп ҡайтты. Бында ошо сәфәрҙәрҙә ойошторған Азат Бадрановтың хеҙмәте ҙур", - тине ул бүләкләү тантанаһын асып.

✓Донецк Халыҡ Республикаһында Салауат Юлаев исемендәге башҡорт батальоны яугирҙары төҙөгән яңы мәсет асылды. Мәсет Донецк Халыҡ Республикаһының азат ителгән ауылдарының береһендә урынлашҡан. Яҡташтарыбыҙ мосолмандарҙың иман йортона армия йондоҙҙары хөрмәтенә "Йондоҙ-рахман" исемен биргән. Мәсет хәрбиҙәр үҙҙәре йыйған аҡсаға һалынған. Төҙөлөш эштәре хеҙмәттән буш ваҡытта алып барылған.

**✓ Белгес һәм эксперттар 2016 йылдан бирле түләнмәгән индексация аҡсаһын ғәмәлдә нисек түләү һәм шуға етерлек финанс мәсьәләләре буйынса фекер алыша, бәхәс ҡора.**



ғына ҡаралыуы ихтимал, ти О. Дмитриева. Бындай осраҡта, ти Оксана Дмитриева, пенсия һәм индексация күләменә бәйле, өҫтәмә түләүҙәр 500-ҙән 1000-гә тиклем булыуы ихтимал.

Ләкин мөхтәрәм депутаттың ваҡытынан алда күрәҙә ҡылып, кеше күңеленә шом һалыуы менән килешеп булмай, әлбиттә. Властар тағы бер тапҡыр был өлкәлә законһыҙлыҡҡа юл ҡуймаҫ, тип ышанайыҡ. Рәсәйҙең элекке хеҙмәт министры Сергей Калашников әйтмешләй, эшен дауам итеүсе пенсионерҙың һаулығына ниндәй көсәргәнеш килеүен дә иҫәпкә алыу кәрәктер бит, ниһайәт. Әгәр элек ауыр физик эш башҡарған кеше еңелерәк хеҙмәт төрөнә күскән хәлдә, был уның эш хаҡында сағылыуы ла бар бит әле, шуға күрә лә индексация инфляцияны бер аҙ ҡаплау маҡсатында һәр кемгә лә кәрәк икәнлекте иҫбатлап тормаһаҡ та булалыр.

Рәсәй Фәндәр академияһының Үҙәк иҡтисад һәм математика институты директоры Альберт Бәхтизин, эшләүсе һәм эшләмәгән граждандарҙың пенсиялары араһындағы айырма ҡапланырға тейеш, тип бара. Әгәр шулай булмаһа, эшләүсе пенсионерҙар әлеге билдәле схеманы ҡабатлап, пенсияларына тулы иҫәп алырға тырышасаҡ, ләкин был юлы уның ыҡы-зыҡы һәм мәшәҡәттәре артып китеүе лә бар. Бәхтизин әйтеүенсә, пенсияларға ғәҙел индексация мәсьәләһе бөтөн үҫешкән илдәр өсөн дә тип әйтерлек хас. Мәҫәлән, Иҡтисади хеҙмәттәшлек һәм үҫеш ойошмаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, һуңғы дүрт тиҫтә йыл эсендә был ойошмаға ингән күпселек илдәрҙә инфляция бығаса күрелмәгән кимәлгә етте. Иҡтисади үҫеш ойошмаһына ингән илдәрҙең өстән ике өлөшөндә пенсияларҙы индексациялау ҡулланыу хаҡтарына бәйле, ә был дәүләттәрҙә йәшәүсе оло йәштәгеләрҙең ғүмер оҙайлығы арта бара һәм шунлыҡтан уларҙың пенсия системалары бик ныҡ көсөргәнеш менән эшләй һәм йыш ҡына бурыстарын башҡара алмай. Ләкин ресурстарға бай Рәсәй өсөн пенсиялар айырмалыҡтарын ҡаплау проблема тыуҙырмаясаҡ, ти Н. Бәхтизин. Рәсәй Социаль фонды мәғлүмәттәре буйынса, быйыл мартҡа ҡарата эшләүсе граждандарҙың уртаса пенсияһы 17 300 һум тәшкил итһә, эшләмәгән өлкәндәрҙеке 23 400 һумға етте.

Шул уҡ ваҡытта белгес һәм эксперттар 2016 йылдан бирле түләнмәгән индексация аҡсаһын ғәмәлдә нисек түләү һәм шуға етерлек финанс мәсьәләләре буйынса фекер алыша, бәхәс ҡора. Берәүҙәр уны өс йыл эсендә йәйләп түләргә мөмкин тип иҫәпләһә, икенселәр бөтөн индексация бурысын бер ыңғай һәм бер тапҡыр түләтеү яғында. Рәсәй Фәндәр академияһы Иҡтисад институтының ғилми хеҙмәткәре Игорь Николаев фекеренсә, эшләүсе пенсионерҙарға индексацияны тергеҙеү һалым өлкәһендә киләһе йылдан ғәмәлгә инәсәк ике төрлө үҙгәреш - прогрессив шкала менән килемгә һалымды арттырыу саралары ярҙамында мөмкин буласаҡ. Нисек кенә булмаһын, иң тәүҙә, әлбиттә, 8 миллионға яҡын эшләп йөрөүсе пенсионерға түләү өсөн аныҡ ҡына иҫәп-хисап һәм күпме аҡса кәрәклеген асыҡлау талап ителә.

Рәсәй Премьер-министры Михаил Мишустин вице-премьерҙар менән үткәргән кәңәшмәлә Президент В. Путиндың күрһәтмәһе буйынса 2025 йылдың 1 февраленән эшләүсе граждандарҙың пенсияларын индексациялауҙың дауам ителәсәге тураһында белдерҙе һәм улар артабан да эшләй алһын һәм йәштәр менән тәжрибәләрен уртаҡлашһын өсөн бөтөн шарттарҙы булдырырға ҡушты. Әлеге ваҡытта граждандарға күпме сумма өҫтәләсәге һәм ул өҫтәмәнең ниндәй күрһәткестәрҙән тупланасағы хаҡында "аңлатыу эштәре" алып барырға кәрәклегенә иғтибарҙы йүнәлтте.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

Донъяла етештерелгән һарымһаҡтың ҡап яртыһын, әйткәндәй, Ҡытай етештерә һәм ул Рәсәй баҙарын тулыһынса баҫып алған. Мәскәү дәүләт университетының үҫемлектәр кафедраһы мөдире урынбаҫары Владимир Мурашев раҫлауынса, Ҡытай һарымһағы һаҡланмаға оҡшаш: уның иммунитет өсөн дә файҙаһы юҡ, бактерияларға ҡаршы үҙенсәлектәре менән дә ул маҡтана алмай, шуға күрә лә 2018 йылда уҡ, ковид башланмаҫ борон уҡ әле, АиФ аҙнаһы, аҡса әрәм итеп, Ҡытай һарымһағын һатып алмауығыҙ хәйерле, тип яҙып сыҡҡаны хәтерҙә ҡалған.

Әлбиттә, баҡсаһы бар кеше беҙҙә һарымһаҡты үҙенә етерлек итеп сәсә, уңышын йыйып алғас, артығын сығарып та һата, ләкин был теге йә был урындағы айырым баҙар күренештәре генә. Ҡайһы бер фермер хужалыҡтары ла үҫтерә уны, ләкин был ғына тотош ил ҡулланыусыһына барып етә алмай. Был үтә лә файҙалы һәм кәрәкле продукцияға булған ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү мәсьәләһе икенсерәк масштабтарҙы күҙҙә тота. Мәҫәлән, заманында даны таралған Иглин һуғаны кеүек, һарымһаҡ үҫтереү буйынса ла бер нисә район махсуслаша алыр ине, моғайын. Өҫтәүенә, табыш алыуҙы аҡлар өсөн картуф һәм башҡа төр йәшелсә лә үҫтерә алыр ине улар. Әйткәндәй, әлеге Иглин һуғанын яңынан тергеҙеү буйынса ун йылдан ашыу инде хәҙер һүҙ бутҡаһы бешерелә. Үткән быуатта был йәшелсә тулыһынса үҙебеҙҙә тәьмин итеүҙән тыш, сит илдәргә лә ебәрелгән. Ләкин быуат ахырындағы төшөнкөлөк һәм көрсөк менән бәйле, был эш, тотош йәшелсәселек тармағы менән бергә юҡҡа сыҡты. Колхоз-совхоздар, завод-фабрикалар кеүек үк.

Бөгөн ошо файҙалы продукция үҫтереүҙе яйға һалып, тармаҡты тергеҙеп ебәрергә тырышҡан фермер хужалыҡтары бар икән, бәхеткә. Мәҫәлән, "Томск һарымһағы" тип аталған Ауыл хужалығы кооперативы Рәсәй һарымһағын тергеҙеү һәм Ҡытай продукцияһын баҙарҙан ҡыҫырыҡлап сығарыу буйынса эште башлап ҡына тора икән, ләкин улар ғына бөтөн ил ҡулланыусыһын тәьмин итә алмай, сөнки был йәшелсәне тәмләткес итеп файҙаланыусы эшҡыуарлыҡ предприятиелар күмәртәләп һатып алып бөтә. Шуға ла Башҡортостан ҡулланыусыһы "Томск һарымһағы" хаҡында төшөндә лә күргәне юҡ. Себер һынлы Себерҙә һарымһаҡ үҫтерергә йөрьәт иткәндәр барҙа, уңайлы климатлы, уңдырышлы тупраҡлы Башҡортостанда табылмаҫ инеме ни ауыл хужалығы уңғандары?..

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ТЫНЫСЛЫҠ ШУЛАЙ ЯУЛАНА



**Планетабыҙ, тамуҡ ҡаҙанылай, ҡайнай ҙа ҡайнай, уның ҡыҙыуына Ҡояш үҙе хатта сыҙай алмай: өтә, киптерә, ҡура ғына бөтөн тирә-йүнде; әле бында, әле тегендә хәүефле йәшен уҡтары уйнай, хатта көтөү-көтөү малдарҙы ҡыра һуға; боҙ ҡатыш ҡойма ямғырҙар ҙа хатта һыуындыра алмай Ер яраһыуын. Белгестәр, климат үҙгәрә, тиҙәр, әммә уларҙы уртаса донъя температураһының юғарыға һикереүе түгел, бәлки, был күренештең күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә барыуы хафаландыра. Ҡояш активлығы эҙемтәләрен кемдәрҙер тәбиғәттә генә түгел, халыҡ-ара хәлдәрҙә лә хатта, ҡапма-ҡаршылыҡлы мәнфәғәттәр нигеҙендә һәм сәйәсәттә лә күрә.**

Һәм, ысынлап та, сәйәси хәлдәр ҡыҙыулығының тәбиғәт катаклизмдары менән бәйләнеше бөгөнгө донъя торошо калейдоскобында айырыуса асыҡ күренә. АҠШ бөтөн кешелек алдында асыҡтан-асыҡ ике йөҙлөлөк күрһәтә: 17 июндә НАТО-ның генераль секретары Йенс Столтенберг, күҙ ҙә йоммай, ядро ҡоралын хәрби әҙерлек хәленә килтереү кәрәклеге хаҡында белдерҙе. Был хәбәрен ул донъялағы ядро ҡеүәтенә эйә ихтимал булған ике дошманы - Ҡытай менән Рәсәйгә ҡарата йүнәлтте. Бынан алдараҡ та әле Аҡ йорт АҠШ-тың үҙ ядро арсеналын артабан үҫтереүгә ниәтләнеүен белдергәйне инде. Шуныһы ҡыҙғаныс та, ҡыҙыҡ та: үҙҙәренең был яуыз уйлы пландарын "аҡлау" өсөн НАТО секретары еңел һылтау уйлап тапҡан: йәнәһе лә, улар был аҙымға "Рәсәй тарафынан үҫә барған янауҙар арҡаһында" мәжбүр буласаҡтар икән. Әйткәндәй, Тыныслыҡ мәсьәләләрен өйрәнеүсе Стокгольм халыҡ-ара институты (SIPRI) мәғлүмәттәре буйынса донъя ядро державалары үҙ арсеналдарын әүҙем рәүештә яңыртя һәм камиллаштыра бара. Һуңғы бер йыл эсендә генә туғыҙ ядро державаһы - шуларҙың рәсми бишәүһе (Британия, Ҡытай, Рәсәй, АҠШ, Франция) һәм рәсми булмаған дүртәүһе (Израиль, Һиндостан, КХДР, Пакистан) яңы ядро ҡоралланыуҙар башланы. Донъя запасында барлығы 12 121 ядро боеголовкаһы иҫәпләнһә, шуларҙың 9 585-е резервта тора. Ә инде 3 904 боеголовка юғары хәрби әҙерлек хәлендә, йәғни ракеталар һәм самолеттарҙа булыуы ихтимал. Донъя ядро ҡоралының 90 процентҡа яҡыны Рәсәй менән АҠШ өлөшөнә тура килә...

Үткән аҙнаның халыҡ-ара шаңдау алған тағы бер ваҡиғаһы - уйынсалап әйткәндә, "Рәсәйҙе Рәсәйҙең үҙенән башҡа өйләндерергә маташыу" һымағыраҡ килеп сыҡты. 15-16 июндә Швейцарияның Бюргеншток курортында Украина мәсьәләһе буйынса "тыныслыҡ конференцияһы" булып үтте. Унда 92 ил вәкиленең ҡатнашыуын, йәнәһе лә, ошо сараның уңышы тип күрһәтергә тырышһалар ҙа, икенсе яҡтан, был саммитҡа саҡырылмаған Рәсәйҙе "ситтән тороп" ямандаған йомғаҡлау декларацияһына 15 илдең ҡул ҡуйыуҙан баш тартыуы асылда конференцияны юҡҡа тигеҙләне.

Тағы бер тапҡыр ҡыҙғаныс та, ҡыҙыҡ та хәл килеп тыуҙы: Рәсәй ҡатнашлығынан тыш үткәрелгән был сараның мәғәнәһе булмаясағы алдан уҡ билдәле ине инде. Һәм шулай килеп сыҡты ла: сәйәсәт буйынса эксперттар Украина саммитын дипломатик еңелеү, хатта ки "милитаристик шоу" тип атаны. Ә бит Рәсәй Президентының тыныслыҡ планы донъяға күптән билдәле: был шарттарҙы ул айырым-асыҡ 14 июндә РФ Сит ил эштәре министрлығы етәкселәре менән осрашыуында тағы бер ҡабатланы. Иң тәүҙә Луганск менән Донецк республикалары, Херсон һәм Запорожье өлкәләре территорияларынан Украина ғәскәрен тулыһынса сығарыу шарты, тине ул. Башҡа төп шарттарға Украинаның нейтраль, блоктан тыш һәм ядро ҡоралһыҙ статусы; Украинаны демилитаризациялау һәм денацификациялау; халыҡ-ара килешеүҙәрҙә Ҡырымды, Севастополде, ДНР, ЛНР, Херсон һәм Запорожье өлкәләре статустарын Рәсәй төбәктәре булараҡ теркәү; Рәсәйгә ҡаршы бөтөн көнбайыш санкцияларын юҡҡа сығарыу. Владимир Путин Украинаның ошо шарттар менән килешеүе минутында уҡ утты туҡтатыуға бойороҡ бирәсәге һәм һөйләшеүҙәрҙең башланасағы хаҡында белдерҙе. Тыныслыҡ күп һүҙ бутҡаһы менән түгел, ә фәҡәт бына ошолай яулана.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓26-28 июндә Өфөлә "Иң оҫта сыр ҡайнатыусы" номинацияһында "Һөнәре буйынса иң яҡшыһы" Бөтә Рәсәй һөнәри оҫталыҡ конкурсының төбәк этабы уҙғарыла. Башҡортостандың сыр ҡайнатыусылары Аграр университет майҙансығында "Адыгей" сырын һауҙа ярыша. Төбәк этабында еңеүселәргә һәм призерҙарға түбәндәге премиялар тапшырыла: беренсе урын - 50 мең, икенсе урын - 30 мең, өсөнсө урын - 15 мең һум. Республиканың иң оҫта сыр ҡайнатыусылары Бөтә Рәсәй финалында Башҡортостан исеменән сығыш яһай. Төп бүләк - 1 миллион һум.

✓Дәүләт Думаһы депутаттарының тәүге уҡыуҙа ҡабул иткән закон проектына ярашлы, 2024 йылдың 1 сентябренән Рәсәйҙә балаларға алкоголһеҙ тонусты күтәреүсе эсемлектәр, шул иҫәптән энергетиктар һатыу тыйыла. Магазинда һатыусы паспорт талап итергә хоҡуҡлы, тип хәбәр ителә Рәсәй Дәүләт Думаһының рәсми сайтында. "Табиптар энергетик эсемлектәрҙең зарарлы икәнен раҫлаған. Улар гипертония, шәкәр диабеты, йөрәк-ҡан тамырҙары һәм башҡа сирҙәргә сәбәпсе булыуы ихтимал. Закон проектының төп маҡсаты - балаларыбыҙҙың һаулығын һаҡлау, йәштәрҙе алама ғәҙәттәрҙән арындырыу", - тине парламент спикеры Вячеслав Володин.

✓Башстаттың һайлап тикшереү мәғлүмәттәре буйынса, 2024 йылдың ғинуар-мартында 15 йәшлек һәм унан өлкәнерәк эшсе көстәр һаны 1,885 миллион самаһы кеше тәшкил иткән. Уларҙың 1,843 миллионға яҡыны, йәғни эшсе көстәрҙең 97,8 проценты иҡтисади эшмәкәрлек менән мәшғүл тип иҫәпләнгән. Ҡалған 41,8 мең кеше (2,2 процент) - Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһы критерийҙарына тап килгән эшһеҙҙәр. Йәғни эше йәки килемле шөғөлө булмаған, эш эҙләгән һәм тикшереү барған аҙнала уға тотонорға әҙер булғандар.

✓"Башҡортостанда бер юлы ике сығарылыш уҡыусыһы профилле математика һәм химия буйынса Берҙәм дәүләт имтиханында 100-шәр балл йыйҙы. Рус теленән берҙәм дәүләт имтиханын 14 171 сығарылыш уҡыусыһы тапшырҙы, 11 уҡыусы 100 балл йыйҙы, 2 728 кеше 81 һәм унан юғарыраҡ балл алды. Профилле математиканан 7 652 уҡыусы һынау тотто, уларҙың 31-е - 100 балл, 1 324-е 81 һәм унан күберәк балл тупланы", - тип хәбәр итте республиканың мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин.

ҠЫҪҠАСА

# ЯРҘАМ САРАҺЫ

**Башҡортостанда илдең Оборона министрлығы менән контракт төҙөгән хәрби хеҙмәткәрҙәргә 205 мең һум аҡса түләү тураһында ҡарар ҡабул ителде.** Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо хаҡта әйтте. Республика етәксеһе тейешле указға ҡул ҡуйған. Ярҙам сараһы саҡырылыш йәки мобилизация буйынса хәрби хеҙмәткә алынған һәм ошо йылдың 1 майынан 1 сентябренә тиклем Рәсәйҙең Ҡораллы көстәрендә хеҙмәт итеү тураһында килешеү төҙөгән хәрби хеҙмәткәрҙәргә ҡағыла."Шулай итеп, контракт төҙөгәндә яҡташтарыбыҙға 400 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү тәғәйенләнә. Шуның 205 меңе - Башҡортостандан, 195 мең һумы - Рәсәйҙең Оборона министрлығынан. Бынан тыш, ҡайһы бер муниципалитеттар муниципаль түләүҙәр билдәләне. Өфө лә түләй. Был беҙгә артабан махсус хәрби операция зонаһындағы хәрбиҙәребеҙ менән бәйләнеш тоторға һәм уларға ярҙам итергә мөмкинлек бирә", - тине Радий Хәбиров.

✓ **Тvil туристик сервисы Сыр ҡайнатыусылар көнөнә Рәсәйҙең иң тәмле сыр етештереүсе төбәктәре рейтингын төҙөгән.** Башҡортостан 6-сы урынды биләй, ҡатнашыусыларҙың 7 проценты республикабыҙ сырҙары өсөн тауыш биргән. Бында күптәрҙең һөйөүен яулаған ҡаты һәм ярым ҡаты сырҙар етештерелә, тип билдәләнә тикшеренеүҙә. Башҡортостан Төньяҡ Осетия һәм Углич сырҙарын уҙып киткән ("Пошехонский" һәм "Российский"). Рейтингта Кострома һәм адыгей сырҙары алдынғылыҡты бирмәй. Башҡортостанда сыр етештереү яңы кимәлгә сыға. Бәләбәй һөт комбинаты менән бер рәттән, республикала шәхси производство әүҙем үҫешә. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, июнь аҙағында республикала "Адыгей" сырын иң оҫта етештереүсене һайлайҙар.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала төҙөлөштә өлөшләтә ҡатнашып зыян күргән граждандарҙың хоҡуҡтарын тергеҙеүҙә әүҙем ҡатнашҡан власть органдары, хоҡуҡ һаҡлау органдары вәкилдәренә һәм төҙөүселәргә республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы.** Был эш 2023 йылда уңышлы тамамланды. 2017 йылда ошо эште башлағанда республикала 170 проблемалы объект бар ине, тип иҫкә төшөрҙө Радий Хәбиров. Алданған өлөшсөләрҙең хоҡуҡтарын тергеҙеү эше ил Президенты ҡушыуы буйынса алып барылды, тип билдәләне республика етәксеһе. Биләмәләрҙе үҫтереү фонды булышлығында 2020 йылдан 4300-ҙән ашыу кеше 12,2 миллиард һумдан күберәк компенсация алған. 27 йорт төҙөлөшөн тамамлау өсөн 9,4 миллиард, шул иҫәптән республиканан 1,1 миллиард һум аҡса йүнәлтелгән. 1,5 меңгә яҡын кеше фатирлы булған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҮТКӘН БЫУЫНДАН...



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 12 июндә "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһына сәскәләр һалды. Бында ул 1974 йылда һалынған үткән быуындан киләсәк быуынға мөрәжәғәтте - "Ваҡыт капсулаһы"н асыу тантанаһында ҡатнашты.**

Замандаштары хәтерләүенсә, капсула ярты метр оҙонлоҡтағы төргәктә хәтерләтә. Уны Башҡортостанда ҡойолған суйын корпусҡа һалып ҡуйғандар. Һалыу тантанаһында ВЛКСМ ағзалары, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары, шулай уҡ йәштәр ҡатнашҡан. Хатта 1970 йылдарҙағы комсомолдар үҙҙәренең ҡаҙаныштары хаҡында яҙған һәм алыҫ тиҫтерҙәренә совет кешеһе исемен ҡәҙерләргә, яратҡан Ватаныбыҙҙың данын һәм байлығын арттырырға васыят әйтеп ҡалдырған. "Беҙ тарихи ваҡиғала ҡатнашабыҙ. 50 йыл элек, баш ҡалабыҙҙың 400 йыллығын билдәләгән көндә, һалынған был "Ваҡыт капсулаһы". Ата-бабаларыбыҙ васыят иткәнсә, был хатты бөгөн асабыҙ, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Был идеяның авторы һәм капсула һалыуҙа ҡатнашҡандарҙы айырыуса йылылыҡ менән сәләмләйем. Бына улар - ул саҡтағы комсомол етәкселәре һәм активистар, бөгөн иһә хөрмәтле ветерандар Наил Бәхтизин, Фәнүз Насретдинов. Беҙҙең менән бергә ошо тантанала ҡатнашыуығыҙға шатбыҙ". Радий Хәбиров оло быуындың хеҙмәт ҡаҙаныштарына һәр саҡ ҙур ихтирам менән ҡарауын, йыш ҡына тарихи хроникаға мөрәжәғәт итеүен, ғәйәт ҙур төҙөләштәргә, совет халҡының енеүҙәренә, уңыштарына һәм ҡаҙаныштарына һоҡланыуын билдәләне. Быйыл юбилей йылында өлкән быуындың традицияларына, уларҙың героик үткәненә тоғролоҡ һаҡлауыбыҙ, тыуған республикабыҙҙың артабанғы үҫеше өсөн барыһын да эшләүебеҙ тураһында ғорурлыҡ менән яҙылған яңы ваҡыт капсулаһы һалына, тип белдерҙе республика етәксеһе.

# ЯРҘАМ САРАЛАРЫ БУЛАСАҠ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 14 июндә үткән "Медиайыйын"дың пленар ултырышында республиканың киң мәғлүмәт сараларына һәм журналистарына ярҙам саралары хаҡында һөйләне.**

Мәҫәлән, 2025 йылда Матбуғат йортон капиталь ремонтлау эшен башлау планлаштырыла, тип белдерҙе ул. "Башҡортостан" телерадиокомпанияһына ярҙам һәм мәғлүмәт майҙансығын йыһазландырыу өсөн республика 70 миллион һум аҡса бүлде. "Хеҙмәт хаҡын арттырыу тураһында мәсьәләләр даими рәүештә күтәрелә килде. Был һораусҙар, талаптар ғәҙел ине. 2022 йылдан бюджеттан түләүгә өҫтәмә рәүештә 75 миллион һум бүлдек. 2023 йылдың июненән Нәшриәт йорто хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыу өсөн йылына йәнә 115 миллион һум йүнәлтелде. Был беҙгә хеҙмәт хаҡын бер аҙ күтәрергә мөмкинлек бирҙе. Беҙ шулай уҡ грант ярҙамы күрһәтергә тип һөйләшеп килештек. Журналистиканы үҫтереү өсөн гранттарға 50 миллион һум һалынған. Һеҙ был гранттар менән файҙаланырға өйрәндегеҙ инде. Уларҙа ҡатнашырға кәрәк, беҙ гранттар суммаһын даими арттырырбыҙ", - тине Радий Хәбиров.

Әйткәндәй, Башҡортостанда журналистика өлкәһендә "Тоғролоҡ. Яуаплылыҡ. Батырлыҡ" тигән яңы премия булдырылды. 1 октябрҙә конкурсҡа ғаризалар ҡабул итеү башлана, еңеүселәр декабрҙә билдәле була. Йыл һайын 20 еңеүсе билдәләнә. Премияның суммаһы - 300 мең һум.

# БЕҘҘӘ УҠЫЙҘАР

**Үзбәкстанға эш сәфәре барышында Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев, мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин Үзбәкстандың юғары белем биреү, фән һәм инновациялар министры Конгратбай Шәрипов менән осрашты.**

"Бөгөн республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса Конгратбай Шәрипов менән Үзбәкстанда республикабыҙҙың юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарының беренсенең вәкиллеген һәм филиалын асыу өсөн эш башларға тип һөйләштек. Ғөмүмән, юғары һәм урта һөнәри белем биреү өлкәһендә хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен тикшерҙек, квалификациялы эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр әҙерләү өлкәһендә методик эштәр менән алмашыу хаҡында һөйләшеп килештек. Тиҙҙән эшкә тотонабыҙ", - тип хәбәр итте Урал Килсенбаев.

Быйыл Башҡортостанда меңдән ашыу Үзбәкстан граждандары уҡый. Бөгөнгә ике республиканың юғары уҡыу йорттары араһында ғилми, белем биреү, мәҙәни хеҙмәттәшлек тураһында 23 килешеүгә, Үзбәкстан партнерҙары менән алмашыу программаларын ғәмәлгә ашырыу хаҡында килешеүҙәргә ҡул ҡуйылған. Евразия ғилми-белем биреү үҙәге быйыл Үзбәкстандың өс университеты менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөгән, Үзбәкстандың юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары өсөн Евразия ғилми-белем биреү үҙәге тикшеренеүҙәренең йүнәлештәре буйынса кампуста квалификация күтәреү курстарын үткәреү тураһында килешеүгә өлгәшелгән.

# БАЙМАҠТА ЯЛ ИТ!

**Башҡортостан Хөкүмәте Баймаҡ районында туристар өсөн яңы комплекс төҙөү инициаторы - "Сириус" компанияһы менән инвестицияларҙы яҡлау һәм дәртләндереү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр.**

Өҫтөнлөклө инвестиция проекты инициаторына килешеү төҙөгән ваҡытта ғәмәлдә булған шарттарҙы һаҡлау, шулай уҡ дәүләт ярҙамы саралары, шул иҫәптән инженер һәм транспорт инфраструктураһы төҙөлөшөнә субсидия биреү гарантиялана. "Инвестиция сәғәте"ндә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировты проект менән таныштырғандан һуң ул өҫтөнлөклө статусына эйә булды. Турбаза төҙөлөшөнөң беренсе этабын бойомға ашырыу өсөн инвестор 20,5 миллион һум самаһы аҡса бүлергә ниәтләй. Инвестор туристар комплексын Талҡаҫ күле буйында асырға ниәтләй. Тәүге этапта 40 кешегә иҫәпләнгән модулле ҡунаҡ апартаменттарын һәм 30 урынлыҡ кемпинг майҙансығын йыһазландырыу күҙаллана. Бынан тыш, ял базаһы биләмәһендә арҡан паркы һәм балалар майҙансығы булдырыла. Бынан алда Башинформ Ирәмәл тауы янында йыл әйләнәһенә эшләгән туристик комплекс төҙөлөшө тураһында ла хәбәр иткәйне.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Ошо көндәрҙә баш ҡаланың 2023 йылға бюджетының үтәлеше тураһында отчет проекты буйынса йәмәғәт тыңлауҙары үтте. 29 майҙан 9 июнгә тиклем Өфө халҡы тәҡдимдәрен яҙып ебәрә алды һәм йәмәғәт тыңлауҙары үткәреү буйынса комиссияға 105 мөрәжәғәт килде. Тыңлауҙар барышында 15 кеше үҙ фекерен тороп әйтте. "2023 йылда ҡала бюджетының килем һәм сығымдарының дөйөм күләме 46,8 млрд һум һәм 46,2 млрд һум тәшкил итте. Ҡала бюджетының төп тулыландырыу статьялары - һалым һәм һалым булмаған килемдәр (40 процент), бюджет-ара трансферҙар (60 процент)", - тине үҙ сығышында ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары - финанс идаралығы начальнигы Рөстәм Аҡбашев.

✓20 июндә Өфөлә Князев һыу аша сығыу урыны асылды. Йылға юлы 20 июнь киске сәғәт 8-ҙән, 21 июнь иртәнге сәғәт 8-гә тиклем ябыласаҡ Шаҡша күперен алмаштырып тора. Шаҡша күперен тағы ла 26-һы йәки 27 июндә лә тулыһынса ябып торасаҡтар. Әлеге ваҡытта төҙөүселәр күперҙең бер яҡ яртыһында эштәрҙе тамамлап килә һәм икенсе яртыһына күсеү өсөн ҡоралмаларҙы урынлаштыра. Шаҡша күпере 45 процентҡа әҙер, йыл аҙағына уның буйынса хәрәкәт асыласаҡ, ә эштәр тулыһынса 2025 йыл башында тамамланасаҡ, тип көтөлә.

✓Өфөлә баш ҡала хакимиәте кубогына кәрәш буйынса асыҡ турнирға йомғаҡ яһалды. Уны һәр ваҡыттағыса ҡала көнөндә үткәрҙеләр. Быйыл күптәрҙең яратҡан турнирында республикабыҙҙан ғына түгел, башҡа төбәктәрҙән дә 100-гә яҡын көрәшсе ҡатнашты. Был юлы абсолют еңеүсе исеменә Радик Сәләхов лайыҡ булды, тип хәбәр итте ҡала мэры Ратмир Мәүлиев социаль селтәрҙә. Еңеүсегә төп бүләктән - 450 мең һумлыҡ сертификаттан тыш, һарыҡ тапшырылды.

✓Өфөлә рәсми рәүештә һыу инеү миҙгеле асылды. Быйыл баш ҡалала 10 рәсми пляж эшләй, хәҙер ял итеүселәрҙе ҡабул итеү өсөн әҙерлек эштәре алып барыла. Өфөнөң граждандарҙы яҡлау идаралығы хеҙмәткәрҙәре йыһазландырылмаған ял урындарын контролдә тота. Улар баш ҡаланың йылғакүл буйҙарындағы барлыҡ законһыҙ пляждарҙы белә, шуға күрә алдан уҡ ошо хәүефле зоналарҙа һыу инеүҙе тыйған аншлагтар ҡуя башланы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *Алексей Кулагин фекеренсә, бөгөн баш ҡаланың "йәшел" фондын яңыртырға кәрәк, сөнки урамдарҙағы һәм ихаталарҙағы ағастарҙың төп өлөшөнә 50 йыл тирәһе.*



*ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!*



## АҒАСТАР ЯҢЫРТЫЛА

**Биология фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең биология институты урмансылыҡ лабораторияһы мөдире Алексей Кулагин Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Дөрөҫөн әйткәндә" тапшырыуында Өфөлә яңы ағас үҫентеләренең ерегеп үҫеп китеүе тураһында әйтте.**

"Насар һауа торошо ағастарыбыҙға яҡшы тәьҫир итер, тип уйлайым. Ултырткан ваҡытта ул тиклем ныҡ эҫе булмаһа, дым етерлек, һауа температураһы түбән ине. Ваҡытында һыу һибелһә, тейешенсә минераль тукландырылһа, яңы ағастар, миненсә, ҡала халҡын оҙаҡ йылдар ҡыуандырасаҡ", - тип иҫәпләй эксперт. Уның фекеренсә, бөгөн баш ҡаланың "йәшел" фондын яңыртырға кәрәк, сөнки урамдарҙағы һәм ихаталарҙағы ағастарҙың төп өлөшөнә 50 йыл тирәһе. "Элекке тергеҙеү эштәренең иң юғары нөктәһе үткән быуаттың һуғыштан һуңғы йылдарына тура килә. Беҙҙең ҡала шарттарында тупраҡ япмаһы бик насар хәлдә, шуға күрә ағастар иртәрәк ҡартая", - тип билдәләне ғалим.

Алексей Кулагин әйтеүенсә, йәшелләндереүҙә ағастың һәм декоратив формаларҙың күп төрләлөгөн ҡулланыу мөһим. "Ваҡ япраҡлы йүкәләргә генә өҫтөнлөк бирергә ярамай, тирәк тә ултыртырға кәрәк. Тирәк тиҙ үҫә, йылдар буйы көтөргә кәрәкмәй, ул ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ихата биләмәләрен һәм яңы төҙөлгән территорияларҙы тәртипкә килтерергә мөмкинлек бирә. Саған, ылыҫлы тоҡомдарҙың бөтә йыйылмаһын, шул иҫәптән Сукачев ҡарағаһын, ябай ҡарағай, шыршы ултыртырға мөмкин. Ә бына имән ултыртыуҙан тыйылыр инем: улар оҙаҡ үҫә һәм арктик ҡыштарға сыҙамай", - тине ул.

**Иван ВАВИЛОВ.**

*ҠЫҪҠАСА*

## ЙӘШӘҮ ЮЛЫ

**С. Перовская, С. Кувыкин һәм Менделеев урамдарын бушатыу өсөн Өфөлә "Йәшәү юлы" тигән яңы транспорт коридоры объекттары буйынса эштәр алып барыла.** Ул "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә Эшсе корреспонденттар урамын яңыртыуҙы һәм Высотный урамын төҙөүҙе күҙаллай. Юлдар һәм яңалма ҡоролмалар төҙөү, ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы Константин Паппе килтергән мәғлүмәттәргә ярашлы, беренсе урам буйынса дөйөм әҙерлек 75 процент, икенсеһе буйынса 60 процент тәшкил итә. "Йәшәү юлы" транспорт коридорына Әй урамын төҙөү ҙә ингән, был автомобилдәр трафигын Салауат Юлаев проспектына сығарырға ярҙам итәсәк. Проект эшләнгән һәм дәүләт экспертизаһынан ыңғай ҡарар алынған. Әй урамының дауамы 1 км оҙонлоҡта буласаҡ, уны торлаҡ йорттар эргәһенә үтеп инерлек, йәйәүлеләр һәм велосипедтағылар өсөн уңайлы итеп һаласаҡтар.

✔ **Өфөлә 15 апрелдән юл тамғаларын һыҙа башлағайнылар. Бөгөнгө көндә З. Вәлиди, Комаров, Тоннель, Октябрҙең 50 йыллығы, Комсомол, 8 Март, Урман техникумы, Әй, СССР-ҙың 50 йыллығы, Ибраһимов бульвары, Киров, Совет урамдарында эштәр тамамланған.** 1 июлгә тиклем вағыраҡ урамдарҙа, ә августа мәктәп һәм мәктәпкә тиклемге учреждениеларға яҡын урынлашҡан йәйәүлеләр үткәүелдәрендәге юл тамғаларын яңыртасаҡтар. Быйыл Өфөләге юл саттарында шаҡмаҡ билдәләр (вафельная разметка) һаны арттырыла. Ул тығын барлыҡҡа килеүе ихтимал булған урындарҙа юл сатына инеүҙе тыя. Мэриянан хәбәр итеүҙәренсә, бындай юл тамғаһы Әй һәм Достоевский, Цюрупа һәм Чернышевский, Цюрупа һәм Киров, Әй һәм Революцион урамдары саттарында эшләнәсәк.

✔ **Ҡорбан байрамы айҡанлы Өфөлә 23 мәсеттә айыт уҡылды. "Ләлә-Тюлпан" йәмиғ мәсетендә байрам ғибәҙәтен мөнбәрҙә баш мөфтөй Тәлғәт Тажетдин үткәрҙе.** Ҡатнашыусылар араһында Рәсәй Мосолмандары үҙәк диниә назараты хакимиәте етәксеһе, мөфтөй Мөхәммәт Тажетдинов, "Ләлә-Тюлпан" йәмиғ мәсете имам-хатибы Рауил Мәмлиев, Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев та бар ине. Тәлғәт Тажетдин хаҡ мосолмандарға Рәсәй Президенты Владимир Путин, Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин, Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин, Федерация советы рәйесе Валентина Матвиенко юллаған телеграммаларҙы уҡып ишеттерҙе. Шулай уҡ баш мөфтөй төбәк башлыҡтарының һәм илдең дини идаралары, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙәге мөфтиәт етәкселәренең сәләмдәрен еткерҙе. "Ҡорбан байрамы барыбыҙға ла яҡшы эштәр атҡарырға кәрәк булыуын хәтергә төшөрә. Күп милләтле республикабыҙҙа һәм Өфөбөҙҙә ошо йолалаларҙы хөрмәт итеүҙәре шатлыҡлы. Бында барыбыҙ ҙа тыныс һәм килешеп йәшәйбеҙ икән, был Тәлғәт Сафа улы Тажетдиновтың оло ҡаҙанышы. Барыһына ла һаулыҡ һәм именлек теләйем. Артабан да бер-беребеҙҙе күтәрмәләп, хөрмәт итеп һәм яратып, тыныс тормошта йәшәйек, исламды данлайыҡ, яҡшы эштәр атҡарайыҡ", - тине Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев.

*КӨН ТЕМАҺЫ*

# ТАБИП БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...



## табип кәңәшенә ҡолаҡ һал!

**Балаларыбыҙҙың мәктәптәрҙе тамамлап, юғары уҡыу йорттарына һынау тоторға йыйынып йөрөгән мәле. Кемдер инженер, уҡытыусы һөнәрен һайлай, икенселәр - хәрбилекте өҫтөн күрә, ә берәүҙәр табип булырға хыяллана. Йәштәрҙең халыҡҡа хеҙмәт итеп, үҙҙәре матур йәшәргә ынтылыуын, әлбиттә, тик хупларға, уларға уңыштар ғына теләргә ҡала. Бихисап һөнәрҙәр араһындағы табиплыкта туҡталып, бер аҙ фекер йөрөтмәксемен. Отставкалағы хәрби медицина хеҙмәткәре булараҡ, ана шул юлды һайлағандарға бер-ике һүҙем бар.**

Баштан уҡ әйтеп ҡуйырға кәрәк. Егет һәм ҡыҙҙарыбыҙҙың үҙҙәренең киләсәген ошо изге һөнәргә бәйләү ниәте бик яҡшы! Әгәр кемдәргәләр табип булырға яҙған икән, улар быны оло бәхет тип һанарға тейеш. Үҙенең ярҙамы тейгән пациенттарының шатлыҡлы йөҙөн күреп, уларҙың һауығыуынан үҙе үк ғәйәт оло ҡәнәғәтлек кисереп, шунан ҡыуаныс табып йәшәй ул табип халҡы. Һәр ауырыуҙы уңышлы дауалап, һауыҡтырып сығарыу - уның өсөн оло байрам! Иң гуманлы шул һөнәр эйәһе булырға хыял итеүселәргә һәр саҡ изге эштәр генә ҡылып, башҡаларҙан: "Рәхмәт, доктор! Баламды (ҡатынымды, иремде, атайымды, әсәйемде) үлемдән ҡотҡарғаның өсөн үҙең дә ғүмер буйы ҡайғы белмәй йәшә! Изгелегеңде бер ҡасан да онотмаясаҡбыҙ!.." тигән һымағыраҡ тик матур һүҙҙәр ишетеп ғүмер итеүҙәрен теләгем килә. Бынан тыш, әйтәйек, табип йомош менән ниндәйҙер учреждениеға килә. "Ә-ә-ә, доктор килгән, әйҙүк, үт. Ниндәй проблемаларығыҙ бар Фәлән Фәләнович?" Табип, әҙәпле генә итеп, үҙенең үтенесен әйтә. "Эй, нишләп мәшәҡәтләнеп, үҙең килеп йөрөйһөң инде, доктор, телефондан ғына анҡартһаң да булыр ине... Бөгөн уҡ эшләп ҡуйбыҙ уны!" Бына шундай күңелле мәлдәр, әлбиттә, табип тормошонда етерлек.

Әлегерәк, мин хәрби врач булып хеҙмәт итеп йөрөгән дәүерҙә лә, әленән-әле берәй эш менән штабта ултырған юғары командованиеға мөрәжәғәт итергә тура килгеләй ине. "Бындай кешеләрҙең үтенесен бер ҡасан да кире ҡағыу ярамай", - тип һөйләнә-һөйләнә, берәй оло начальник үҙенең урынбаҫарына минең йомошомдо үтәргә бойороуын ишетеп кинәнә инем. Күптәр үҙҙәренең оло байрамдары уңайы менән ғаиләсараларына ҡунаҡҡа саҡырырға тырышыуҙары ла күңелгә ята. Фиҙаҡәр хеҙмәтеңде күреп баһалаған бәгзе берәү һинең хаҡта гәзит-журналдарға ла яҙа. Ҡыҫҡаһы, данға, шөһрәткә күмелеп, йәшә лә йәшә, әйҙә, һис бер ҡайғы-хәсрәт белмәй, шулай бит?

**(Дауамы 6-сы биттә).**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығыҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡайын еләге

❖ Геморройҙан 1 ҡалаҡ ҡайын еләге япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә. Клизма яһарға һәм йыуынырға.

❖ Теш боҙолмаһын өсөн көн һайын ауыҙҙы яңы эшләнгән ҡайын еләге һуты менән сайҡарға.

❖ Тымауҙан боҫло ингаляция яһарға була: ҡайын еләге япрағының ҡайнап торған һыуын йәйенке мискәгә әҙ генә итеп ҡойоп, башты таҫтамал менән ҡаплап, тын алырға. Шул уҡ ваҡытта ошо ҡайнатманы көнөнә 2-3 тапҡыр ашағандан һуң 1 стакан эсергә, ингаляцияны көнөнә 2-3 тапҡыр яһарға, мотлаҡ төнгөләккә лә эшләргә.

❖ Яраларҙан 1 ҡалаҡ ваҡланған ҡайын еләге япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатырға. 2 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә. Яраларҙы йыуырға. Шулай уҡ ҡайын еләгенең яңы әҙерләнгән һуты менән йыуыу ҙа файҙалы. Ә япраҡтарын бешекләп яраға баҫырға ла мөмкин.

❖ Күҙәнәктәр киңәйгәндә (расширенные поры) тирегә ҡайын еләгенең яңы һутын һөртеү яҡшы.

❖ Тире кипкәндә 250 грамм еләк, ярты балғалаҡ сода, 5-10 тамсы спирт, 1/4 стакан һөттө бергә ҡушырға. Килеп сыҡҡан ҡатышманы биткә һөртөп, 15 минут торорға һәм йылы һыу менән йыуып төшөрөргә.

❖ Ҡан баҫымы юғары булғанда көн һайын 1 стакан ҡайын еләген ашарға.

❖ Быуынға тоҙ ултырыуҙан (подагра) көн һайын 3 тулы стакан ҡайын еләген ашарға. 3 аҙнанан хәл яҡшыра. Йәки көн һайын ярты стакан һутын эсергә.

❖ Шәкәр диабетынан көн һайын ярты стакан ҡайын еләге һутын эсергә.

❖ Йөрәк астмаһы булғанда тын ҡыҫылыуҙан 1 ҡалаҡ ҡайын еләге япрағына 2 стакан һыу ҡойоп, ятыһы ҡайнап бөткәнсе утта торорға. Һәр ике сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ **_Пациенттарҙы һайлап булмай, уларҙың барыһын да үҙеңә кәрәгенсә үҙгәртеү ҙә мөмкин түгел. Ә бына үҙең белемле һәм шул уҡ ваҡытта кешегә ифрат яғымлы булырға бурыслыһың. Быныһы - закон!_**



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Баҫыу көйгәнәге



Ата ҡош аҡ ҡорһаҡлы, ҡойроғо-ноң өҫтө лә аҡ, үҙе көл төҫөндә. Инә ҡоштоң ҡорһағы буйлы һыҙ-аттар менән, үҙе иһә ата ҡошҡа ҡарағанда ҡарараҡ. Тауышы көслө.

Рәсәйҙә киң таралған булһа ла, республикала һирәк осрай. Учалы, Әбйәлил күлдәрендә ғалимдарға тап булғаны бар. Ырымбурҙа оя ҡороп йәшәй һәм шунда уҡ ҡыш-лай.

### Болон көйгәнәге



Ҡара ҡанатлы һорғолт ҡош. Инә ҡош менән йәш ҡоштарҙың ҡой-роғо өҫтөндә сыбар нөктәләр бар, йәш ҡоштарҙың ҡорһағы - ерән. "Кек, кек, кек" тип тауыш бирә.

Асылыкүлдә, Кама һәм Ағиҙел йылғаһы үҙәнендә осрай. Көньяҡ Уралда һирәгерәк.

### Ҡамышҡара, һаҙ көйгәнәге



Башҡа көйгәнәктәрҙән айырыл-май тиерлек, бары тик эрерәк, ҡа-рараҡ төҫлө, ҡорһағы ерән йәки аҡһыл, ҡойроғо - һоро. Ҡанаты ла башҡа көйгәнәктәргә ҡарағанда кинерәк.

Рәсәйҙең көнбайыш сиктәренән алып Байкалға тиклем киң тарал-ған. Батҡыл урындарҙа йәшәй, башҡа ҡоштарҙың йоморҡалары, бәпкәләре менән туҡлана. Ҡуйы ҡамыш булған ерҙәрҙә күрергә бу-ла. Көньяҡ Уралда Талҡаҫ күлен-дә, Һаҡмар, Ағиҙел, Урал йылғала-рында теркәлгән. Сыбаркүл, Ҡара-ғайлы күлдәрендә лә был йыртҡыс ҡошто йыш осратырға мөмкин.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*КӨН ТЕМАҺЫ*

# ТАБИП БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...



## табип кәңәшенә ҡолаҡ һал!

**(Башы 5-се биттә).**

Әммә, ҡәҙерле туғандар, тормош әле гел генә "һыңғай иҫмәй" шул. "Капкан һайын ҡаҙы-ял" да һәр саҡ бу-лып тормай. Бына ошо хаҡиҡәтте һәр кем аңларға, тормошҡа реаль күҙлек-тән сығып баҡырға тейеш. Күпмелер аяҙ торған көн дә бер мәл болароып, яуынланып китә. Йәшен, боҙлауыҡта-ры, ел-дауылдары ла етерлек.

**Медицинала һәммә нәмә тик табип те-ләгәнсә генә бармай. Сирҙәрҙең дә төрлөһө була. Бер үк сирҙе төрлөсә да-уалау ҙа кәрәк була ҡайсаҡ. Берәүҙәр-ҙең организмы көслө иммунитетлы, еңел генә һауығып китә, ә икенсеneкe шундай уҡ сирҙе бик ауыр кисерә. Бер пациент тыңлаулы, һинең тәгәйенлә-гән дарыуҙарыңды дөрөҫ кенә ҡулла-на, кәңәштәреңде үтәргә тырыша, ә икенсеһе уға бармаҡ аша ҡарай. Күп-тәр, баштараҡ әйтмешләй, һиңә рәх-мәтле булһа, ҡайһы бер әҙәмдәр һинең ниндәй ҙә булһа берәй етешһеҙлегең-де, кире ягыңды күрергә тырыша, хат-та һинең хаҡта насар һүҙ сығарып та-ратырға әҙер торғандар ҙа осрағылай.**

Беҙҙең гарнизон госпиталдәренең береһендә бер прапорщик үпкәһендә үҫкән яман шештән вафат булып ҡал-ғайны. Хирург уға операция яһауын - яһаған, әммә инде һуңғы стадияһына еткән был сирҙән, әлбиттә, терелтә ал-маған. Үҙ ғүмерендә меңәрләгән ҡат-марлы операциялар яһап, абруй ҡаҙан-ған, полковник дәрәжәһендәге юғары категориялы был хирургты мәрхүмдең туғандары судҡа бирҙе. Йыл да мотлаҡ үтә торған флюорографияны ла инҡар итеп, табипҡа оҙаҡ бармай йөрөгән был пациенттың туғандары, әлбиттә, хаҡлы түгел ине. Әммә, кеше һаулығын һаҡлауға бөтә ғүмерен бағышлаған бы-на ошо докторҙың суд мәлендәге эске кисерештәре хаҡында тик төрлөсә фа-разларға ғына ҡала. Суд яҡлап сығыуы-на ҡарамаҫтан, хирургтың күңел яраһы оҙаҡ ҡына уңалмай йөрөгәндер, тип уйлайым.

**Хирург халҡына ҡайсаҡ йүнәлтеп бул-маҫлыҡ сир йә травма менән дә осра-шырға тура килә бит. Ҡайһы бер табип-тарҙың ошондай осраҡтарға ҡарата әйткән һүҙҙәрен әле булһа иҫләйем. Хеҙмәттәшем, утыҙ алты йәшлек ап-аҡ сәсле медицина подполковнигы Вадим Анатольевич: "Операция мәлендә ба-шымдың бер яртыһы нисек һалдатты үлемдән ҡотҡарып алып ҡалыу тураһ-ында уйлаһа, икенсеһе прокурор иптәште гел иҫтә тота..." - ти торғайны. Тағы бер коллегам: "Пациентыңды ҡотҡара алмаһаң, хәҙер башыңа тондо-рам", тип, операция ваҡытында артым-да берәү күҫәк тотоп торған һымаҡ то-ям",- тип көлдөргәйне. Әлбиттә, был көлкө түгел...**

Аҙналар буйы туҡтамай эскән бер ир-ҙе беҙҙең госпиталгә алып килеп етке-реү менән уның йөрәге туҡтай. Шул па-циентты ҡотҡарып алып ҡалырға ты-рышҡан дежурҙағы терапевҡа ғәйеп та-ғырға маташҡандары ла хәтеремдә. Доктор (беҙҙән яҡташ) тейешенсә дауа-лау ысулдарының барыһын да дөрөҫ атҡарған, әммә оҙаҡ ваҡыт араҡынан ағыуланып, "алкогольная кардиомио-патия" тигән хәлгә барып еткән йөрәк түҙмәгән...

Фәҡәт ошо һөнәргә генә хас булған тағы бер үҙенсәлек. Табип, эш ваҡыты-нан тыш та, бәләгә тарыған кешегә ярҙ-ам итергә бурыслы, хатта уның өсөн яу-аплы ла. Үҙем менән булған бер күңе-лһеҙ хәл иҫемдә. Йәй көнө, хәрби ҡала-сыҡ ситендәге күлгә һыу төшөргә бар-ғанымда, бер балаға ярҙам күрһәтергә маташып та, уны ҡотҡара алмағаным хаҡында. Әйткәндәй, табип та башҡа кешеләр һымаҡ ял итергә хоҡуҡлы. Шулай, бер мәл, йәкшәмбе көн һыу буйына ике улымды эйәртеп алып ба-рҙым. Башҡаларҙан ситтәрәк урында бер аҙ йөҙөп, арып, ярға сығып ултыр-ҙыҡ. Алыҫтараҡ, бер урында ир кеше-ләр һыуға сумғылағанына иғтибар ит-тем. Һыу аҫтында бер нәмә эҙләйҙәр бу-ғай. Яҡынырaҡ барып һораштым. Бер малай батты, тиҙәр. Мин дә, башҡалар-ға ҡушылып алып, тәрәнлеге 2-3 метрға еткән, ныҡ ҡына бурьяҡланған һыуға сумып, батыусыны эҙләшә башланым. Ҡыҫҡаһы, әлеге баланы тап минә та-бырға насип булған икән. Хәрәкәтһеҙ кәүҙәне һыу төбөнән һөйрәп сығарҙым. Уны ярға алып барырға кешеләр ярҙам итте. Малайҙың тере түгеллегендә ши-гем дә юҡ, әммә, минең алдымда "үлем-де констатациялау" мәсьәләһе тормай ине. Бер нәмәгә ҡарамаҫтан, табиплыҡ бурысыма ярашлы, уға беренсе ярҙам күрһәтергә тотондом. Яһалма тын ал-дырып, йөрәгенә "непрямой массаж" да яһалды. Шул арала госпиталдән "ско-рый" килеп етте. Хатта йөрәгенә укол да ҡаҙап ҡараныҡ, әммә, һыу аҫтында ун биш минуттан ашыу ятҡан кешенең тере сығыуы мөмкин түгел шул (кеше тонсоғоп үлеү өсөн 5-7 минут етә). Үсмерҙең йөрәген эшләтеп ебәреп бул-маны... Шуның менән генә эш тамам-лаһа икән ул. Бер нисә көндән бала-ның әсәһе мине эҙләп килеп тапҡан (һыу буйында ул балаһы янында юҡ ине). "Балаһына тейешенсә ярҙам күрһәтә алмаған" өсөн ашығыс ярҙам табибына, минә лә ныҡ ҡына ороро көйәләнеүен белдерҙе. Судҡа биреүен-бирмәне ул, әммә, үҙебеҙҙең "дөйә түгеллегебеҙҙе" уға аңлатып биреү, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, еңелдән булманы. Һис бер ғәйебем булмауына ҡарамаҫтан, күңелдә барыбер ҙә ниндәйҙер яман "тут" ҡалды...

Пациенттарҙы һайлап булмай, улар-ҙың барыһын да үҙеңә кәрәгенсә үҙгәр-теү ҙә мөмкин түгел. Ә бына үҙең бе-лемле һәм шул уҡ ваҡытта кешегә иф-рат яғымлы булырға бурыслыһың. Бы-ныһы - закон! Табип үҙ һөнәрен яҡшы үҙләштерергә, уның өсөн алты йыл ғы-на түгел, ә ғүмер буйы уҡырға ла тейеш. Белемле булып та, кешеләргә тупаҫ мөнәсәбәт күрһәтеү был һөнәр өсөн бөтөнләйгә ят. "Чё тебе надо, чё ко мне пришел?" "Это не мой профиль, иди к неврологу!" "Не ври, чё пытаешься си-мулировать?" "У тебя ничего не болит, иди отсюда!" "У меня прием окончен, завтра придешь!" Табиптан бына ошо-ноң һымаҡ һүҙҙәрҙе кемдең ишеткеһе килер ине? Дөп-дөрөҫ, бер кемдең дә!

**Әгәр ҙә шулайыраҡ тонда һөйләшә тор-ған ғәҙәтең бар икән, медицинаға бө-төнләйгә яҡын юлау ярамай. Үҙең ниндәй генә насар кәйефтә булма, па-циентың был хаҡта белергә тейеш түгел. Иғтибар менән тыңлап, уға яғым-лы һүҙҙәр таба белеү кәрәк.**

Аллаһ илсеһе бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с. "Үҙеңә теләмәгән нәмәне бер ва-ҡытта ла башҡаларға теләмә", тип әйт-кән хәҙисе бар.

Килеһе нәмәне лә иҫтә тотоу фарыз.

**Әгәр ошо профессияны һайлағанһың икән, нисек кенә арыған булһаң да, хат-та төн уртаһында ла дауаханаға саҡыр-тһалар, унда барырға бурыслыһың. Сирле кеше һинең күңеленә ятып ет-мәһә лә, барыбер һин уға ярҙам итергә тейешһең.**

Бер мәл, инженер һөнәрле бер хәрбигә йомошом төштө (ниндәйҙер бер аппа-ратты йүнәттергәйнем). Минең йомо-шом үтәлгәс, теге ағай, һис тартынып тормаҫтан, минә: "Доктор, с тебя - пу-зырь!" - тине. Мин, әлбиттә, унан быны көтмәгәйнем, шулай ҙа риза булдым, уға бер шешә ҡуйырға тура килде. Ә иң ҡыҙығы шул: бер нисә көндән мине төн уртаһында госпиталгә саҡырҙылар. Ҡа-бул итеү бүлегендә әлеге ағай муйынын алға һоноп ултыра, ауыҙынан бер туҡ-тауһыҙ шайыҡ аға... Тамағына балыҡ һөйәге ҡаҙалған икән. Махсус инстру-менттар ярҙамында балыҡ ҡылсыған алып ташланым. "Доктор, спасибо большое!" - тине ул. Һәм миңә шунан башҡа бер ни ҙә кәрәк түгел ине. "Кәрәк" тигәндән, хөрмәтле абитури-енттарға тағы шуны әйтәйем тигәйнем:

**Үҙегеҙ күрһәткән ярҙам өсөн ауырыуҙ-ан ниҙер һорау мөмкинлеге тураһында ғүмерлеккә онотоу хәйерле. Бына ошо-ноң һымаҡ тормоштағы һәр төрлө ҡы-тыршылыҡтарға сабырлыҡ ҡылып эшләүгә әҙер булһаң ғына табип һөнә-рен һайлау мөмкин. Ә инде түҙемлегең етмәҫтәй икән, кеше һаулығы менән бәйләнмәгән башҡа төр кәсеп эҙләү яғын ҡарау кәрәк.**

Был миҫалдарҙы, әлбиттә, буласаҡ табиптарҙы ҡурҡытыу өсөн килтермә-нем. Бер яҡтан, маҡтаулы булған эшең-де һәр саҡ кеше ғүмере өсөн оло яуап-лылыҡ тойғоһо оҙатып барасағы ха-ҡында ғына иҫкәртеүем. Бөгөнгө көндә һәр ҡасабала ҙур абруйлы, халҡыбыҙ-ҙың оло ихтирамына лайыҡ булған докторҙарыбыҙ күп. Уларҙың барыһы ла ел-дауыллы, яуынлы-йәшенле бор-ма-борма юлдар үткән кешеләр булы-уына иманым камил. Күптән түгел иле-беҙҙең табип һәм табибәләре йөнен-тәнен аямай, ковид тигән афәтҡә лә ҡаршы тороуы, күптәренен, нәҡ һуғыш яланындағы һымаҡ ана шул иҫе шул юлда һәләк булыуы хаҡында ла беләбеҙ.

Абитуриенттарыбыҙға, буласаҡ та-биптарыбыҙға, шундай һәр төрлө ауыр-лыҡтарға һис кенә лә бирешмәй, ки-ләсәктә ысын доктор булырға Аллаһ Тәғәлә насип итһен!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ, отставкалағы хәрби табип.**

✓ *Оран - ҡәбиләләштәр бер-беренде таныу өсөн шартлы саҡырыу. Уны башҡа ырыу-ҡәбилә халҡы белергә тейеш түгел, тип иҫәпләнгән, сөнки уның аша тотош ырыуға зыян килтерергә мөмкин, тип һаналған.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# САЛАУАТ ЮЛАЕВТЫҢ ҠУЛҒА АЛЫНЫУЫ



**Салауат Юлаевтан тәүге һорау алыу протоколы һаҡланмаған. Салауаттың һорауҙарға нисек яуап биреүе хаҡында беҙ Аршеневскийҙың, ул саҡта Салауат һәм уның атаһы Юлай Аҙналин өҫтөнән тәфтиш итеүсе Өфө провинциаль канцелярияһының махсус һорауына яуап итеп, 1775 йылдың 6 майында генерал Фрейманға яҙған ҡыҫҡа һәм фрагментар булған хаты буйынса һүҙ йөрөтә алабыҙ.**

Салауаттың яуаптары хаҡындағы Аршеневский рапортының шундай ҡыҫҡа булыуының, беҙҙең ҡарашҡа, билдәле сәбәптәре бар. Беренсенән, Аршеневский Фрейманға рапорт яҙған саҡта унда Салауаттан һорау алыу протоколы булыуын белгән, сөнки ул ошо протоколды Салауат ҡулға алыныу менән үк ебәргән була (был хаҡта әлеге май рапортында ла туранан-тура әйтелә). Икенсенән, Салауаттан һорау алыуға ярты йыл үтеүгә подполковниктың ҡайһы бер нәмәләрҙе онотоуы ла мөмкин. Шуға күрә Аршеневский Салауаттың ҡасан һәм кем тарафынан тотолоуы хаҡындағы һорауға яуап яҙғанда Салауат һөйләгәндәрҙең төп йөкмәткеһен төшөрөп ҡалдыра һәм бар иғтибарын ҡулға алыныусының бирелергә теләге булмауына, ҡаҙаҡ далаларына ҡасып китергә ҡарар итеүенә йүнәлтә. Аршеневский Салауатты һәм уның атаһын "кешелекһеҙ", "уҫал ниәтле" булыуҙа ғәйепләй, шул уҡ ваҡытта, йәнәһе, башҡорт халҡының Салауат Юлаевтың ҡулға алыныуын хуплауы хаҡында яһилдарса ялған хәбәр таратыуҙан да тартынмай. Һуңынан Салауат Аршеневскийҙа үҙенән тәүләп һорау алыу тураһында Мәскәүҙә, Сенаттың Йәшерен экспедицияһында һорау алғанда иҫкә ала, уны шул саҡта таяҡ менән туҡмауҙары хаҡында ла әйтә.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Ҡалмаҡлар ауылында Салауаттан һорау алыу хаҡында башҡа мәғлүмәттәр һаҡланмаған. Аршеневский үҙенең артабанғы рапорттарында Салауатты башҡорт старшинаһы тип атауына ҡарағанда (ысынбарлыҡта Салауаттың ундай вазифаһы булмай), ул ентекле тикшереү үткәрмәгән, сөнки иң тәүҙә һорау алыныусы хаҡында аныҡ биографик мәғлүмәттәр бирелергә тейеш була.

1774 йылдың 25 ноябрендә Салауаттан һорау алыу протоколы Аршеневский яҙған рапорт менән Өфөгә, генерал Фрейманға ебәрелә. Икенсе көндә үк Фрейман генералдар А.В. Суворов һәм А.Д. Скалонға Салауаттың әсиргә алыныуы хаҡында хәбәр итә. 2 декабрҙә ошо хәбәр баш командующий П.И. Панинға ла еткерелә. Ул шундуҡ "баҫтырылған бунттың төп башлыҡтары"ның береһе булған әсиргә алыныусыны нисек итеп язалау хаҡында күрһәтмә һорап, императрицаға мөрәжәғәт итә. Панин үҙе лә тәфтиш эштәре барышында, "башҡорт халҡының төп юлбашсылары" Салауат һәм уның атаһы Юлай Аҙналиндың ғәйеп кимәлдәрен билдәләүҙән тыш, башҡорттарҙың ни сәбәпле ихтилалға күтәрелеүҙәрен, уларҙың Пугачев һәм баш күтәргән казактар менән бәйләнештәрен асыҡлау кәрәклеге тураһында үҙенең тәҡдимдәрен индерә.

Панин яҙғанса, Салауат менән Юлай "быть в сердце башкирскаго народа казнены для прочнейшаго онаго на будущия времена устрашения". Ул Салауатты ҡулға алғанда әүҙемлек күрһәткән поручик Лесковскиға капитан званиеһын биреүе хаҡында хәбәр итә. Үҙенең реляцияһында генерал-аншеф Салауаттың һәм уның атаһының нисек ҡулға алыныуы тураһында ентекле донесение ебәрә.

Салауаттың исеме Екатерина II батшабикәгә 1774 йылдың февралендә үк билдәле була, сөнки уға каратель ғәскәрҙәре командующийы, генерал-аншеф А.И. Бибиков Пугачев атаманы И.С. Кузнецовтың, полковник Салауат Юлаевтың һәм уларҙың арҡадаштарының 1774 йылдың 20 ғинуарында Көнгөр властарына һәм халҡына ҡаланы үҙ иректәре менән баш күтәреүселәргә биреү кәрәклеге хаҡындағы мөрәжәғәтенең бер нөсхәһен ебәрә. Был документ императрицаның Пугачевтың һәм уның ярандарының ҡулға эләккән документтарын юҡ итеү хаҡындағы 11 ғинуарҙа иғлан ителгән исемле указына һәм Хәрби коллегияның 1774 йылдың 4 ғинуарындағы указына ярашлы юҡ ителмәй ҡала, сөнки Бибиков ошо мөрәжәғәттәге, ул үҙе яҙғанса, "чаянную дерзость" хаҡында императрицаның үҙенә белдерергә ҡарар итә. Һуңынан Екатерина II хөкүмәт ғәскәрҙәренең башҡа командующийҙары донесениеларынан, йәшерен комиссиялар начальнигы П.С. Потемкиндан Салауаттың хәрби уңыштары һәм хәрби начальниктарҙың уның хаҡында "Пугачевтың билдәле эйәрсәне", "башҡорт халҡы араһында төп ҡотҡосо" тигән фекерҙәрен белә. Екатерина, ул үҙе Пугачев һәм уның арҡадаштары өҫтөнән Мәскәүҙә тәфтиш эштәре һәм хөкөм ойоштороу менән шөғөлләнгән көндәрҙә (1774 йылдың 5 декабрендә) Паниндың реляцияһын ала һәм 1775 йылдың 27 ғинуарында ғына Панинға Салауат менән уның атаһын Мәскәүгә Сенаттың Йәшерен экспедицияһына алып килеү хаҡында рескрипт ебәрә.

Салауат Юлаевтың ҡулға алыныуы хаҡында билдәле булыу менән Панин 1774 йылдың 6 декабрендә Аршеневскийға бойороҡ бирә: "Злодея Салаватку и взятых с ним есаула, писаря и двух башкирцов..., заковав, особливо перваго, в ручныя и ножныя кандалы, за караулом отправить немедленно в Казань к тамошнему господину губернатору". Шул уҡ көндә Тимашевҡа Силәбелә ҡулға алынған Юлай Аҙналинды ла Ҡаҙан ҡалаһына ебәреү хаҡында ордер ебәрелә: "Под караулом и заковав в железа". Панин, Ҡаҙан губернаторын ныҡ киҫәтә: Салауатты һәм Юлайҙы, ҡулдарын һәм аяҡтарын бығаулап тоторға, стенаға тимер сыйныр менән бәйләп ҡуйып, уларҙы һаҡ аҫтында тотоуҙы шәхси күҙәтеп торорға бойора: "до решения об них или от ея императорского величества, или от меня собственно".

**Инга ГВОЗДИКОВА,**
**тарих фәндәре кандидаты.**
**"Салават Юлаев. Исследование документальных источников" китабынан.**
**(Дауамы. Башы 23-сө һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*

# ТАМҒА, ҠОШ ҺӘМ... ОРАН

**Башҡорттарҙың ырыу-ҡәбилә берләшмәләре тормошонда ырыу символдары: тамға, ҡош, ағас, оран мөһим роль уйнаған. Улар ҡәбилә ҡоролошо башланған осорҙа барлыҡҡа килеп, ырыу-ҡәбиләнең берлеген кәүҙәләндергән. Үкенескә күрә, ырыу ойошмалары тарҡалғас, күп атрибуттар юғалған.**

Бөгөн, Раил Кузеев билдәләүенсә, 3,5 мең ырыу тамғаһы билдәле. Күп булыуына ҡарамаҫтан, ырыу тамғалары быуындан-быуынға тапшырыла килеп, боронғолоҡто һаҡлап торған. Шуға күрә, ырыуҙар, ырыу-аралары бүленешендә төрлө варианттар булыуға ҡарамаҫтан, төп тамғаларҙы бер нисә ҙур ырыуға ҡайтарып ҡалдырырға мөмкин. Әммә был тамғаларҙың килеп сығышы һаман да ахырынаса өйрәнелмәгән, шулай ҙа тарихсылар уларҙың ниндәй ырыуға ҡарағанлығын һәм был тамғаларға эйә кешенең теләһә ниндәй шәхси милеккә хоҡуғын раҫлап булыуын белдерә.

Асылы буйынса тамға ниндәйҙер тотем хайуанының эквиваленты ла, әләмдәрҙә төшөрөлгән үҙенсәлекле геральдик билдә лә булыуы мөмкин. Шулай уҡ ул һаҡлау функцияларын да үтәгән. Мәҫәлән, уны күсмә һәм ярымкүсмә тормошта әһәмиәтле тип һаналған предметтарға: ҡоралға, малға (хәрби аттарға, өйөр айғырҙарына һ.б.) һалғандар. Йәмғиәт ҡатламдарға бүленә, тормошобоҙға Ислам дине үтеп инә башлағас, тамғалар ҡабат шәхси милек билдәһе булып ҡала. Шәхси һәм ғаилә тамғалары барлыҡҡа килә.

Тамғанан айырмалы, ырыу ағасының һәм ҡошоноң тәғәйенләнеше икенсерәк була. Уларҙа башҡорттарҙың анимистик ҡарашы сағыла. Башҡорттарҙың хәтерендә ҡәбиләләрҙең һәм ҙур ырыуҙарҙың ҡайһы бер изге ҡоштарының һәм ағастарының атамалары һаҡланып ҡала. Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: ырыу ҡоштарының күпселеге - ыласындар класына (бөркөт, шоңҡар, ҡарсыға һ.б.), ә ағастар - ылыҫлы тоҡомдарға (ҡарағас, ҡарағай һ.б.) ҡарай.

Оран - ҡәбиләләштәр бер-беренде таныу өсөн шартлы саҡырыу. Уны башҡа ырыу-ҡәбилә халҡы белергә тейеш түгел, тип иҫәпләнгән, сөнки оран сакраль әһәмиәткә эйә булған, уның аша тотош ырыуға зыян килтерергә мөмкин, тип һаналған. Оран ҡәбиләләштәр араһында бары тик хәрби бәрелештәр йәки үлем хәүефе янағанда ғына ҡулланылған. Йәғни ҡәбиләләштәр ырыуҙың ҡанбаларына ярҙам һорап күмәкләп мөрәжәғәт иткән. Алыш алдынан йәки бәрелеш ваҡытында оран ҡысҡырыу изге билдә тип һаналған.

Башҡорттарҙың ырыу символикаһы элементтарының уртаҡлығы әруахтарҙың йәне башта ағасҡа, һуңынан ҡошҡа әйләнә, тип күҙаллауҙан килеп сығырға мөмкин. Илгә афәт килгән йәки ауыр мәлдәрҙә уларҙы оран ярҙамында "уятырға" була. Йәғни был символикалар мәжүсилек осоронан алып йәшәй.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

62-се гв. атлы полкының 2-се эскадронының пулемет расчеты командиры, гв. старшинаһы Павел Борисевич (Гомель ҡалаһынан). 1945 йылдың 30 ғинуарында Одер йылғаһы аша сығып, ҡаршы ярҙа дошман позицияларын утҡа тота, эскадронға алға табан хәрәкәт итеү мөмкинлеген бирә. 31 ғинуарҙа дошмандың терәк пункты булған Янни ауылына һөжүм иткәндә көслө пулемет уты менән немец һалдаттарына баш ҡалҡытырға ла ирек бирмәй, эскадрондың уңышлы атакаһына булышлыҡ итә; 58-се гв. атлы полкының 76-миллиметрлы батареяһы командиры, гв. капитаны Шәрифйән Ҡаһарманов, элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булған (Стәрлебаш районның Ҡарағош ауылынан). 29 ғинуарҙа Унруштадт ҡалаһынан көньяҡтараҡ, полк канал аша сыҡҡан саҡта, капитан Ҡаһарманов, орудиеларынан тура наводка менән атып, дошман позицияларына көслө ут аса. Полк канал аша юғалтыуҙарһыҙ сыға һәм боевой бурысын уңышлы үтәй. Әммә батыр офицер ошо алышта алған яраларынан вафат була; 148-го гв. артминполкының ут взводы командиры ярҙамсыһы, гв. старшинаһы Нурислам Бикташев (Йомағужа районының Әбит ауылынан). Көнбайыш Польша ерендә барған һөжүм итеү операциялары барышында, Томашув-Мазовецки, Лодзь, Калиш ҡалалары өсөн барған алыштарҙа Бикташев үҙен ҡыйыу һәм тәүәккәл командир итеп күрһәтә. Немецтарҙың контратакаһы һөҙөмтәһендә взводтың бер өлөшө төп колоннанан айырылып ҡала. Шул мәлдә Бикташев, түңәрәк оборона ҡороп, дошман һалдаттары һөжүмен кире ҡаға; 62-се гв. атлы полкының 76-миллиметрлы батареяһы тоҫҡаусыһы, гв. сержанты Лоҡман Ғайсин, элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнгән (Бүздәк районының Көбәк ауылынан). 29 ғинуарҙа Радевитш ҡалаһы өсөн барған алышта, тура наводка менән атып, немецтарҙың орудие расчетын юҡ итә, уларҙың өс пулеметының утын баҫтыра; 60-сы гв. атлы полкының 1-се эскадроны ҡылыссылар взводы командиры ярҙамсыһы, гв. старшинаһы Георгий Титовкин, элегерәк ике Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булған (Алтай крайында тыуып үҫкән). 29 ғинуарҙа ул Радевитш ҡалаһы янында беренсе булып Фаук-Обра йылғаһы аша сыға, дошман траншеяларында унлап немец һалдатын юҡ итә. Ул һәр бер алышта яуҙаштарына өлгө була, шәхси ҡаһарманлығы менән уларҙы алға әйҙәй.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**Ауылдарҙың нисек йәшәгәнен белгең килһә, уларҙағы белем усағының торошона иғтибар ит, тиҙәр. Ҡаланың да хәлен ошо күрһәткес буйынса самалап була торғандыр. Быға Ишембай ҡалаһындағы Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡыусылары Яҙгөл ХӘЙРУЛЛИНА, Азалия ИБӘТУЛЛИНА, Данир ДӘҮЛӘТБАЕВ, Ғәзинур ҠӘҘЕРҒОЛОВ менән әңгәмәбеҙ бер миҫал булыр. Был һөйләшеүҙе һеҙҙең иғтибарға ла тәҡдим итәбеҙ.**

# ЯРАТҠАН яһалма интеллект

**Тәү сиратта үҙегеҙ менән таныштырып үтегеҙ әле, балалар.**

**Азалия:** Минең тамырҙарым Ғафури районында. Ғаиләбеҙ менән Ишембай ҡалаһына йәшәргә күскәс, икенсе кластан ошо гимназия-интернатта белем алам. Тәүҙә өйрәнеп китеүе ауырыраҡ та булғайны, сөнки бында кешеләр икенсерәк, ауылдағы һымаҡ түгел, һәр береһенә үҙенсә юл табырға кәрәк. Шулай ҙа яйлап күнектем, йыр-бейеүгә йөрөй башланым. Баланың яҡты киләсәген тәьмин итеү өсөн бында мөмкинлектәр, шарттар айырыуса күп, шуға нәҡ ошо гимназияла уҡыуым менән бәхетлемен. Быйыл мин 11-се класты тамамлайым. Әлеге көндә Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырам һәм вокал буйынса шөғөлләнеүемде дауам итәм. Сөнки З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының вокал бүлегенә уҡырға инергә теләйем. Өлгәшемә килгәндә, тик "бишле"гә генә уҡыным, төрлө олимпиадаларҙа әүҙем ҡатнаштым.

**Яҙгөл:** Ә.З. Вәлиди исмендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатында мин 3-сө кластан уҡыйым, хәҙер инде 8-се класты тамамланым. Шулай уҡ ҡалаға ғаиләбеҙ менән күсеп килдек, Ишембай районы Кинйәкәй ауылынанбыҙ. Башланғыс кластарҙа уҡығанда конкурс-фәләндәрҙә бик әүҙем ҡатнашып барманым, ә бына 5-се класта башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусым, һәләтемде күреп, мине төрлө олимпиада һәм конкурстарға йөрөтә башланы. Бишенсе класта уҡығанда "Гагарин кубогы"нда, башҡорт теленән төбәк-ара олимпиадала ҡатнаштым, үҫә төшкәс, фәнни-ғәмәли конференцияларҙан ситтә ҡалғаным юҡ. Йыл һайын үткәрелгән Н. Мусин уҡыуҙары, Ж. Кейекбаев уҡыуҙары, Кесе фәндәр академияһында ла әүҙемлек күрһәтәм. "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпоһын тулыһынса ятлап, былтыр Бөрйән районында үткән төбәк-ара бәйгелә икенсе урынға лайыҡ булғайным, быйыл да ҡатнашырға әҙерләнәм. Майҙа Стәрлетамаҡта муниципаль этапта еңеү яуланым инде, хәҙер йәйгеһен Өфөлә ойошторolасаҡ ярышты түҙемһеҙлек менән көтәм. Быйылғы уҡыу йылында башҡорт теленән тыш, тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү фәндәренә лә күберәк иғтибар бирә башланым. Йәмғиәтте өйрәнеү, рус теле, астрономия буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһының муниципаль этаптарында үҙ көсөмдө һынап ҡараным һәм барыһында ла призер булдым. Бына шулай барыһына ла өлгөрөргә тура килә, был, бер яҡтан, еңел түгел, әммә ҡыҙыҡ.

**Данир:** Мин туғыҙынсы класта белем алам һәм барыһы ла еңел бирелә, тип әйтә алам. Уҡыуҙа ла һынатмайым, спортта ла алдынғылар рәтендәмен. Гимназия-интернатта уҡыуы бик оҡшай, һәр тәнәфестә өҫтәл теннисы уйнайбыҙ. Ә инде олимпиадаларға килгәндә, икенсе кластан уҡ ҡатнаша башланым. Быйыл ғилми-ғәмәли конференцияла икенсе урын алдым, экология буйынса республика олимпиадаһында призер булдым. Класташтар менән өҫтәл теннисы буйынса ҡалала беренсе урын яулап һөйөндөк. Үҙем биология, химия, экология, физик культура дәрестәрен айырыуса яратам һәм Төп дәүләт имтиханын да ошо предметтарҙан тапшырҙым.

**Ғәзинур:** Мин әле 5-се класта уҡыйым. Был гимназия-интернатта уҡыуы бик күңелле. Беренсе кластан уҡ "Аҡтайлаҡ" уҡ атырға өйрәнеү түңәрәгенә йөрөй башлағайным, 3-сө кластан ҡурайҙа ла шөғөлләнәм. "Уғатар" бәйгеһендә беренсе урын да алдым. Тағы ла тасуири итеп яттан шиғыр һөйләү конкурстарында ла яратып ҡатнашам, еңеүҙәрем дә бар. Ә үҙемә биология, география, рус теле дәрестәре бик оҡшай. Башҡорт теле дәрестәрен дә яратам.



**Һеҙҙең, балаларҙың һәләттәрен үҫтереү өсөн был белем усағында ниндәй шарттар булдырылған?**

**Яҙгөл:** Беренсенән, бик талапсан, көслө уҡытыусылар эшләй бында. Беҙҙең барлыҡ уҡытыусыларыбыҙ ҙа теләге булған бала менән ихлас шөғөлләнергә, олимпиада һәм төрлө ярыштарға әҙерләргә генә тора. Икенсенән, һәр кемдең күңеленә яҡкан йүнәлештәрҙә һәләттәрен үҫтереү мөминлеге бирелгән - түңәрәктәр бихисап.

**Азалия:** Сығарылыш уҡыусыһы булғас, күңелемә бер аҙ моңһоу ҙа әле. Сөнки уҡытыусыларҙы бик яратам, улар һәр уҡыусының күңеленә юл таба белә, беҙ уларҙың ауыҙына ҡарап ҡына тыңлап ултыра торғайныҡ. Айырыуса башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә Ғәлиә Миҙхәт ҡыҙы Кәлимуллина биргән тормош һабаҡтарын һағынырмын инде. Сөнки ул балаларҙың ижади һәләттәрен дә аса белә, тормошҡа икенсе ҡараш уятырға этәргән төрлө һабаҡтарын да бирә. Беҙҙең гимназияла уҡыған барлыҡ балаларҙың да тәртипле булыуы ла уҡытыусыларҙың хеҙмәте икәнен аңлайым. Шулай уҡ уҡыусылар өсөн төрлө саралар бик йыш үткәрелә бында һәм шул рәүешле алға ынтылыш та уятalар, күтәрмәләп торалар. Интернатта йәшәгән тиҫтерҙәребеҙ ҙә булдырылған шарттар менән ҡәнәғәт икәнен беләм.

**Данир:** Мин ҡурай түңәрәгендә шөғөлләнәм һәм күптән түгел халыҡ уйын ҡоралдарында уйнау буйынса үткәрелгән бер Рәсәй кимәлендәге конкурста икенсе дәрәжәләге лауреат булдыҡ. Уҡыу йылы аҙағы булһа ла, театр түңәрәгенә йөрөй башланым һәм әле спектакль сәхнәләштереп ятабыҙ. Гимназия-интернат замандан да ҡалышмаҫҡа тырыша: робот техникаһы кеүек бөгөн актуаль йүнәлештә лә түңәрәк эшләй. Ғөмүмән, илдә IT-технологиялар өлкәһендәге үҫеш, белгестәргә ҡытлыҡ уларҙы мәктәптәрҙә үк маҡсатлы тәрбиәләргә этәрә.

**Ә һеҙҙең көн тәртибе ниндәй? Ваҡытығыҙҙы файҙалы үткәрәһегеҙме?**

**Азалия:** Ваҡытты дөрөҫ бүлмәйенсә һис булмай, шунһыҙ бер ҡайҙа ла өлгөрөү мөмкин түгел. Минең ваҡытымды файҙаһыҙ үткәрергә бер генә минутым да юҡ, хатта телефонға ла ваҡыт табылмай. Сөнки дәрестәрҙән сыҡҡас, Йәштәр һарайына йырларға, үҙебеҙҙең музыкаль төркөм менән репетициялар үткәрергә йүнәләм. Беҙ көйҙәр ижад итәбеҙ, мин йырлайым. Шулай уҡ быға тиклем Ишембай ҡалаһы телевидениеһында ойошторолған "25-се кадр" тигән түңәрәккә лә йөрөгәйнем, унда минең һымаҡ йәштәр яңылыҡтар төшөрөргә, урамда ҡала халҡынан фекерҙәр йыйырға өйрәндек. Үҙем ижад иткән йырға беренсе клибымды ла шунда төшөргәйнек. Мин шулай бик тынғыһыҙ кеше.

**Данир:** Бында саҡта дәрестәр араһында дуҫтар менән теннис уйнайым, ҡайсаҡ дәрестәрҙән һуң ҡалып та уйнап ҡайтабыҙ. Ә бына өйгә ҡайтҡас, ваҡытты нисек үткәреүгә ҡағылышлы аныҡ ҡына пландар ҡормайым, шуға бөтә эштәрҙе лә эшләп өлгөрмәгән саҡтарым да булғылай. Шулай ҙа көнөнә 1 сәғәт булһа ла гитарала уйнарға, спорт менән шөғөлләнергә тырышам һәм ҡалған ваҡытымды уҡыуға бағышлайым. Компьютер менән телефонға ла ваҡыт табыла, шунһыҙ булмай. Уйындарҙан бигерәк, Ютуб каналындағы файҙалы видеояҙмаларҙы ҡарарға яратам: унда химия, тарих буйынса бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр күп. Быna яңыраҡ ҡына Бөйөк Ватан һуғышы тураһында теүәл һәм схемалы ғына итеп эшләнгән картаны өйрәнеп ултырҙым. Көн шулай үтә лә китә инде.

**Яҙгөл:** Быйыл мин түңәрәктәргә йөрөмәйем, сөнки бик яратып йөрөгән телестудия түңәрәге быйыл эшләмәне. Шуға, дәрестәрҙән ҡайтҡас, өйгә эштәрҙе башҡарам, олимпиадаларға әҙерләнәм, китаптар уҡыйым, "Урал батыр" эпосын ҡабатлап торам. Интернеттан документаль һәм художестволы фильмдар, олимпиадаға әҙерләнгәндә файҙалы видеолар һәм яҙмалар ҡарап алам. Әммә уҡыуҙа ла, ялда ла сама белергә кәрәк, тип уйлайым.

**Ғәзинур:** Беҙҙең "Аҡтайлаҡ" түңәрәгенә уҡ атырға унға яҡын уҡыусы йөрөй. Был шөғөлөм миңә айырыуса оҡшай, 15 метр алыҫлыҡтағы сәпкә лә тейҙерә алам. Уҡ атыу - ул көс бирә. Шайморатов класында уҡығас, тағы ла сафта йөрөү, атыу әҙерлеге, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте кеүек дәрестәрҙе лә уҡыйбыҙ. Унда автоматты һүтеп йыйырға, атырға ла өйрәнәбеҙ. Мин автоматты 2 минут эсендә һүтеп йыям, ә иң етеҙҙәр быны 20-30

> ***Башҡорт телен белеү ғаиләнән киләлер, тип уйлайым. Атай-әсәй башҡортса һөйләшә икән, бала ла һөйләшәсәк. Ә үҙҙәре һөйләшмәгән атай-әсәй балаһына нимә генә тип әйтеп, күпме генә нәсихәт уҡымаһын - һөҙөмтә булмаясаҡ. Мине ғәжәпләндергән һәм уйландырғаны бына нимә: "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәрҙең конкурсы кеүек сараларҙа сәхнәлә матур итеп башҡортса һөйләшеп торған тиҫтерҙәремдең унан төшкәс үк русса аралаша башлауы. Бына шундай күренештәр булмаһын ине ул, туған телебеҙҙе беләбеҙ икән, үҙ-ара ла башҡортса һөйләшергә кәрәк.***

✓ *Йәштәр генә түгел, бөтә кешеләр илһөйәр булһын өсөн уларға яҡшы, уңайлы шарттар булдырыу йәһәтенән эштәр атҡарылырға тейеш илдә. Социаль-иҡтисади мәсьәләләр дөрөҫ хәл ителергә тейеш.*

секундта ла эшләй алалар. Уҡыуҙан һәм түңәрәктәрҙән буш саҡта телефонда яраҡлап уйындарымды уйнап алам, Ютубта төрлө роликтар ҡарайым. Бер ҙә өлгәшкә, дәрес әҙерләргә йөгонтоһо юҡ был мауығыуҙарҙың, ударникмын.

**▸ Гимназия-интернатта хеҙмәт тәрбиәһе лә бирәләрме?**

**Йәҙгөл:** Көн һайын кластан бер уҡыусы дежур була һәм дәрестәр араһында таҡтаны һөртөп әҙерләп ҡуйырға тейешбеҙ. Ҡайһы саҡ гөлдәргә һыу һибәбеҙ. Каникулдарҙан алда класс бүлмәһендә саңдарҙы һөртөп, йыйыштырыу гәҙәте лә бар. Яҙын-көҙөн гимназияның эргә-тирәһен йыйыштырыу, сәскәләр сәсеү кеүек ҡулдан килгән эшкә лә ҡушалар. Бындай тәрбиәнең булыуы һис тә насар түгел, өйрәнпа, ата-әсәйем мине сәхнәлә күреп, һәләтем барлығын танып, йырсы булыу теләгемде ҡабул итте. Балаларҙы яҡлау көнөнә килгәндә, урамдарҙа һәм башҡа йәмәғәт урындарында балаларға ҡарата насар уйлы кешеләрҙән аралау мөһим. Балаға кәнфит бирәм тип алдаштырып, йәки артынан эҙәрлекләп килгән өлкәндәр ҙә булғылай бит...

**Йәҙгөл:** Эйе, яуызлыҡтан яҡлау кәрәк балаларҙы. Ҡалала үҫкәс, яҡындарым һәр ваҡыт киҫәтеп кенә тора мине, моғайын, башҡа тиҫтерҙәремдең ата-әсәләре лә шулай итәләр. Ишембайҙа мин кеше күп булған урамдарҙан ғына йөрөргә тырышам һәм шуға ҡурҡмайым былай.

**Данир:** Ҡыҙғанысҡа күрә. Ишембай бик үҡ хәүефһеҙ ҡала түгел шул. Айырыуса юлдарҙа һаҡ булырға кәрәк: машина һәм компьютер уйындары уйлап сығарырға ла кәрәк. Беҙҙең быуынға шулар ҡыҙыҡ.

**▸ Яҡын киләсәккә күҙ ташлап, бер нисә йылдан ниндәй һөнәр кешеләре кәрәк булыуын да фаразлап ҡарайыҡ әле.**

**Азалия:** Программалаусы һәм психолог һөнәрләләр талап ителер, моғайын. Сөнки кешеләр күп ваҡытын социаль селтәрҙәрҙә уҙғара, үҙҙәрен яңғыҙ тоя һәм күңелен бушатыр яҡын кешеләре булмағанлыҡтан да, башҡалар менән үҙен сағыштырып күңел төшөнкөлөгөнә бирелгәнлектән дә, башҡа бик күп сәбәптәрҙән дә психологтарға мөрәжәғәт итәсәк. Үҙем йырсы булырға теләһәм дә, психолог һөнәренең дә актуаллеген аңлайым, был йүнәлеш тә ылыҡтыра мине.

**Азалия:** Әле Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләнәм һәм онлайн уҡыйым. Был бик ауыр, тура бәйләнеш юҡ. Әүкытыусы - ул бөтә күңелен балаларға һалып, күҙҙәренә ҡарап белем биреүсе, мәғлүмәтте ауыҙҙарына сәйнәп ҡаптырыусы. Шулай булғас, яһалма интеллект алмаштыра алырмы икән беҙҙең яраҡлап уҡытыусыларыбыҙҙы?

**Данир:** Яңыраҡ Илон Маск кеше мейеһенә чип ҡуйҙы, бәлки, яҡын киләсәктә кеше башына флешка тығып ҡына белем алыр? Булмаҫ, тимә. Минә былай онлайнмы, йәки дистанцияла уҡыу оҡшамай, сөнки дисциплина юҡ, тиемме. Бына мәктәптә ултырырға кәрәк икән, ултырһаң да уҡыйһың. Ә өйҙә ятып торғо ла килеп китә, унда инде уҡыу ҡайғыһы ла ҡалмай.

юлдар яңыртылырға, юғары белем алырға теләгәндәргә етерлек бюджет урындары булдырылырға, яңы эш башлаған йәш белгескә хеҙмәт шарттарын һәм эш хаҡын яҡшыртырға һәм башҡа шундай социаль-иҡтисади мәсьәләләр дөрөҫ хәл ителергә тейеш.

**▸ Йәйге каникулдарҙы нисек үткәрәһегеҙ?**

**Йәҙгөл:** Быйылғы каникулда иң төп ниәтем - ул тәү сиратта "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсында ҡатнашыу өсөн Өфөгә барып ҡайтыу. Каникулдарҙың ҡалған осорон ял итергә, киләһе уҡыу йылына кәс тупларға, үҙемә оҡшаған китаптарҙы уҡырға һәм Төп дәүләт имтиханына әҙерләнә башларға кәрәк. Ауылға, өләсәй янына ҡайтып килергә лә теләйем.

# УҠЫТЫУСЫЛАРЫБЫҘҘЫ...

## алмаштыра алмаясаҡ

гәнебеҙ киләсәктә үҙебеҙгә кәрәк буласаҡ.

**Данир:** Эшләй белгән кеше бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмаясаҡ, шуға мәктәптә беҙҙе эшкә өйрәтеүҙәре яҡшы инде ул. Тағы ла гимназия коридорҙарында аҙна һайын бер класс тәнәфестә дежур була, улар тәртип һаҡлай.

**Гәзинур:** 6-сы кластан беҙ ҙә гимназия буйлап шулай тәртип һаҡлай башлаясаҡбыҙ. Әлегә бында бик эшләтеп бармайҙар, унын ҡарауы, өйҙә ата-әсәйемә ярҙам итәм: иҙән йәки һауыт-һаба йыуышам.

**▸ Йәйге каникулдың беренсе көнө Балаларҙы яҡлау көнө булды. Һеҙгә хәүеф тыуҙырған нәмәләр бармы?**

**Данир:** Бер мәҙәк видеола күрһәтелгәнсә, 1 июнь - Балаларҙы яҡлау көнө, сөнки 31 май уҡыу йылын йомғаҡлап, билдәләрҙе иғлан итәләр. Был шаяртыу ғына, әлбиттә, тик "бишле"гә генә өлгәшкәс, минә был сәбәптән ҡурҡырға тура килгәне юҡ.

**Азалия**: Ә минең бар, сөнки әсәйем тик "бишле"ләр генә алып ҡайт тип һорай. Шуға ла мин 1-се кластан алып тик "бишле"гә уҡыйым. Бындай яуаплылыҡты күтәреүе бик ауыр һәм уҡыуға күп көс һалырға кәрәк. Ә күңелем сәнғәт һөйгән ижад кешеһе булараҡ, мин ҡайһы бер осрактарҙа иғтибарымды уҡыуҙан саҡ ҡына ситкә йүнәлтеп, шиғыр яҙғым йәки йыр ижад иткем дә килә. Шуға тик "бишле"гә генә уҡырға талап итеү кәрәкмәйҙер ул, тип тә уйлайым. Кешенең ғүмере был талаптан ғына тормай бит, һәләттәрендә төрлө яҡлап үҫтереү ҙә мөһим. Һәр кем үҙенең күңеленә яҡҡан эшкә ваҡытын күберәк бүлергә тейеш. Шуныһы ҡыуандына менән тапатып китеүҙәре лә ихтимал. Аварияләр йыш була.

**▸ Башҡорт гимназия-интернаты уҡыусылары булараҡ, туған телебеҙ яҙмышы турандында ла уйланғанығыҙ барҙыр. Уны һаҡлау һәм үҫтереү өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

**Йәҙгөл:** Башҡорт телен белеү ғаиләнән киләләр, тип уйлайым. Атай-әсәй башҡортса һөйләшә икән, бала ла һөйләшәсәк. Ә үҙҙәре һөйләшмәгән атай-әсәй балаһына нимә генә тип әйтеп, күпме генә нәсихәт уҡымаһын - һәҙөмтә булмаясаҡ. Мине ғәжәпләндергән һәм уйландырғаны бына нимә: "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәрҙең конкурсы кеүек сараларҙа сәхнәлә матур итеп башҡортса һөйләшеп торған тиҫтерҙәремдең унан төшкәс үк русса аралаша башлауы. Бына шундай күренештәр булмаһын ине ул, туған телебеҙҙе беләбеҙ икән, үҙ-ара ла башҡортса һөйләшергә кәрәк.

**Азалия:** Телгә һөйөү кешелә моң аша ла уяныргә мөмкин. Шуға мин күберәк башҡорт йырҙарын башҡарырға, айырыуса рухты күтәргәндәрен йырларға тырышам. Йәштәрҙең иғтибарын йәлеп итеү өсөн төрлө ҡыҙыҡлы акциялар үткәрергә лә мөмкин. Мәсьәлән, социаль селтәрҙәрҙә күргәйнем, бер ҡыҙ Өфө урамдары буйлап бер ҡап тундырма тотоп йөрөй һәм үткән кешеләргә мөрәжәғәт итеп, рус һүҙҙәренең башҡортсаға тәржемәһен әйтеүҙәрен һорай. Белһәләр, тундырма бүләк итә. Ҡыҙыҡ та инде, кемдер үҙенең башҡорт телен белеүе менән ғорурлана ла ала.

**Данир:** Шулай уҡ ҡыҙыҡлы фильмдар төшөрөргә, телефон

**Йәҙгөл:** Табип һөнәре һәр саҡ актуаль инде ул, хәҙер айырыуса теш табиптары араһында яҡшы белгестәр етмәй. Программалаусылар, тәҙәүселәр, инженерҙар, техник һөнәр эйәләре лә кәрәк булыр. Тик, ҡыҙғаныҫҡа күрә, минең был йүнәлештәрҙең береһенә лә ҡыҙыҡһыныуым юҡ. Ниндәйҙер кимәлдә сәйәсәт, хоҡуҡ, сәнғәт һәм журналистика өлкәләренә тартылам. Әйткәндәй, бер нисә йыл элек уҡытыусыбыҙ беҙҙән: "Киләсәктә уҡытыусы һөнәрен һайлаусылар булырмы?" - тип һорағайны, 28 кеше араһынан береһе лә ҡулын күтәрмәне. Был күп кластарҙа күҙәтелгән хәл, шулай булғас, уҡытыусылар ҙа кәрәк буласаҡ...

**Данир:** Оҙаҡламай нефть һәм газ өлкәһенә бәйле һөнәр кешеләренә эш табыуы ауырлашыуы ихтимал, сөнки былар мәңге бөтмәҫ байлыҡтар түгел. Ә кешелеккә һәм Ер шарына бөгөн үк экологтар кәрәк. Көндән-көн беҙ йәшәгән планетаның торошо насарая, тәбиғәт үҙгәрештәр кисерә. Беҙҙең республикала ла борсоуға һалырлыҡ экология мәсьәләләре бар. Мәсьәлән, күрше Салауат ҡалаһының һауаһы бысраныуы, яман еҫ булыуы тәбиғәткә генә түгел, ундағы халыҡтың һаулығына ла йоғонто яһауы ихтимал. Үҙем инде табип һөнәрен һайларға ниәтләйем.

**Гәзинур:** Мин дә табип булырға тейешмен, үҙем һайланым был һөнәрҙе. Беренсе кластан уҡ шуға әҙерләнәм һәм 3-сө кластан алып химия, биология буйынса өҫтәмә рәүештә шөғөлләнәм. Травматолог булғым килә. Сөнки аяғымды һындырғайным һәм башҡаларға ярҙам иткем килде.

**▸ Бәлки, киләсәк быуындарҙы яһалма интеллект уҡытыр?**

**Йәҙгөл:** Яһалма интеллект, бәлки, яҡшыраҡ та уҡытыр, төплөрәк белем бирер, әммә уның бер ниндәй йылыһы, наҙы юҡ. Уны тыңлайһың да ҡайтып китәһең инде, ул һине әлеңге уҡытыусыларыбыҙ кеүек шаяртып, йәки күтәрмәләп, аңламағаныңды ҡабаттан аңлатып та тормаҫ. Шунан кеше лә роботҡа әйләнеүе ихтимал. Ҡайһы саҡта әсәйебеҙ кеүек яҡын күргән уҡытыусыны бер ниндәй ҙә яһалмалар алмаштыра алмаясаҡ.

**Гәзинур:** Робот уҡытһа, минә ҡыҙыҡ булыр ине ул.

**▸ Илһөйәрлекте нисек тәрбиәләргә?**

**Азалия:** Һәр белем усағында хәҙер дәүләт флагын күтәрергә йыйылыу, гимн тыңлау ғәҙәти хәл кеүек ҡабул ителә. Был яңылыҡты беҙ бик тыныс ҡабул итек. Мин былтыр йыл буйына ошо линейкаларҙа алып барыусы булғас, айырыуса күңелемә яҡын хәтирәләр ҡалдырҙы. Гимназистарҙа рух, илгә ҡарата һөйөү уятҡан яҡшы күренештәрҙең береһе был.

**Йәҙгөл:** "Мөһим нәмә турандында һөйләшеү" сәғәттәре лә бик тиҙ генә көндәлек тормошобоҙға инде лә китте. Дүшәмбе иртә менән ауыр дәрестәр уҡып улырғансы, уҡытыусыбыҙ һөйләгән ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәрҙе тыңлап, ял итеп, уянып етеп, дәрестәргә таралабыҙ. Билдәле даталарға, шәхестәргә арналған мауыҡтырғыс лекцияларҙы тыңланыҡ бынан да.

**Данир:** Ә минеңсә, был дәрес ҡайһы саҡта ваҡытты бушҡа уҙғарыуға тиң. Уның урынына берәй спорт сәғәтеме булһа, хатта теннис уйнаһаҡ та файҙалы булыр ине. Ә йәштәр генә түгел, бөтә кешеләр илһөйәр булһын өсөн уларға яҡшы, уңайлы шарттар булдырыу йәһәтенән эштәр атҡарылырға тейеш илдә. Мәсьәлән, соҡорло

**Данир:** Каникулдың 1-2 аҙнаһын ял итеп үткәргәс, спорт менән шөғөлләнеүемде дауам итергә, химия һәм биология фәндәренән өҫтәмә уҡырға тотонорға кәрәк булыр. Биология буйынса уҡыу лагерына ла йөрөйәсәкмен, уны үҙебеҙҙең гимназияла ойошторалар. Аҙаҡ, йәй урталары етһә, ауылда бесән башлана һәм мин дә бесән күбәләшәм.

**Гәзинур:** Мин ауылға барам, унда беҙ яңы мунса һалабыҙ. Шунда ярҙам итергә, баҡсала ла эшләргә кәрәк булыр. Иң мөһиме, каникулдарҙа ял итергә, Һәләүек йылғаһында һыу инергә теләйем.

**Азалия:** Минең быйылғы каникулдарым имтихандар тапшырыу, уларҙың һәҙөмтәләрен көтөү һәм үҙем теләгән юғары уҡыу йортона уҡырға инеү кеүек тулҡынландырғыс минуттарҙан торасаҡ инде. Тағы ла әсәй менән ҡул эштәребеҙҙе һатырға төрлө һабантуйҙарға, байрамдарға йөрөргә лә өлгөрөрбөҙ, моғайын. Минә быйыл йәй 18 йәш тә тула. Шуға йәйҙе бик түҙемһеҙләнеп көтөп алдым, матур үтер, тип өмөтләнәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ишембайҙағы Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернаты уҡыусылары бына шулай уҡыуҙарында ла, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған башҡа эштәрҙә лә бик әүҙемдәр. Был уларҙың киләсәктә әүҙем граждандыҡ ҡарашы булған шәхестәр булып үҫеп етеүҙәренең бер күрһәткеселер, һис шикһеҙ. Иғтибар иткәнһегеҙҙер, әле үк уларҙың тел төбөнән үҙҙәрен уратҡан һәр нәмәгә үҙ фекерҙәре булыуы, бер күренешкә лә битараф ҡалмауҙары һиҙелеп тора. Шундай алмаш тәрбиәләрлек белем усағы булған ҡаланың да киләсәге яҡты.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Бер аҙ өҫкәрәк үрмәләргәме? Әллә ошонан ғына атырғамы? Шул мәл әлеге лә баяғы серле иҫкәртеү, тик кенә тор, тип әйткән һымаҡ булды. Мин нисек ҡатып ҡалғанмын, шул килеш тора бирҙем.*



КӨЛӨП АЛАЙЫҠ...

**Ваҡыты менән миңә, кеше һөйләгәнде яҙаһың да йөрөйһөң, әллә үҙең менән ҡыҙыҡ хәлдәр булмай инде, тип әйтеп тә ҡуялар. Нишләп булмаһын, мәйтәм, була ул минең менән дә фәһемле хәлдәр. Яйы сыҡһа, берәй нәмә яҙырмын әле шунда. Әйтеүен әйттем дә ул... Әммә бына был юлы ла кеше һөйләгәнен яҙырға тура килә. Сөнки, әгәр-мәгәр бындай хәл минең менән була ҡалһа, бындай һынауҙы әллә лайыҡлы үтә алыр инем, әллә юҡ, тигәндәй. Ышанмайһығыҙмы? Әләйһә, әйҙә бына ошо йәш һунарсының һөйләгәндәрен тыңлап алайыҡ әле.**

# ИМӘН ОЛОНОНА ЙӘБЕШЕП...

## тормош тураһында уйланып тороуҙар



Төштән кире шым ғына ауылдан сығып китеүемә апаруҡ ваҡыт үтеп тә китте. Ҡара әле, яйлап ҡына атлаған һымаҡ булһам да, апаруҡ ара ыратып ташлағанмын икән. Бараһы ергә күп тә ҡалманы. Хәҙер бер аҙ тын алып сәй эсеп алғанда ла була. Арҡаға аҫҡан йәтеш тоҡто (элек уңайлы рюкзак булманы шул) ергә ҡуйҙым да, сылтырап ағып ятҡан шишмәнән һыу алып, сәй ҡуйып ебәрҙем. Урман тыныс, ҡоштар һайрай, тирә-яҡта һиллек. Тәбиғәттең матурлығына һоҡланып ултырҙым әле бер аҙ. Шул арала һыу ҙа ҡайнап сыҡты. Мәтрүшкәле сәй бер аҙ һыуынғансы сылтырап аҡҡан шишмә тауышын бер килке һоҡланып тыңланым. Ҡалын ғына теленгән икмәк өҫтөнә мул ғына ҡаймаҡ һылап, уға тағы бер килке һоҡланып ҡарап ултырҙым. Ҡалай "һоҡланғыс" кеше булды әле был, тип аптырамағыҙ тағы. Тәбиғәткә, икмәк-ҡаймаҡҡа һоҡланыуҙан бигерәк урманды тыңлап ултырам мин. Сөнки урманда һәр ваҡыт уяу булыр кәрәк. Һаҡланғанды һаҡлармын, тигән әйтем тап урман кешеһенә төбәп әйтелгәндер ул. Айыуы, бүреһе, һеләүһене, йыланы, төлкөһө, боланы һәм башҡаһы көн иткән урманда яңғыҙ кешегә үтә һаҡлыҡ кәрәк. Шуға ла мин һаҡлыҡ менән генә (айһай, был үтә һаҡ икән, тип кемдер берәү көлөп тә ҡуйғандыр әле) икмәк телемен ҡулға алдым һәм тештәр менән уның бәләкәй генә киҫәген өҙөп алып, ләззәтләнеп сәйнәй башланым. Күҙҙәрҙе йомоп тороп бер аҙ көйшәй биргәс, эсе сәйгә өрә биреп, уны уртлап ҡуйҙым. Уй, тәмлелектәрен белһәгеҙ ине... Бына ошо уҡ сәйҙе, ошо уҡ ҡаймаҡлы икмәкте өйҙә ашайһың, ә уның тәме барыбер урман тәменә етмәй шул. Ә урманда инде... Ҡоштар һайрай, әкрен генә ел иҫә, сылтырап шишмә аға, елпелдәп күбәләк оса, эшсән ҡырмыҫҡа нимәлер ташый, игәп-мигәп торған кеше юҡ, мәҙәгә тейгән балалар юҡ, кәрәк-бысҡы һорап ингән күрше юҡ. Хөррийәт инде!

Бындай нескә күңелле кеше япа-яңғыҙы ҡара урман буйлап ҡайҙа китеп бара икән, тип аптырап ҡуйыр кемдер. Эйе шул, һеҙгә ҡайҙа китеп барғанды әйтмәй ҙә торам да инде. Әйтәйем әле. Айыуға китеп барам мин! Эйе, эйе, айыуға! Булмаҫ, бигерәк йәшһең бит, тип бот сабыр кемдер. Эйе, шулай, әле мин йәш. Әммә барыбер ҡасандыр тәү башлап минең үҙемә айыу алырға кәрәк бит! Һунарсымын тип йөрөгән булаһың (маҡтанып, тип нисек өҫтәмәйҙер инде), ә үҙеңдең айыу ҙа алғаның юҡ, тип әйтеүсе ҡайһы берәүҙәрҙең ауыҙын ябыр өсөн. Әйткәндәй, минең бығаса урманда япа-яңғыҙым йөрөгәнем юҡ. Гел генә ауылдың иң оҫта һунарсы ағайы менән бергә йөрөйөм. Әле бына теге юлы ул миңә бер килке һынамсыл ҡараштары менән текләп торҙо ла, һунарға барымын бар, тыңлап ҡына йөрөһәң, һинән рәт сығасаҡ, тип әйтеп ҡуйғайны. Нимәгә улайтып әйткәндер инде. Мин уны былай ҙа гел тыңлап йөрөйөмсө. Ә бына был юлы тыңламаным да ҡуйҙым. Уҡыттым тегене, яңғыҙ сыҡтым да киттем урманға. Сәбәбен аңлағанһығыҙҙыр инде. Эйе, дөрөҫ һиҙәһегеҙ, әлеге лә баяғы шул айыу инде. Мәйтәм, айыуҙы яңғыҙ алһам, ике күҙе шарҙай булыр әле һунарсы ағайҙың. Аптырауынан хатта артына ҡолап китер әле.

Айыуҙы нисек алырға уйлайһың, тигән һорауға ла аңлатма биреп китәйем. Кисә генә һунарсы ағай менән болан емтегенә юлыҡҡайныҡ. Боланды айыу йыҡҡан. Эҙенә ҡарағанда айыу бик ҙур, яңғыҙ кеше уны алырлыҡ түгел, тип әйтеп ҡуйғайны һунарсы ағай. Бына ошо һүҙҙәрҙе ишетеү менән минең һул ҡолаҡ ҡарп итеп ҡалды. Ә нимәгә һул ҡолағың ғына ҡарп итте, тип аптырап һорап ҡуйыр кемдер. Бер ыңғайы быныһын да аңлатып үтәйем. Һунарсы ағайҙың әйткән һүҙҙәре минең уң ҡолаҡтан инде лә һул ҡолаҡтан сығып китмәне (уныһы был мәлгә ҡарп итеп ҡалғайны бит инде), ә мейе яғына юл алды. Ә уныһы ошондай елле ҡарар сығарып ҡуйҙы - хатта оҫта һунарсы ла яңғыҙы ала алмаған айыуҙы һин ала алаһың бит!

Һөйләйәсәк хәбәремдең иң ҡыҙыҡ мәле һунар урынына барып еткәс башланып китте. Тәүҙә бына ошо күренеште күҙ алдына килтерегеҙ. Ҡуйы үләндә һул ҡулы менән бер аҙ йырып барған һунарсы тыныс ҡына ҡаршылағы имәнгә үрмәләп менде лә уның олонон ҡосаҡлап ҡатып ҡалды. Ошо уҡ мәлдә ошо имән төбөнә ҡаршы яҡтан һөлмәк кенә баҫып айыу килеп сыҡты. Ул имән төбөндә нишләптер туҡтап ҡалды. Башын күтәрә биреп, тирә-яҡты еҫкәп торҙо ла емтек яғына юл алды. Бына ошо хәл күҙ асып йомған арала булды. Ниндәйҙер сихри көс йәш һунарсыны айыу менән күҙмә-күҙ осраштырманы. Нимәлер йәш кешене оло бәләнән һаҡлап ҡалды. Әгәр улар күҙмә-күҙ осрашҡан булһа, әлбиттә, кеше ғүмере ошонда өҙөлгән булыр ине.

Алдан әйткәнемсә, ситтән ҡарағанда ғына был хәл ғәҙәти күренеш һымаҡ килеп сыҡты. Ә хәҙер мин үҙем нимә кисергәнемде һөйләп үтәйем әле. Күңелле уйҙар менән китеп барған мәлдә ҡапыл ғына миңә ниндәйҙер ҡурҡыныс тулҡын бәрелде. Шунан тағы бер тулҡын һуғылды, шунан тағы... Әйтерһең дә, кемдер мине, ҡурҡыныс яҡында ғына, тип иҫкәртте. Мин күп уйлап торманым. Дөрөҫөн әйткәндә, уйламаным да шикелле. Нисек атлап барҙым, шул ыңғайы эргәләге имәнгә йәбештем дә уға үрмәләп менеп киттем. Ни бары ике метр самаһы үрмәләп өлгөргәнмендер. Шул мәл әлеге лә баяғы иҫкәртеү, туҡта, тип ҡотҡи бойорған һымаҡ булды. Әллә әйтте, әллә юҡ, тигәндәй. Мин имәнде ҡосаҡлап ҡатып ҡалдым. Шул мәл ошо имән төбөнә ҡаршы яҡтан яй ғына баҫып айыу килеп сыҡты! Ә бит яңы ғына тап шул урында мин баҫып тора инем! Ә кемдер мине иҫкәртмәһә... Ҡуй инде, ҡуй, күҙ алдына килтереүе лә ҡурҡыныс. Шул мәл теге айыу башын күтәрә биреп еҫкәнә башланы. Кеше барлығын һиҙә был. Әммә, бәхеткә ҡаршы, унда тамаҡ ҡайғыһы көслөрәк булып сыҡты. Ул емтек яғына юл алды. Бына ошо урында, бәхеткә ҡаршы, тип халыҡ бер аҙ дөрөҫ әйтмәйҙер. Нисек инде бәхеткә ҡаршы булһын. Бындай осраҡта бәхеттең ыңғайына тип һөйләр кәрәк.

Өҫтән ҡарап торам, айыу ҡабаланып-ҡорһаланып болан емтеген ашай башланы. Бер аҙ тыныслана биргәс, һунарсы ағай яңылышҡан икән, тип уйлап ҡуйҙым. Айыуы әллә ни ҙур түгел икән. Уртаса айыу инде. Хатта уртасанан да бер аҙ ҡалышалыр әле. Шуныһы мине бер аҙ аптыратты. Күп осраҡта айыу емтеккә эңер төшкән мәлдә килә. Ә бына быныһы нишләптер үтә иртә килде. Ярар, берәй сәбәбе булғандыр. Ә хәҙер миңә ни эшләргә? Бер аҙ өҫкәрәк үрмәләргәме? Әллә ошонан ғына атырғамы? Шул мәл әлеге лә баяғы серле иҫкәртеү, тик кенә тор, тип әйткән һымаҡ булды. Мин нисек ҡатып ҡалғанмын, шул килеш тора бирҙем. Шул мәл айыу ашауынан туҡтап ҡалды. Башын күтәрә биреп, бер аҙ урманды тыңланы. Шунан ике аяғына баҫып, бер килке минең яҡҡа текләп торҙо. Әллә мине шәйләне инде, тип ҡот осто. Шул мәл ырылдай-ырылдай минең имән төбөнә тағы бер айыу килеп баҫмаһынмы! Уның ҙурлығын күрһәгеҙ! Иҫ китмәле ҙур, тип өс тапҡыр әйткәндә лә килештереп булмаҫтыр. Бәләкәйерәк ауыл мунсаһындай барҙыр хатта. Бындай дәү айыуҙы күргәс, теге бәләкәй айыу емтек эргәһенән сыйылдай-сыйылдай ҡасып китте. Шул мәл минең тапҡырҙа ғына торған айыу танауын өҫкә күтәреп еҫкәнә башланы. Ниндәй генә ҙур, ниндәй генә көслө булһаң да урман тормошо һәр ваҡыт уяу булырға өйрәтә шул. Бына был дәү айыуҙа ла яҡында ғына ниндәйҙер ҡурҡыныс барлығын һиҙә. Әммә был хәлгә тулыһынса төшөнә алмай. Ә мин ни бары ике метр бейеклектә генә баҫып торам! Ярай әле, бәхеттең ыңғайына, был айыуҙың да тамаҡ ҡайғыһы көслөрәк булып сыҡты. Ул яйлап ҡына, үҙ дәрәжәһен белеп кенә емтек эргәһенә барҙы ла уны ашай башланы. Ситтән ҡараһаң, матур күренеш былай. Ҙур айыу тамаҡ туйҙыра. Бәләкәй айыу нимәгәлер өмөтләнеп, тегеләй-былай ситтә йөрөй. Ә һунарсы имән олонона йәбешеп, уларҙы өҫтән күҙәтеп тора. Шул уҡ ваҡытта был күренеш ҡурҡыныс, хатта үтә ҡурҡыныс. Әгәр был айыуҙар кеше барлығын һиҙеп ҡалһа, улар уны шунда уҡ ботарлап ташлаясаҡ. Ярай әле, бәхеттең ыңғайына, һиҙмәнеләр.

Бер мәл ашап туйып алған ҙур айыу бәләкәйе менән булыша башланы. Киткән була ла, быныһы емтеккә яҡынлаша башлаһа, кире борола. Бара бирә лә ҡарап тик ята. Мәле менән бөтөнләй киткән була ла көтмәгән яҡтан кире килеп сыға. Шулай шаяртып-уйнап оҙаҡ йөрөнө улар. Ара-тирә өҙөп-йолҡоп ашаған бәләкәй айыу ҙа туйҙы, буғай. Бына бер мәл ике айыу ҙа юҡҡа сыҡты.

Күптән инде ҡараңғы төн. Мин имән олонона нисек йәбешкәнмен, шул килеш торам. Күптән инде аяҡ-ҡул ҡатты, тән ойоно. Әгәр ошонан имен-аман ҡайтһам, шулайтырмын-былайтырмын, шулайтмаҫмын-былайтмаҫмын, тип әллә ниндәй һүҙҙәр биреп бөтөлдө. Мәйтәм, тормоштоң бар ығы-зығыһы бер сүп кенә икән ул. Матур-татыу йәшәү урынына беҙ күп ваҡыт буш нәмәгә тәмһеҙләшеп, буш нәмә менән булышып, ваҡытты заяға үткәрәбеҙ. Бер-беребеҙгә изгелек эшләү урынына күп осраҡта тап киреһен эшләйбеҙ. Нишләп улайтабыҙҙыр инде. Күп осраҡта тормоштоң йәмен, йәшәүҙең тәмен үҙебеҙ юҡҡа сығарып тик йөрөйбөҙ. Бер-беребеҙгә матур һүҙҙәр әйтергә нишләптер уңайһыҙланабыҙ. Ә насар һүҙҙәрҙе әйтергә һис кенә лә тартынып тормайбыҙ. Әгәр, мәйтәм, ошо һунарҙан тере ҡалһам, тормоштоң ҡәҙерен белеп донъя көтәр инем.

Әйткәндәй, тере ҡалдым мин. Икенсе көн "атаҡлы" һунарсыны имән олононан һунарсы ағай төшөрөп алды. Һинең ошо дыуамаллыҡҡа барыуыңды күҙҙәреңә ҡарап алдан һиҙгәйнем, тей. Әммә былай ҡабаланып сығып китерһең, тип уйламағайным, тей. Ярай, тип арҡанан яратып ала, хата эшләүең артыҡ ҡурҡыныс түгел, дөрөҫ һығымта яһауың мөһим. Әле бына һин айыуҙан саҡ ҡотолоп ҡалдың, ә мин йәш саҡта саҡ бүрәнән таланманым. Бындай йылы һүҙҙәрҙән һуң минең күңелгә рәхәт булып китә. Нисек һунарсы ағай йәш сағында бүрәнән таланманы икән, тип һорайһығыҙмы? Яйы сыҡҡанда бер һөйләрмен әле. Әлеге лә баяғы, кеше һөйләгәнде яҙа ла йөрөйһөң, тип әйтмәһәгеҙ инде.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

✓ ***Хужалар уларҙы ихлас ҡабул итә һәм йомарт һыйлайҙар. Өҫтәлдә бик матур көмөш һауыт ултырған була. Йоҡлар алдынан монах шул һауытты тоғона һала. Дәрүиш юлдашын шелтәләргә теләһә лә бер нәмә лә өндәшмәй.***



*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...*

# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ЯУЫЗЛЫҠ



Билдәле драматург, режиссер һәм шәхси театры булған Николай Коляданың, донъя бер генә сюжетҡа ҡоролған, тигән фекеренә аптырағайным. Уның әйтеүенсә, был сюжет изгелек менән яуызлыҡтың үҙ-ара көрәшенә ҡайтып ҡала, ҡалған сюжеттар шуның дауамы ғына икән дә баһа... Ҡыҙыҡ, шулай бит? Әле һеҙ уҡыясаҡ кинәйәләге дәрүиштең һорауы һәр кемде борсойҙор. Мин, мәҫәлән, ниндәйҙер кимәлдә яуап таптым да кеүек, әммә ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо ла ҡалды. Һеҙ нисек ҡабул итерһегеҙ?

...Бик борон заманда бер дәрүиш йәшәгән. Ваҡыты-ваҡыты менән ул ҙур ҡалаға барып, үҙе үргән кәрзиндәрҙе һата торған булған. Бер көндө, ҡалаға барышлай, уны: "Ни өсөн Изге, Рәхимле, Ғәҙел, Ҡөҙрәтле булған Хоҙай кешеләрҙең тормошона яуызлыҡ үтеп инеүенә юл ҡуя икән?" - тигән һорау борсой башлаған. Һуңғы тапҡыр ҡалала булғанда ул шул тиклем күп ҡайғы-хәсрәт күреп, аңы менән был хәлдә ҡабул итә алмай, йәне көйөп ҡайта.

Юлда уға ҡалаға юл тотҡан монах осрай. Юлдаштарҙың телдәре асылғас, был үҙен борсоған һорауҙары тураһында һөйләй. Уның шул тиклем ныҡ яфаланыуын күреп, сит кеше уны йыуата һәм: "Ҡалаға барып еткәс, Аллаһы Тәғәлә һинә хәҡиҡәтте асыр, тик һин әлегә бер нәмә лә һорама, бер туҡтауһыҙ доғалар уҡы", - тигән. Был ризалашҡан һәм улар юлдарын дауам иткәндәр. Төнгөләккә был икәү бер өйгә туҡталғандар. Хужалар уларҙы ихлас ҡабул итә һәм йомарт һыйлайҙар. Өҫтәлдә бик матур көмөш һауыт ултырған була. Йоҡлар алдынан монах шул һауытты тоғона һала. Яңы юлдашын шелтәләргә теләһә лә, дәрүиш вәғәҙәһен иҫләп, бер нәмә лә өндәшмәй. Иртән улар йылға янына килә. Монах тоҡтағы һауытты һыуға ташлай.

Төшкә ҡарай юлсылар икенсе ауылға барып етәләр. Уларҙы бер өйгә ашҡа саҡыралар. Киткән ваҡытта уларға эт өрә башлай. Оҙаҡ уйламай, монах уны үлтерә. Шунда өйҙән бер малай йүгереп сыға һәм ҡысҡыра башлай. Дәрүиштең юлдашы малайҙың уң ҡулын шаҡарып һындыра ла, бер ни булмағандай, юлын дауам итә. Асыуы килеп, был тағы ла уйлағанын әйтергә йыйынлып ҡуя, әммә вәғәҙәһен иҫләп, тын ҡала.

Ҡараңғы төшкәс, былар ярым емерек өйҙә йоҡларға булалар. Баҡтиһәң, был өйҙә балалар йәшәй икән. Атай-әсәйҙәре үлеп, улар ҡарауһыҙ ҡалғандар. Юлсылар төндә бында үткәрәләр, китер алдынан монах мейестәге ҡуҙлы торонбашты алып, өйгә ут төртә. Дәрүишең тағы ла асыуы ҡуба, тағы ла өндәшмәй.

Улар өсөнсө ауылға килеп етәләр. Бында емерек ҡорам бар икән, әммә әле унда инеп, доға ҡылырға булалар. Монах таш алып, сиркәү тәҙрәһен яра һуға ла, бығаиҫе киткән юлдашын ашханаға саҡыра. Бында ингәс, ул хөрмәт йөҙөнән өс тапҡыр сәжҙә ҡыла. Юлдашының ҡылыҡтарына өйрәнә башлаған дәрүишкә бер туҡтауһыҙ доға ҡылыуҙан башҡа сара ҡалмай.

Ҡалаға етәрәк һуңғы төндә уларҙы урман ситендәге өйгә саҡыралар. Бында балалары булмаған йәш ғаилә йәшәй икән. Иртәнсәк хужалар баҫыуға эшкә китә, былар юлдарын дауам итәләр. Әммә монах кире боролоп, был өйгә лә ут төртә.

Ниһайәт, улар ҡалаға барып етә. Дәрүиш юлда булған сәйер хәлдәрҙең мәғәнәһен тиҙерәк белгеһе килә, һәм ул ашығып һорай:

- Кем икәнеңде тиҙерәк әйтә һал!

- Мин - ҡотҡарыусы фәрештә! - тип яуап бирә монах.

- Һин ниндәй фәрештә! - тип асыулана дәрүиш. - Һин шайтандың үҙе! Һин ҡылған әшәкелектәрҙе ендәр генә ҡыла ала. Яҡшы кешеләрҙең ҡунаҡсыллығына һин рәхимһеҙлек менән яуап бирҙең. Һин монах кейемендәге уғры, ут төртөүсе, кеше үлтереүсе!

- Мин ысынлап та фәрештә, һине борсоған һорауҙарға яуап бирер өсөн ебәрелгәнмен.

- Ни өсөн Аллаһ яуызлыҡ ебәрә һуң?

- Һин дөрөҫ уйламайһың, - тип, тыныс ҡына яуап бирә юлдашы. - Мин ысынлап та Фәрештә. Аллаһ һинең ғазапланыуҙарыңды күреп, борсоған һорауҙарыңа яуап биреү өсөн мине ебәрҙе. Беләм: һин минең ҡылғандарыма яуап таба алмайһың.

Ни өсөн көмөш һауытты урланыммы? Яуап бирәм: беҙҙе ҡунаҡ иткән өй хужаһының олатаһы уны монастырь сиркәүенән урлаған, шул ҡылығы өсөн быларҙың өс быуыны төрлө ауырыуҙарға һәм сирҙәргә дусар ителгән. Ҡунаҡсыллыҡтары хөрмәтенә мин уларҙы был яҙанан ҡотҡарҙым. Көмөш һауытты өшкөрөп, һыуға ташланым. Йылғаға кер йыуырға килгән монахтар уны кире тәүге төйәгенә ҡайтарасаҡ.

Үлтерелгән этҡә килгәндә, ул ҡотороу ауырыуы менән ауырый ине. Хужаларын таламаһын өсөн уны үлтерергә тура килде. Малайҙың ҡулын һындырҙым, сөнки уның киләсәктә юлбаҫар буласағын белә инем. Зәғиф ҡулы менән ул хәҙер ҡурҡыныс енәйәттәр ҡыла алмаясаҡ.

Ни өсөн етемдәрҙең өйөн яндырҙыммы? Ҡурсауһыҙ ҡалған ул балалар тиҙҙән үлерҙәр ине. Янғындан һуң улар көл араһынан ата-әсәләре йәшергән көмөш аҡсаларҙы табып, Александрияла йәшәгән епископ-туғандарын эҙләп табасаҡ, ул хәстәрлек күрер. Ҙурайғас, малайҙар рухани булыр, ҡыҙҙар кейәүгә сығыр. Әҙәм балалары Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанды ҡайғы-хәсрәт итеп ҡабул итә, ә Ул быны яҡшылыҡ өсөн һәм кешеләр үҙгәрһен, тип эшләй.

Беләм, һин ни өсөн сиркәүҙең тәҙрәһен яра һуҡҡанға һәм ашханаға сәжҙә ҡылғанға аптырайһың. Сөнки сиркәү тәҙрәһендә бейеген шайтандарҙы күрҙем һәм таш атып ҡыуҙым. Тиҙҙән ул ғибәҙәтхананы ремонтлаясаҡтар. Ашханалағы бер бай сауҙагәр сиркәүҙе ремонлау өсөн бөтә сығымдарҙы ҡапларға вәғәҙә итте. Шуға мин уға өс тапҡыр баш эйҙем.

Һәм һуңғы янған өй тураһында. Мин уны йәш ғаиләне балаһыҙлыҡ ҡәһәренән ҡотҡарыу өсөн яндырҙым. Ул өйҙә ире хәрәм аҡсаға төҙөгән, шуға күрә уларҙың балалары юҡ. Ир кеше үҙ ҡылығына үкенә, тик өйрәнгән йорттан нисек ҡотолорға белмәй интегә. Хәҙер ул хәләл көсө менән ябайыраҡ өй төҙөйәсәк. Хоҙай фатихаһында балалары тыуасаҡ.

Аңланыңмы инде? Һәр нәмәлә Аллаһы Тәғәләнең кешеләргә ҡарата ҡөҙрәте күренә, әммә улар быны күрмәй ҙә, аңламай ҙа. Аллаһ бер ҡасан да яуызлыҡ ҡылмай. Тик кешеләр Уның ҡушҡандарын ҡайғы-хәсрәт тип һанай, яҡшылыҡ һәм төҙәтеү өсөн эшләүен аңламай.

Шуға күрә, һәр нәмәлә Хоҙайҙың ғәҙеллеген күрә белергә кәрәк...

**Радик ӨМӨТҠУЖИН әҙерләне.**

*УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР*

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

# ВИНОГРАД

Элек һатыу нөктәләрендә емеш-еләк бөтөнләй һатылмай торғайны, бар булған аҙыҡ-түлек: манпасый, пәрәник, камауай шәкәр, кәнсирле павидло, мискәле көнбағыш майынан ары китмәне. Емеш-еләктәрҙе төҫлө китаптарҙан ғына күреп белә инек, ауыҙ һыуыбыҙ ҡороп, ҡасан ғына шул ожмах емештәренән ауыҙ итербеҙ инде, тип хыялланa ла торғайныҡ.

Ауылыбыҙҙың үргә яғында урман ҡырында ҙур алмағас үҫте, ул ни сәбәптән унда, ҡырағай тәбиғәт шарттарында тамыр ебәреп үҫеп сыҡҡандыр, уны кем килтереп ултыртҡандыр, билдәһеҙ. Ҡыҫыр ағас ине ул. Беҙ бала-саға шул алмағасҡа барып, япраҡтарын өҙөп еҫкәп кинәндек. Уларҙан иҫерткес алма еҫе килә торғайны. Ҡыҙыҡ өсөн, йәй көнө, баҡсабыҙҙағы алмағастың япрағын еҫкәп ҡараным һәм, ғәжәпкә ҡаршы, бер ниндәй ҙә еҫ тойманым. Әҙәм балаһы бик теләһә, күҙ талдырып, көпә-көндөҙ күк йөҙөнә ҡарап йондоҙ ҙа күрә ала, тиҙәр, шуның ише, ул сихри еҫ күрге, төмләп ҡарағы килгәндә генә хасил булалыр, бәлки.

Бер көн беҙҙең сос ҡолаҡтарға үргә оста йәшәгән Фәтхелислам еҙнәй алыҫ Үзбәкстан тарафтарынан виноград алып ҡайтҡан, йәнәһе лә, тигән хәбәр килеп ишетелде. Был беҙҙән, итек башынан ары китмәгән бала-саға өсөн, ғәҙәти булмаған, шаҡ ҡатырырлыҡ яңылыҡ ине. Апайымды эйәртеп алып, шунда киттем. Һиҙемләүебеҙсә, тегеләр ҙур ҡунаҡ йыйғандар ине шикелле: оло ҡапҡалары шар асыҡ, тұғарылған бер нисә ат бесәнле арбаларына бәйләнгән, көймәле матайҙар ҙа күренә. Өңөлөп, бинийһая ваҡыт һерәйҙек тупһа ауыҙында. Бына, оҙаҡ көттөрөп, Ғәбиҙә апай күренде лә ризаһыҙ ҡарап, ҡаш төйҙө: "Ништәп йөрөйһөгеҙ ваҡытһыҙ, тар ергә тауу булып?" Танауымды мырш-мырш тарттым: "Теге, ней, винаграт ашағыбыҙ килә..." "Уны ҡайҙан ишеттегеҙ?" "Нәсимә Әлфиәгә әйткән, Әлфиә - Ғәфүргә, Ғәфүр - Шәрифйәнгә, Шәрифйән - апайыма, апайым - миңә..." "Йүкә телефонығыҙ шәп эшләй икән!" "Телефунбыбыҙ юҡ ул беҙҙең, винаграт ашағыбыҙ килгән ҡорһағыбыҙ ғына бар!" Семтем дә май әҫәре ҡунмаған арыҡ эсемде һыпырҙым. "Виноград, тиһегеҙ инде? - Апай икеләнгәндәй итте. - Уны ҡунаҡтарҙың алдына, табын уртаһына ҡуйғайным бит әле..." "Улайға уҡ китһә, беҙ ҙә ҡунаҡ инде у!" Саҡырылмаған, әрһеҙ ҡунаҡтар, тип тә өҫтә! Ярай, көтөгеҙ, хәҙер апсығам, тик алдан киҫәтәм, күпкә өмөт итмәгеҙ!"

Апайыбыҙ инеп китеп, ике бөртөк ҡара емеш алып сығып, икебеҙгә тотторҙо: "Мә, һаҡлап ашағыҙ, тәмле нимә күп булмай!" Беҙ, ҡыуанышып, теге хан һыйын урттарыбыҙға ҡыҫтырып, ҡайтыу яғына йүнәлдек. Әҙерәк барабыҙ ҙа емештәрҙе алмаштырып ҡабабыҙ, шулайтып уртаҡлашһаң, татлыраҡ та, тәмлерәк тә була икән дә баһа. Төш ауғансы шулай ҡыу-ғәләмәт килеп йөрөп ята инек, ҡапыл апайым ҡөҙерле әйберен юғалтҡандай ҡысҡырып ебәрҙе: "Ай-й-й!" "Ништәп олойһоң шул саҡлы?" "Бер урттан икенсеһенә күсергәнсе винагратым йотолдо ла китте!" "Гел шулай һоғалай, әрәмтамаҡ булдың инде!" Ни хәл итмәк, икебеҙгә бер емеш тороп ҡалды. Апайыма биреп торам да, өңөлөп, тегенең ауыҙына текәләм: "Йотоп ҡына ебәрә күрмә, һинең көп ҡорһағың һимеҙ ҡонанды тартып алырға әҙер!"

Төштән һуң Раилде осраттыҡ, теге иғтибарлы әҙәм булараҡ, ҡупайған уртыма күҙ атты: "Нимә, кәнфит һураһыңмы, әллә ҡаты ҡоротмо?" "Юҡ, винаграт!" "Ул нимә була тағы?" "Наҙан, - белгән берҙән-бер атамамды өҫтәнем, - бик алыҫта Афирика, тип аталған бер ил бар, шунда ҡара емеш ашаған сөм ҡара халыҡ йәшәй!" "Күрһәт винагратыңды!" Ғүмерҙә татып ҡарамаған емеште күргәс, тегенең күҙҙәре шарҙай булды: "Кана, мин дә ҡабып ҡарайым!" Йомарт кеше булараҡ, емеште Раилдең усына һалдым, әммә киҫәттем ҡуйырға ла онотманым: "Ҡара уны, йә һытып, йә яңылыш йотоп ҡуйма!"

Бер аҙҙан беҙҙең эргәгә эт өйөрө бала-саға йыйылған ине инде, виноград сиратлап Нәсимәнең, Мөҙәристең, Рәшиттең, Ишбирҙенең, Йомабайҙың, Баязиттең, Рәсимәнең ауыҙына күсте. Иң аҙаҡтан Динислам ҡапты ла күҙҙәрен шаҡмаҡландырып тынып ҡалды. Мин хәүефләнеп тексәйҙем: "Дауай, тиҙерәк сығар, бөгөндән башҡа иртәгә лә көн бар!" "Йоттом. Янылыш..." "Һин нимә! Хәҙер ҡомағай эсенде һығам!" "Эсемде һығыу менән генә рәт сыҡмаҫ, винаграт өҫкә ҡалҡмаҫ, әллә иртәгәгә көндә көтәйекме, бәлки, бетәү көйө генә кире төшөр..."

Шулай итеп, алтындай күргән икенсе емештән дә яҙҙыҡ һәм ҡайғылы баштарыбыҙҙы түбән эйеп, ҡайтыу яғына ҡарай йүнәлдек...

...Тамаҡ туйыу. Күңел туйыу. Ҡапма-ҡаршы төшөнсәне аңлатҡан ике һүҙ бәйләнеше. Хәҙер тамағыбыҙ туя ул, киҫеттәр емеш-еләктән һығылып тора, йәнең теләгәнеңде һайлап ал, һайлап ҡап. Ә минең өсөн бөгөн икенсе төшөнсә - күңелдең туйыуы, уны көр һәм хөр булыуы күпкә кәрәгерәк һәм ҡәҙерлерәк.

**✓ Ғалимдар йөҙҙәрендә миңдәре булған кешеләр ҡартлыҡҡа бирешмәй, тип белдерә. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, тәндәрендә 100-ҙән ашыу миңе булған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең һөйәктәре нығыраҡ була.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАРТЛЫҠҠА БИРЕШМӘЙБЕҘ

■ Ҡыҙғаныҫҡа күрә, барыбыҙ ҙа сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуыбыҙ менән маҡтана алмайбыҙ. Шулай ҙа аҙнаның биш көнө дауамында көнөнә бер тапҡыр ғына булһа ла йәшелсә ашайһығыҙ икән, һеҙ үҙегеҙ менән ғорурлана алаһығыҙ. Был осраҡта организм шлактарҙан таҙара, тип белдерә Көньяҡ Корея ғалимдары. Сеулдағы Милли университетта үткәрелгән тикшеренеү һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, биш көнлөк йәшелсә диетаһынан һуң организмда зарарлы химик матдәләр күләме түбәнәйә. Йәшелсә ашау фталат һәм антибиотик матдәләрҙең күләмен дә түбәнәйтергә мөмкин.

■ Психологтар фекеренсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 85 проценты башҡаларҙың тормошонда булған хәлде ишетеүҙән ҙур ҡәнәғәтлек ала, ә һәр унынсы гүзәл зат был серҙе башҡаларға ла һөйләй. Һуңғы яңылыҡтарҙы тикшереп алыу кешегә үҙенең тормошон тулыландырырға мөмкинлек бирә, имеш. Доктор Колин Гилл иҫәпләүенсә, ғәйбәт "сәйнәү" серотонин кеүек гормондар бүленеп сығыуына булышлыҡ итә, был гормондар стресс һәм хәүеф күләмен кәметә. Тимәк, ғәйбәт һөйләү - кешегә үҙен бәхетлерәк тойорға ярҙам итә. Гарвард университеты ғалимдары иҫәпләүенсә, ғәйбәт башҡа кешеләрҙең холҡо тураһында мәғлүмәт тупларға булышлыҡ итә, эволюция күҙлегенән сығып ҡарағанда, был үтә мөһим. Йәғни, кеше башҡалар өлгөһөндә дөрөҫ йәшәргә өйрәнә.

■ Американың Йәмәғәт сәләмәтлеге ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистика мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, был үҫмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла ата-әсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үҫмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үҫмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

■ Ғалимдар йөҙҙәрендә миңдәре булған кешеләр ҡартлыҡҡа бирешмәй, тип белдерә. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, тәндәрендә 100-ҙән ашыу миңе булған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең һөйәктәре нығыраҡ була, тимәк, улар остеопороз сиренә бирешмәй. Бынан тыш, бындай кешеләрҙең йыйырсыҡтары аҙыраҡ була һәм шуға ла улар үҙ йәшенән уртаса 7 йәшкә йәшерәк күренә. Әлбиттә, миңле кешеләргә тире яман шеше лә янай, шуға ла уларға табиптар ҡояшта оҙаҡ ҡыҙынырға кәңәш итмәй. Әммә Лондон тикшеренеүселәре миңдәрҙең ыңғай яҡтары күберәк тип иҫәпләй. Ғалимдар хәҙер миңдәрҙең йөрәк һәм күҙҙәр сәләмәтлегенә йоғонтоһон тикшерә.

■ Яҡын һәм тоғро дуҫтары күп булған кешенең ғүмере оҙон була. Был фактты Американың Юта һәм Яңы Каролина штаты университеты ғалимдары билдәләгән. Тикшеренеү барышында асыҡланыуынса, кеше ни тиклем күберәк аралаша, шул тиклем оҙағыраҡ йәшәй, имеш. Белгестәр әле был феноменды фәнни яҡтан нигеҙләргә ашыҡмай. Шулай ҙа профессор Берт Учино белдереүенсә, социаль әүҙемлек күп яңы эмоциональ тойғолар кисерергә мөмкинлек бирә. Үҙ сиратында, тоғро дуҫтар һәр саҡ ярҙам итергә әҙер, тормош йөгөн дә улар менән күтәреүе еңелерәк.

БАҠСА

# ИЮНЬ АЙЫНДА...

**Июнь айы - емеш һәм емеш-еләк үсентеләренең әүҙем үҫкән осоро, уларға тап ошо осорҙа күпләп һыу ҡойорға һәм туҡлыҡлы, бигерәк тә азотлы һәм калийлы матдәләр менән туҡландырырға кәрәк.**



Шулай ҙа һәр баҡсасы өсөн иң ябай һәм ҡул аҫтында булған ысул - ул органик ашлама. Бының өсөн бер өлөш тиҙәк һәм өс өлөш һыуҙы болғатырға һәм бер нисә көн әсетеп, тағы ла һыу менән аралаштырып, үҫемлектәргә ҡойоп сығырға кәрәк. Әсетелгән үлән бигерәк файҙалы буласаҡ, бының өсөн шулай уҡ бер өлөш үлән һәм өс өлөш һыу кәрәк.

Был ай сүп үләндәре менән көрәшеү мәле лә. Ваҡытында утап, сүп үләндәрен юл, канау ситтәренә һалығыҙ. Ул сереп, үҙенсәлекле ашламаға әүереләсәк.

Ҡорoҡҡостар менән көрәшеү өсөн баҡсалағы ағастарға һәм ҡыуаҡтарға һабын, ылыҫ йәки тәмәке болғатылған һыу һибеп сығығыҙ. Гәрсис, әсе әрем, меңъяпраҡ, еҙ төймә, томаттың ботаҡтарын төнәтеп һибеү ҙә файҙа бирәсәк. Зарар килтереүсе күбәләктәрҙе юҡҡа сығарыу өсөн ағас ботаҡтарына төбөнә бер аҙ кеүәҫ, крахмал шәрбәте (патока) һалынған банкалар элегеҙ. Һәр иртә һайын ҡурай еләге һәм еләктәрҙең аҫтына туҡыма түшәп, ҡыуаҡтарҙы һелкетеп сығығыҙ һәм ҡорoҡҡостарҙы йыйып алығыҙ. Ҡурай еләгенең ҡорoҡҡостарҙан зыян күргән һарғайған ботаҡтарын ҡырҡып алып, яндырығыҙ. Июндә емеш ағастарының емештәре ҡойола, был туҡтатып булмаған тәбиғи биологик процесс. Уларҙы йыйып алып торорға онотмағыҙ.

Июнь башында айыу баланы (жимолость) емеш бирә башлай. Уңыштың 75 проценты өлгөрөп еткәс, уларҙы йыя башларға була, сөнки саҡ ҡына һуңлаһағыҙ, был эште һеҙҙең өсөн турғайҙар һәм барҡылдаҡтар башҡарып ҡуйыуы ихтимал.

Еләк ҡыуаҡтарының кәрәкмәгән мыйыҡтарын ҡырҡығыҙ, тамыр йәйҙерә торғандарын ергә күмеп, һыу һибегеҙ. Ер ҡоро булһа, еләктәргә һыу һибергә кәрәк, ә бына ул мыйыҡ ебәргәндә һәм уңыш өлгөргән осорҙа һыу һибергә ярамай.

Июндә ер өҫтөндәге өлөшө туңып, зыян күргән алмағас күп итеп йәшел үсентеләр ебәрә башлай. Уларҙы төбөнән ҡырҡып ташлағыҙ. Июнь аҙағында крыжовник, ҡыҙыл һәм ҡара ҡарағатты үрсетә башлайҙар. Бының өсөн ҡыуаҡтан ботаҡтар киҫеп алаһың һәм тамыр үҫешен әүҙемләштерә торған шыйыҡсаларға, мәҫәлән, гетероауксинға 8-12 сәғәткә ҡуйып торорға. Аҙаҡтан уларҙы парниктарҙа тамыр йәйҙерәләр. Торф, ҡом өҫтәлгән тупраҡ яҡшыраҡ буласаҡ. Ботаҡтарҙы 1,5-2 см тәрәнлектә ултыртырға. Температура 18-20 градустан артмаһын, унан юғары күтәрелә башлаһа, мотлаҡ ышыҡ булдырырға кәрәк. Ботаҡтарҙы парникта тамыр йәйгәнсе тоторға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# БАҠСА ЕЛӘГЕ НИ ХӘЛДӘ?



**Баҡса еләге артыҡ ҡатмарлы тәрбиә талап итмәгән культураларҙың береһе. Әммә тәүге йылдарҙа ул мул уңыш бирһә лә, дүрт-биш йылдан һуң уңыштың ҡапыл ғына түбәнәйеүе йәки еләк ҡыуаҡтарының ҡороуы ихтимал. Шуға ла еләктең үҫкән урынын йыш алыштырып торорға кәрәк. Мин үҙем еләкте бер урында ике йыл үҫтерәм, сөнки, күҙәтеүҙәр буйынса, өсөнсө йылына ул насар емеш бирә, сирҙәргә, зарарлы ҡорoҡҡостарға бирешеп бара, өлөшләтә ҡорой башлай. Шуға ла түбәндәге тәжрибәм менән уртаҡлашам.**

Еләкте күсереп ултыртыу өсөн иң ҡулайлы ваҡыт булып июль иҫәпләнә. Әгәр ҙә һуңғараҡ ҡалһағыҙ, икенсе йылына еләк әллә ни уңмаясаҡ. Шуға ла уны күсереп ултырта торған йылда еләккә тәғәйенләнгән түтәлгә редис, йәшел борсаҡ, һарымһаҡ, иртә өлгөрә торған кәбеҫтә, ләлә сәскәләре кеүек июнь айында ҡаҙып алына торған үсентеләр сәсәм. Минең баҡсамдағы йәшелсә түтәлдәренең "әйләнеше" түбәндәгесә:

1 - һарымһаҡ, ләлә сәскәһе; 2-3 - баҡса еләге; 4 - татлы борос һәм баклажан; 5 - гладиолус һәм кәбеҫтә; 6 - помидор. Һуңғы өс түтәлдәге үсентеләрҙе үҙегеҙ теләгәнсе алыштыра алаһығыҙ.

**Еләк ултыртыу.** Шулай итеп, июлдең тәүге декадаһына иртә өлгөрә торған йәшелсәләр йыйып алынырға тейеш. Бынан һуң түтәлде тәрән итеп ҡаҙып сығырға кәрәк. Янған тиреҫ, компост һәм минераль ашламаны һалып ҡалдырырға. 5-7 көндән һуң ер тығыҙланғас, баҡса еләген ултырта башларға мөмкин. Мин рәттәр араһында 60 см, ә ҡыуаҡлыҡтар араһында 30 см ара ҡалдырам. Түтәлгә еләк ҡыуаҡтарын бер юлы йәки бер нисә өлөшкә бүлеп ултыртырға була. Тик уларҙың барыһын да тиҙерәк сәсеп бөтөү яҡшыраҡ. Еләктәрҙең тамыры даими урынға иртәрәк ултыртылған һайын, улар ҡеүәтлерәк була, тимәк, яҡшыраҡ ҡышлай һәм киләһе йылда уңышты күберәк аласаҡһығыҙ. Был йылда яңы ултыртылған еләктәргә бары тик көндәр ҡоро торған саҡта һыу ғына ҡойоп торорға кәрәк буласаҡ. Әйткәндәй, һыу ҡойғандан йәки ямғырҙан һуң уларҙың араһын йомшартығыҙ һәм барлыҡҡа килгән мыйыҡтарынан таҙартып тороғоҙ. Ҡыш уларҙың өшөп ҡуйыуынан ҡурҡһағыҙ, еләктәрҙең өҫтөнә ботаҡтар һалып ҡалдырығыҙ.

**Яҙ еткәс.** Ер йылынғас та, еләк түтәлдәрен ботаҡтарҙан, иҫке япраҡтарҙан таҙартырға. Рәттәр араһын йомшартырға. Әгәр ҙә яҙ ҡоро икән, мөмкинлегегеҙгә ҡарап, еләк сәскә атҡан ваҡытта һыу һибегеҙ, тупраҡты йыш ҡына йомшартып тороғоҙ. Еләккә төймәләнгәндән алып уңыш йыйып алғанға тиклем башҡа бер нәмә лә эшләргә кәрәкмәй.

**Уңыш йыйып алынғас.** Ер еләге япрағы 60-70 көн йәшәй, һуңынан һулый. Тимәк, уңыш йыйып алынғандан һуң еләк ҡыуаҡлығындағы япраҡтар һыуыҡтар төшөүгә үләсәк. Йәғни, улар ҡыуаҡты һыуыҡтан да һаҡлай алмай, етмәһә, йәш япраҡтарҙың үҫеүенә ҡамасаулай. Бынан тыш, ҡартайған япраҡтарҙа ҡорoҡҡостар һәм бәшмәкле сирҙәрҙең споралары күп була. Бына шуның өсөн дә уңыш йыйылғандан һуң япраҡтарҙы ҡырҡып алырға һәм ергә күмергә кәрәк. Был эш түбәндәгесә башҡарыла: һул ҡул менән ҡыуаҡлыҡты тотошлай тотабыҙ. Еләктең мыйыҡтары ла бергә алына. Һәр ҡыуаҡлыҡтан ике иң көслө мыйыҡты айырып алып, ергә һалабыҙ. Һул ҡулдағы башҡа япраҡтарҙы һәм мыйыҡтарҙы ҡырҡып ташлайбыҙ. Ҡыуаҡлыҡтар араһындағы ерҙе йомшартып, мыйыҡтарҙың тамырын еңелсә тупраҡҡа батырабыҙ. Был эште башҡарыу алдынан түтәлгә һыу һибелгән йәки ямғыр яуып үткән булһа, тағы ла яҡшыраҡ. Кәрәкмәгән япраҡ һәм мыйыҡтарҙан арынғас, еләк ҡыуаҡтарын бәшмәкле сирҙәрҙән һәм ҡорoҡҡостарҙан һаҡлау өсөн эшкәртергә була. 10 литр һыуға 2-шәр ҡалаҡ кельтан һәм баҡыр хлорокисы һалып, бәләкәй генә ҡул насосы менән һәр ҡыуаҡлыҡҡа һибеп сығырға. Кельтан булмаһа, уны колорадо ҡуңыҙына ҡаршы ҡулланылған саралар менән алыштырырға була. Күпме күләмдә алырға икәнлеге уның рецебында яҙылырға тейеш. Был эштәрҙең барыһы ла уңыш йыйып алынғас, сама менән 10-15 июль башҡарыла. Ошо уҡ ваҡыттан иртә өлгөрөүсе йәшелсәләр үҫкән түтәлде әҙерләй башларға. Япраҡтарҙан таҙартылғандан һуң ҡалған мыйыҡтар 10-12 көндән нығына, тимәк, уларҙы яңы түтәлгә күсереп ултыртырға кәрәк. Әгәр ҙә уларҙы ере менән бергә күсереп ултыртһаң һәм һыу һипһәң, үсентеләрҙең барыһы ла үҫеп китәсәк. Яңы түтәл тулғас, тәүге түтәлебеҙҙәге барлыҡ мыйыҡтарҙы алып ташлайбыҙ, яңылары барлыҡҡа килгән һайын уларҙы өҙөп торабыҙ.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЫСЫН САБЫРЛЫҠ



Шундай хәҙис бар. Бер ваҡыт Аллаһ Илсеһе (с.ғ.с.) ҡәбер янында күҙ йәштәрен түгеп ултырған ҡатын янынан үтеп барған. Ҡатындың хәлен күреп уға:

- Аллаһтан ҡурҡ һәм сабыр ит! - тигән. Бәйғәмбәрҙе танымайынса, ҡатын:

- Кит янымдан, мин кисергәнде һинең кисергәнең юҡ бит әле! - тип ҡысҡырып ебәргән.

Әңгәмәсенең Бәйғәмбәр булғанын әйткәстәр генә ҡатын Аллаһ Илсеһе артынан тороп йүгерә һәм:

- Мин Һеҙҙе таныманым! - тип ғәфү үтенә.

- Ысын сабырлыҡ тәүге тетрәнеүҙә! - тип яуап бирә Бәйғәмбәр.

Хәҙистә телгә алынған ҡатындың исеме билдәле түгел, әммә риүәйәттәрҙән аңлашылыуынса, ул үҙ балаһының ҡәбере янында илай. Алдында Бәйғәмбәр торғанын белмәгәнгә ул уға тауыш күтәрә. Әлбиттә, бер мосолман да эргәһендә Бәйғәмбәр булғанын күрә тороп, уға ундай һүҙҙәр әйтмәҫ ине. Ҡатындың ҡысҡырыуына Аллаһ Илсеһе бер ни ҙә өндәшмәй, үҙ юлында була: йәнә һүҙ ҡушһа, яуап тағы ла тупаҫыраҡ яңғырар, ә ҡатын үҙе унан да ауыр, хәүефле хәлгә ҡалыр ине.

Сәхәбәләрҙең береһе, ҡатындың аңлыҙ хата ҡылыуын күреп, унан һорай: "Һине түҙемлеккә һәм Хоҙайҙан ҡурҡырға саҡырған кешенең кем икәнен беләһеңме?" "Юҡ", - тип яуап бирә ҡатын һәм эргәһендә Аллаһ Илсеһе булғанын белеп, уның артынан ғәфү үтенергә ашыға. Бәйғәмбәр нәсихәт итеп ҡатынға ысын сабырлыҡтың нимә икәнен аңлата. Сабырлыҡ - тәүге тетрәнеүҙә, тигәнен шулай аңларға кәрәк: ҡайғының тәүге минуттарынан уҡ түҙемлеккә эйә булыу.

Кешенең күпте кисереүе һәм барыһына ла күнегеүе билдәле. Ләкин иң ҡыйыны - тәүге һынауҙы, беренсе һыҙланыу тойғоһон кисереү, сөнки һыҙланыу ваҡыт үтеү менән генә баҫыла һәм үҙенә күнектерә. Кешенең ҡайғы менән һынауға әҙер булмауы тағы ла ҙурыраҡ фажиғәгә, зиһене томаланыуына йәки үҙ-үҙенә ҡул һалыуға килтереүе ихтимал.

Үлем менән йөҙгә-йөҙ осрашҡанда - сабырлыҡтың иң кәрәкле сағы, шул ваҡытта мосолмандың ысын иманы күренә. Кешеләрҙең яҡындарын юғалтҡанда һыҡтау, ҡысҡырыу, илауҙары бер кемгә файҙа килтермәй. Ындай ҡайғылы мәлдәрҙә булғанды ҡабул итеп кенә ҡотолоу юлын табырға мөмкин. Кире осраҡта кешегә хәүеф янай, сөнки тыйылған һүҙҙәр әйтеп, ул Бәйғәмбәргә, хатта Аллаһҡа ҡаршы сығыу бар. Кеше ихтыярын юғалтҡанда әйткән һүҙҙәренә, ҡылған эштәренә яуап бирерлек түгел. Ысын мосолман, яҡындары фажиғәгә тарығанда, "Иннә лилләһи үә иннә иләйһи раджиун"(Беҙ Аллаһтыҡы, һәм Уға ҡайтабыҙ) тигән һүҙҙәрҙе телгә алып, үҙен тотанаҡлы тоторға тейеш.

Хәҙистән һабаҡтар:

- Яҡшылыҡҡа өндәгәндә, ҡаршылыҡтарға һәм ризаһыҙлыҡҡа әҙер булырға кәрәк.

- Ҡәбергә килеү рөхсәт ителгән, ә ҡәбер өҫтөндә үлгән кеше өсөн янып көйөү, өҙгөләнеүҙе динебеҙ тыя.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# АЙЫУ МЕНӘН ОСРАШҺАҒЫҘ...



**Ҡырағай хайуандар менән осрашыу тәртип ҡағиҙәләрен белмәү арҡаһында фажиғәгә әйләнергә мөмкин. Хайуандарҙың һөжүмендә күпселек кеше үҙе ғәйепле.**

Бынан алда социаль селтәрҙәрҙә Учалы районының Күсәк ауылынан алыҫ түгел йәш егеттең урманда йүгерен йөрөгәндә осраҡлы рәүештә балалары менән айыу осратҡаны тураһында мәғлүмәт барлыҡҡа килде. Егет быдай осрашыуға әҙер булмауын белдерә, йыртҡыстарҙы ҡурҡытыу өсөн көслә итеп ҡысҡыра башлай. Һуныраҡ Бағалы районының Яңы Тымытыҡ ауылында йәшәүсе ҡатындың ҡырағай йәнлектән ҡурҡып, ҡотҡарыусыларҙы ағас башында көтөүе тураһында хәбәр булды. Был ваҡиғаларҙа бер кем дә зыян күрмәгән.

Кешеләрҙең ҡырағай хайуандар менән осрашыу осрағы йышайыуы менән бәйле БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтендә йыртҡыстар менән үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөргә ҡарар иттеләр. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, ғәҙәттә, хайуандар кешегә һөжүм итергә уйламай, шуға күрә ул кеше килеүен белһен һәм был урындан китһен өсөн (күренеү мотлаҡ түгел) тауыш бирергә кәрәк.

Йыртҡыстарҙың йәшәү урындарында яңғыҙ булмаҫҡа тырышығыҙ, кешенең күплеге хайуан барлығын һиҙмәй ҡалыу мөмкинлеген кәметә. Хайуанды күреү һәм ваҡытында асыҡлау өсөн асыҡ урындан йөрөргә тырышығыҙ.

"Әгәр айыу, бигерәк тә уның балаһын күрһәгеҙ, фото, видео төшөрөм, ашатам тип, янына бармағыҙ, сөнки эргәлә айыу булыуы мөмкин, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алдылар министрлыҡта. Уларҙың ҡырағай хайуан булыуын иҫтә тоторға кәрәк, кешегә ҡарата мөнәсәбәте теләһә ҡайһы ваҡытта агрессияға алмашыныуы ихтимал.

Айыу менән осрашһағыҙ, унан ҡасырға ярамай, сөнки был уның эҙәрлекләү инстинктын уятырға мөмкин, арҡа менән боролмай ғына был урындан китеү мөһим.

Сүплек, аҙыҡ ҡалдыҡтары келәте, үлә хайуандар, иген культуралары (һоло) баҫыуҙары айыуҙы йәлеп итә һәм уларҙы ул үҙеныке тип иҫәпләй. Ындай урындарҙан алыҫ йөрөргә кәрәк.

Тораҡ пункттарҙа һәм улар янында сүплектәрҙе, аҙыҡ ҡалдыҡтарын бөтөрөргә, шулай уҡ йорт хайуандарын төндә биналарға ябырға, йөрөгән ерен кәртәләргә кәрәк.

Айыу тыныс булып күренгән хәлдә лә уның йыртҡыс икәнлеген онотоорға ярамай, ул һәр ваҡытта һөжүм итергә әҙер.

Әгәр һеҙ йыртҡыстарҙың тораҡ пункттарға сығыуына шаһит булһағыҙ, БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының оператив дежур телефонына +7 (347) 218-04-30, шулай уҡ 112 телефоны буйынса хәбәр итегеҙ", - тип кәңәш бирҙеләр ведомствола.

ЙӘШЕЛ ДАУА

# ҠУҘҒАЛАҠ



**Ҡуҙғалаҡ флавоноид, липид, аҡһым, минераль тоҙҙар, органик кислоталар (алма, ҡуҙғалаҡ, лимон кислоталары), каротин, В1, В2, С, К, РР витаминдарына бай.**

Ҡуҙғалаҡ аш һеңдереү процесын, эсәк, үт ҡыуығы, бауырҙың эшен яҡшырта. Шулай уҡ был үлән колит ауырыуы төрҙәрен, ашҡаҙан-эсәк юлы ауырыуҙарын, геморройҙы дауалауҙа ҡулланыла. Ҡуҙғалаҡ түлһеҙлектән дә ярҙам итә.

Рецебы бик ябай: 1 ҡалаҡ ҡуҙғалаҡҡа бер стакан эҫе һыу ҡойорға, һүрән утта 1 минут ҡайнатырға, һыуынғансы төнәтергә. Стакандағы төнәтмәне өскә бүлеп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан яртысәғәт алда эсергә. Ҡуҙғалаҡты бешкәнсе ҡайнатырға ярамай, был осраҡта ҡуҙғалаҡ кислотаһы барлыҡҡа килә.

Шулай уҡ ҡуҙғалаҡты ауырлы саҡта, бөйөр шеше ауырыуы, юғары кислоталы гастрит, ашҡаҙан һәм бөйән эсәге яман шеше ауырыуҙары осрағында ҡулланырға ярамай. Ҡуҙғалаҡ кальций матдәһен үҙләштереүҙе ауырлаштыра.

**Рим ӘХМӘДОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Ысын бәхет мәңгелеккә бирелә

Башы һәм аҙағы булған бөтә нәмәлә сағыштырмаса ғына. Абсолют бәхеттең башы ла, аҙағы ла юҡ. "Ер" тип аталған утрауға беҙ бары тик ваҡытты яҡшы уҙғарыу өсөн генә килгәнбеҙ. Әгәр ысынлап та ерҙәмен тип уйлаһағыҙ, тағы бер һынау тәкдим итәм: 30 көнгә секстан һәм алкоголдән баш тарығыҙ, бары тик икмәк, миндаль, емеш-еләк кенә ашағыҙ, һөт һәм һыу ғына эсегеҙ. Йәмғиәттә булыу йәки яңы проекттар өҫтөндә эшләү теләгегеҙ ҡалыр инеме икән? Күптән көткән үрләүегеҙ элекке кеүек мөһим булып тойолормо? Яңы машина алыу теләгегеҙ юҡҡа сыҡмаҫмы? Тәжрибә эшләп ҡарағыҙ, нимә килеп сығыр. Бары тик шуны ғына әйтә алам: 30 көнлөк һынауҙан һуң барлыҡ нәмәгә ҡыҙыҡһыныу юғалтасаҡһығыҙ. Ҡәнәғәтлек-ауыртыныу пары енси ҡәнәғәтлек алыуҙы, төрләндерем ашауҙы, татлы йоҡоно, ҡыҙыҡлы уйынды һәм хәүефһеҙлек тойғоһон күҙаллауын аңларһығыҙ. Әгәр үҙегеҙҙе енси ҡәнәғәтлектән, деликатестарҙан, уйын төрлөлөгөнән мәхрүм итһәгеҙ, ерҙәге ожмах мәғәнәһен юғалтыр.

Һеҙ енси ҡәнәғәтлеккә, уйынсыҡтарға, тәмле ризыҡҡа һәм мажараларға ихтыяж кисереүегеҙ менән ризалашығыҙ һәм ошо уйынды уйнағыҙ. Уйын тамамланғас, тәбиғи рәүештә икенсе фазаға күсерһегеҙ. Ышанығыҙ, был ваҡытта йөрәгегеҙҙә бер ниндәй йөк тә, юғалтыу тойғоһо ла булмаясаҡ. Һеҙ быны киң асылған күҙҙәр һәм тулы ҡәнәғәтлек тойғоһо менән башҡарырһығыҙ.

## Даланмы, әллә бәхетһеҙлекме: баһаламаҫҡа өйрәнеү

Бәхеткә юлды өйрәнгәндә баһаламаҫҡа, үҙебеҙҙе изгелек-яуызлыҡ парынан юғары ҡуйып, был билдәләмәне тормошобоҙҙан алып ташларға өйрәнәбеҙ. Әгәр башҡаларҙы баһалай, тикшерә башлаһаҡ, көрсөккә терәләсәкбеҙ.

Үҙегеҙгә нимә кәрәк икәнлеген асыҡлағыҙ, үҙегеҙгә тап килгән ҡараштыһайлағыҙ һәм алға атлағыҙ. Әйҙә, башҡалар энергияларын абруйлы, фекерле һәм хаҡлы булыуҙарына ышаныуҙарына әрәм итһен. Әммә һәр осраҡта кеше үҙенә кәрәкте ала. Һығымталар яһамаҫҡа өйрәнегеҙ. Нимә генә булмаһын, барыһы ла яҡшыға, тиеүҙе ғәҙәт итеп алығыҙ. Һеҙгә бары тик: "Ни өсөн был минең менән килеп сыҡты?" - тип һорарға, һуңынан килгән яуаптың мәғәнәһен аңларға тырышырға ғына кәрәк.

**Пьер МОРАНСИ.**



## 24 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Два берега". [16+]
0.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
0.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]
1.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". [16+]
2.20, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". [16+]
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "За семью печатями". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Профилактика.
14.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]
14.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Этно-краса. [6+]
15.30 Преград. Net. [6+]
15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
16.00 Башҡорттар. [6+]
16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Специальный репортаж. [12+]
18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
19.00, 4.15 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]
22.00, 3.45 Тайм-аут. [12+]
23.00 Д/ф "Человек земли". [12+]
23.45 Т/с "Небесные ласточки". [12+]
0.30 Бәхетнамә. [12+]
2.00 Спектакль "Отчаянная". [12+]
5.15 Счастливый час. [12+]

## 25 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Два берега". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Не лыком шиты". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обязательно к прочтению". [16+]
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". [16+]
4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "За семью печатями". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым.
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Ете егет. [12+]
10.45 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45, 18.15 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Ат уйнатып. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Бай. [12+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Письма солдатам. [12+]
19.00, 4.15 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]
23.00 Башкирские каникулы. [12+]
23.45 Караоке по-башкирски. [12+]
0.15 Т/с "Небесные ласточки". [12+]
2.30 Спектакль "Тамарис". [12+]

## 26 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Два берега". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!". [16+]
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Анекдоты". [16+]
4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "За семью печатями". [12+]
23.20 Д/ф "Правда Зюганова". [12+]
0.05 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Т/с "Тайны следствия". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.46 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Башкирские каникулы. [12+]
10.45, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]
11.00 Дорога к храму. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45 Криминальный спектр. [12+]
12.00 Дознание. [12+]
12.15 Специальный репортаж. [12+]
12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 КультУра. [6+]
15.30 МузКәрәҙ. [6+]
16.00 Автограф. [12+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 4.15 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]
21.00 Спроси у Дубовского.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Т/с "Небесные ласточки". [12+]
2.15 Спектакль "Вишневая гора". [12+]

## 27 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Два берега". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". [16+]
0.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Баден-Баден". [16+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". [16+]
2.25, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Культура быта". [16+]
3.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". [16+]
4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Наши". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "За семью печатями". [12+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [16+]
3.45 Т/с "Личное дело". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Ҡурай даны. [12+]
10.15 История одного села. [12+]
10.30 Дорога к храму. [6+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.30, 5.15 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Сулпылар. [6+]
15.45 Городок АЮЯ. [6+]
16.00 Дознание. [16+]
16.15 Патриот РФ. [12+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00 История признания. [12+]
17.15 Специальный репортаж. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Башҡорттар. [6+]
19.00, 4.45 Телецентр. [12+]
19.45 Мама. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]
21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Т/с "Небесные ласточки". [12+]
2.15 Спектакль "Заблудшая". [12+]

## 28 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". [12+]
23.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
0.25 ПОДКАСТ.ЛАБ "Неформат". [16+]
1.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "Легкие деньги". [16+]
1.55 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]
2.40 "Алые паруса-2024". Прямая трансляция из Санкт-Петербурга.
3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ "Креативные индустрии". [16+]
3.50 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
4.35 ПОДКАСТ.ЛАБ "Анекдоты". [16+]
5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Жизнь замечательных". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Истории Большой Страны". [12+]
0.35, 3.05 Х/ф "Сила любви". [12+]
2.40 "Алые паруса-2024". Прямая трансляция из Санкт-Петербурга.
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 18.00 Йома. [6+]
10.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45 Криминальный спектр. [12+]
12.00, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.15, 22.15 Письма солдатам. [12+]
12.30, 5.00 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Лит-ра. [6+]
15.45 Этно-краса. [6+]
16.00 Хазина. [12+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
19.00 Честно говоря. [12+]
19.45, 6.00 История одного села. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
23.45 Концерт Айнура Аминева "Расскажи, Ҡурай..." [12+]
2.45 Спектакль "Нәркәс". [12+]

## 29 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.10 К юбилею Александра Панкратова-Чёрного. [16+]
15.15 Х/ф "Мы из джаза". [12+]
17.00 Премьера. "Я люблю мою страну". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Эксклюзив". [16+]
19.10 "Михаил Задорнов: вся жизнь". Часть 5-я. [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.55 "Закрытый показ" с Александром Гордоном. Премьера. Фильм Александра Балуева "Отель". [16+]
2.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Психика". [16+]
3.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Собрались с мыслями". [16+]
4.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Гори огнем!". [16+]
4.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Летописи конца времен". [16+]
5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обязательно к прочтению". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "В кругу друзей".
12.50 "Доктор Мясников". [12+]
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Развод с препятствиями". [12+]
0.40 Х/ф "Привет от аиста". [12+]
4.10 Х/ф "Роковое наследство". [12+]
5.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Ҡурай даны. [12+]
8.00 Бай. [12+]
8.30 Ете егет. [12+]
9.15, 19.00 Письма солдатам. [12+]
9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 Детей много не бывает. [6+]
10.30 Елкән. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Ат уйнатып. [6+]
11.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
12.00 Сулпылар. Финалисты-2023. [6+]
12.30 Күстәнәс. [12+]
13.00 Автограф. [12+]
13.30, 3.00 Башҡорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00, 3.30 Колесо времени. [12+]
17.00, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.15 Концерт "Все песни о прекрасном". [12+]
19.15, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Т/с "Ай ҡыҙы-2". [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 2.15 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
23.15 Караоке по-башкирски. [12+]
23.45 Ҡурай-шоу. [12+]
0.15 Спектакль "Операция". [12+]
5.30 Тормош. [12+]
6.00 История одного села. [12+]

## 30 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 ПОДКАСТ.ЛАБ "20 лет спустя". [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.15 Премьера. "Играем свадьбу!". [12+]
11.05 "Жизнь других". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.05 Т/с "Тонкие материи". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Две звезды. Отцы и дети". [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Премьера. "Обоюдное согласие". [18+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Театральный подкаст". [16+]
0.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Россия и Запад на качелях истории". [16+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Драгоценные истории". [16+]
2.15 ПОДКАСТ.ЛАБ "Обман веществ". [16+]
3.00 ПОДКАСТ.ЛАБ "Мелодии моей жизни". [16+]
3.45 ПОДКАСТ.ЛАБ "Произвольная программа". [16+]
4.30 ПОДКАСТ.ЛАБ "Кот Шрёдингера". [16+]

### РОССИЯ 1

6.10, 1.05 Х/ф "Два мгновения любви". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.00 Х/ф "Музыка моей души". [12+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Праздник веры и добра. [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Йома. [6+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 Ҡурай даны. [12+]
9.00 Орнамент. [12+]
9.15 Мама. [12+]
9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Книга сказок. [6+]
10.45 Городок АЮЯ. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Сулпылар-2024. [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
13.15 Башкирские каникулы. [12+]
14.00 Үткән ғүмер. [12+]
14.30 Спектакль "Верность". [12+]
15.45, 18.45, 5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
16.00 Честно говоря. [12+]
16.45 Концерт "В главной партии - Фёдор Шаляпин". [12+]
19.00 Патриот РФ. [12+]
19.15 Әлләсе... [6+]
20.00 Автограф. [12+]
20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 4.00, 6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]
22.15, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Юбилейный вечер Фатиха Кульсарина. [12+]
1.00 Спектакль "Скупой". [12+]
2.45 Әлләсе... [12+]
4.45 Моя планета - Башкортостан. [12+]
5.15 Дорога к храму. [6+]

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1445 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (18) дүшәмбе | 2:40 | 4:42 | 13:30 | 19:04 | 21:55 | 23:57 |
| 25 (19) шишәмбе | 2:40 | 4:42 | 13:30 | 19:04 | 21:55 | 23:58 |
| 26 (20) шаршамбы | 2:40 | 4:43 | 13:30 | 19:04 | 21:54 | 23:58 |
| 27 (21) кесе йома | 2:40 | 4:43 | 13:30 | 19:04 | 21:54 | 23:58 |
| 28 (22) йома | 2:41 | 4:44 | 13:30 | 19:04 | 21:54 | 23:58 |
| 29 (23) шәмбе | 2:41 | 4:44 | 13:30 | 19:04 | 21:54 | 23:58 |
| 30 (24) йәкшәмбе | 2:41 | 4:45 | 13:30 | 19:04 | 21:53 | 23:58 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ Амазонка һыуҙарында электр йыланбалығы йәшәй, ул 500 вольт тирәһе көсөргәнештәге ток менән һуға. Урындағы халыҡ был балыҡты тоторҙан алда ул зарядын сарыф итеп бөтһөн өсөн һыу буйына һыйырҙарҙы ҡыуып төшөрә.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 27 ИЮНЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ БАЛЫҠСЫЛЫҠ КӨНӨ

**Рәсәйҙә был байрам рәсми рәүештә билдәләнмәһә лә, 24-се тапҡыр уҙғарыла. Уның төп маҡсаты - балыҡсылыҡҡа мөнәсәбәте булған һөнәрҙәрҙең абруйын күтәреү, белгестәргә хеҙмәттәре һәм тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараштары өсөн рәхмәт белдереү. Ғәҙәттә, байрамда балыҡ һурпаһы өсөн балыҡ тотоу ярыштары ойоштороla, семинарҙар һәм конференциялар үткәрелә.**

Балыҡсыларҙы тәүге тапҡыр 1985 йылда тәбрикләйҙәр, был турала ошо йылда уҡ Рим ҡалаһында үткән Балыҡсылыҡты көйләү һәм үҫтереү халыҡ-ара конференцияһында ҡарар ҡабул ителә. Балыҡсыларҙың һөнәри байрамы айҡанлы ҡыҙыҡлы факттар:

- Археология тикшеренеүҙәренә ярашлы, беренсе ҡармаҡтар 30 мең йылдар элек үк барлыҡҡа килгән. Боронғо кешеләр ырғаҡтарҙы сәнскеле үҫемлектәрҙә, таш, һөйәк ҡулланып яһаған. Уларҙы үрмәле үҫемлеккә йәки хайуандарҙың тарамышына бәйләгәндәр.
- Спорт балыҡсылығы халыҡ-ара ассоциацияһы мәғлүмәттәре буйынса, ҡармаҡҡа эләккән иң ауыр тартҡан сөсө һыуҙа йәшәй торған балыҡ - 210 килограмлыҡ бирке (осетр) булған. Уны Калифорния ярҙарында Джой Паллотто исемле кеше ҡармаҡлаған.
- Немец Вальтер Киммероу балыҡ тотоу ҡоралдарын иң алыҫҡа ташлау буйынса рекорд ҡуйған. Ул 30 граммлыҡ ҡорамалды 176 метрға ташлай алған.
- Амазонка һыуҙарында электр йыланбалығы йәшәй, ул 500 вольт тирәһе көсөргәнештәге ток менән һуға. Урындағы халыҡ был балыҡты тоторҙан алда ул зарядын сарыф итеп бөтһөн өсөн һыу буйына һыйырҙарҙы ҡыуып төшөрә.
- Балыҡсылар араһында тәрәндәге балыҡты табыу өсөн эхолот ҡулланыу киң таралған. Был ҡорамал тәүге тапҡыр 1940 йылда барлыҡҡа килә һәм хәрби маҡсатта ҡулланыла. 1957 йылда балыҡ тотҡанда ла ҡулланыу мөмкинлеге асыла.
- Балыҡсы һөнәре ныҡлы физик әҙерлек, һаулыҡ һәм түҙемлек талап итә. Балыҡсылар судноларҙа бер нисә тәүлектән алып, айҙарға тиклем йәшәргә мөмкин. Был эш ауыр булыуға ҡарамаҫтан, юғары эш хаҡы түләнә. Ә балыҡсы һөнәренә юл диңгеҙ училищеһынан йәки техникумынан башлана.
- Рәсәйҙә тағы ла июлдең икенсе йәкшәмбеһендә Балыҡсы көнө бар. Ошо көндә үк Балыҡ тотоуға ҡаршы эшмәкәрлек көнө лә билдәләнә.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**23-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сәскә. Мәхәллә. Әлимә. Бабич. Танау. Алабута. Көләмәс. Ҡумта. Тирлән. Ноҡот. Ҡот. Урман. Ойоҡ. Факт. Лапаҫ. Окапи. Уба. Николай. Уҡ. Ул. Неон. Ра. Ереван.

**Вертикаль буйынса:** Кузнецов. Балдаҡ. Фа. Мостафин. Мари. Игенсе. Часть. Сәхрә. Ҡотко. Лежнев. Ишбулатов. Уйғыр. Әрәмә. Ау. Таҡ. Уҡлау. Убыр. Таба. Уҡа. Нәҫел.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 июнь Премьера! "Заятүләк менән Һыуһылыу"** (М. Ғафури, М. Малухина), башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 6+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**25 июнь Премьера! "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим), бер бәхетле бала саҡ. 11.00 6+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**24-28 июнь "Нитья" театры "Мин бәхет"** циклы спектаклдәрен тәҡдим итә. 6+

## БР Милли музейы

**24 июнь "Урал менән Шүлгән"** командаларҙың интеллектуаль уйыны. 12.00 12+

**30 июнь "Түңәрәктә бау үреү"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 6+

СПОРТ

# БЕҘҘЕКЕЛӘР БУЛДЫРА!

- Силәбенең "Инга" стадионында спидскейтинг дисциплинаһында роллер-спорт буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары тамамланды. Башҡортостандың йыйылма командаһы 68 миҙал яулаНЫ, тип хәбәр итә республика Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәте. Турнирҙа 12 төбәктән йәмғеһе 100-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты. Улар дүрт дистанцияла: 100, 500 һәм 1000 метрға спринтта, шулай уҡ мәрәй өсөн уҙыштa үҙ көсөн һынаны. Ярышта республиканың Роллер-спорт федерацияһы командаһы 28 алтын, 18 көмөш һәм 22 бронза наградаға лайыҡ булды.
- Башҡортостан спортсылары Камилла Сазонова һәм Варвара Маркина - аэроторба дисциплиналары буйынса Рәсәй кубогы призерҙары. Мәскәүҙә "Парашют спортының аэроторба дисциплиналары буйынса Рәсәй кубогы RISCUP 2024" тамамланды. Енеү өсөн 100-ҙән ашыу спортсы көс һынашты. Ярыш йомғаҡтары буйынса ҡыҙҙарыбыҙ "динамика-соло" дисциплинаһында бер нисә призлы урын яуланы.
- Башҡортостандан йәш спортсылар Софья Степанова һәм Алина Динисламова шашка-64 буйынса Европа беренселегендә еңеү яуланы. Был хаҡта республиканың Спорт министрлығы хәбәр итә. Софья Степанова 14 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар араһында "алтын", "көмөш" һәм "бронза" алды. Алина Динисламова 9 йәшкәсә ҡыҙҙар араһында беренсе һәм икенсе урынға лайыҡ булды. Шашка турниры Төркиәлә үтте.
- Башҡортостан каратистары Минскиҙа "Дуҫлыҡ кубогы 2024" турнирында 11 миҙал яуланы. Был хаҡта республиканың Спорт министрлығы хәбәр итә. Белоруссияның баш ҡалаһында 1000-гә яҡын спортсы йыйылды. Халыҡ-ара ярыштарҙа улар төрлө йәш һәм ауырлыҡ категорияларында 54 комплект миҙал уйнатты. Башҡортостан спортсылары өс алтын, дүртешәр "көмөш" һәм "бронза" алды.
- Португалияла Мадейра утрауында үткән 2024 йылғы Паралимпия уйындарына квалификация турнирында Башҡортостан исеменән йөҙөүселәр Богдан Мозговой һәм Андрей Николаев ҡатнашты. Беҙҙең спортсыларҙың иҫәбендә ике көмөш һәм ике бронза миҙал. Турнирҙа 400-ҙән ашыу спортсы ҡатнашты. Рәсәй командаһында 47 паралимпиясы сығыш яһаны. Йөҙөү буйынса Европа чемпионатында ҡатнашыу 2024 йылда Париждағы Паралимпия уйындарына квалификация өсөн мотлаҡ шарт булып тора.

АФАРИН!

# ЕҢЕҮ ЯУЛАРҒА БАРАМ...

**Баймаҡ районы Күгиҙел ауылы егете Алмас Сирусин ошо көндәрҙә Ҡазан ҡалаһында үткән Рәшит Ваһапов исемендәге халыҡ-ара йыр фестивалендә Гран-при яуланы. Форсаттан файҙаланып, Алмас СИРУСИНға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек:**



**➔ Алмас, иң элек ижад башланғысы - тәү төйәккә һәм сәнғәт юлына һинә фатиха биргән мәлдәргә күҙ һалайыҡ.**

- Мин йыр-моң яратҡан ғаиләлә тыуғанмын. Атайым гармунда бик матур уйнай. Алты-ете йәшемдә йырлай инем инде. Унан башланғыс класта уҡығанда уҡытыусым, композитор Вилүр Мәүлитов миңә иғтибар итте. Ул махсус минең өсөн балалар йырҙары яҙа торғайны. Ҙурая төшкәс, ҡурай түңәрәгенә йөрөй башланым. Эйе, ҡурай миңә нык оҡшай. Шуға, ҡурайсы булырмын, тип уйлай торғайным. Бер ҡурайсылар конкурсында ҡатнашҡандан һуң, Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай бүлегенә уҡырға килергә лә саҡырҙылар. Шунда юлланғайным, Рәфис ағайым: "Һин йыр бүлегенә бар", - тип өгөтләне. Минең өсөн ағайҙың абруйы ҙур, шуға ла уны тыңлап, йыр бүлегенә уҡырға индем. Былай халыҡ йырҙарын мин бәләкәйҙән йырлайым ул. Тәүге йырлаған йырҙарым "Томан" менән "Сәлимәкәй". Ул ваҡытта балалар өсөн үткәрелгән "Ирәндек моңдары"нда ҡатнаша торғайным. Сәнғәт институтына уҡырға ингәс, халыҡ йырҙары менән ныҡлап шөғөлләнә башланым. Беренсе яратып йырлаған йырым "Сибай" булды.

**➔ Бер ғаиләнән ике йырсы. Был шулай уҡ үҙенсәлекле күренеш. Бәләкәйҙән йырланым тинең, был ағайыңдың йоғонтоһо инеме? Уға эйәреп йырлап ҡараныңмы?**

- Әлбиттә, күп йырҙарҙы ағайыма ҡарап өйрәнә инем. Мин Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға килгәндә ул инде Өфө сәнғәт институтында уҡый ине. Ағайымдың өлгөһөндә, училищены тамамлағас, мин дә институтҡа уҡырға индем. Унда мине Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәрзәнә Сәғитова уҡытты. Енеүҙәрем дә уҡытыусымдың хеҙмәте инде, ул минең менән ныҡ шөғөлләнде. "Башҡорт йыры" конкурсында Гран-при алғандан һуң, мине Башҡорт дәүләт филармонияһына эшкә саҡырҙылар. Шулай итеп, беренсе курста уҡығанда уҡ филармонияның солисы инем инде. Уҡыу менән эште бергә алып барыуы бигүк еңелдән түгел, сөнки гастролдәргә сығырға тура килә ине. Уҡытыусым Фәрзәнә Фәткулла ҡыҙы мине аңланы, уҡыуҙа ла, эшемде алып барыуҙа ла ярҙам итте, тип әйтә алам.

**➔ Ҡазан ҡалаһында Рәшит Ваһапов исемендәге халыҡ-ара йыр фестивалендә Гран-при яулауың ҙур яңылыҡ булды.**

- Был конкурсҡа мин икенсе тапҡыр барҙым. Ғөмүмән әйткәндә, электән үк Ҡазан ҡалаһында үткән конкурстарҙы яратам. "Татар моңо"нда, шулай уҡ Әлфиә Абзалова исемендәге конкурста ла беренсе урын алғайным. Ике йыл элек Рәшит Ваһапов исемендәге халыҡ-ара йыр фестиваленә барып, икенсе урынды яуланым. Алдағы йылдарҙа мотлаҡ еңеү яуларға, тип үҙемә һүҙ бирҙем.

Ә был бәйгелә мин башҡарған "Шәүрә"гә килгәндә, ул башҡорт халыҡ йырҙарының иң ауыры тип иҫәпләнә. Диапозоны буйынса бик ҡатмарлы. Шулай уҡ йырҙың эстәлеген белмәйенсә, моң менән генә башҡарыуы ауыр. Минең аңлауымса, Ҡазанда шул йүнәлеште ныҡ ҡаранылар. Ғөмүмән, эсенә, эстәлегенә үтеп инмәй, шул ваҡиғаны үҙ ҡолаҡтарың менән ишетмәй һәм кисермәй тороп, башҡорт халыҡ йырын тейешенсә башҡарыу мөмкин түгел, тип уйлайым. Ә былай конкурстарға гел, еңәм, тип кенә барам. Күптәрендә еңеү ҙә яуланым. Шуға күрә Ҡазанға ла ышаныс менән барҙым. Былдай ярыштарҙа ҡатнашыу, бөтән талантарҙы күреү үҙ өҫтөңдә ныҙыраҡ эшләргә этәргес бирә, артабанғы ижад өсөн илһам һәм дәрт өҫтәй. Ойоштороусыларға ҙур рәхмәт. Ошондай конкурстар беҙҙә, йәштәрҙә, оло юлға, оло сәхнәгә сығара.

**➔ Илһамланып ҡайтҡас, алда торған уй-ниәттәр менән дә уртаҡлашырға булалыр бит?**

- Көҙ айында Өфөлә минең үҙемдең концертым була. Әле программамды әҙерләйем. Унда башҡорт халыҡ йырҙары ла, үҙебеҙҙең яратҡан ретро йырҙары ла башҡарыласаҡ, композиторҙар яҙған яңы йырҙарым да яңғыраясаҡ. Уңышлы үтһә, әлбиттә, концертты башҡа ҡала-райондарҙа ла ҡуйырға мөмкинлек тыуа.

**➔ Уңыштың сере - маҡсатлы булыу. Йәш кешенең ижадсы тиңдәштәренә, быуындаштарына әйтер һүҙе барҙыр бит?**

- Беҙ үҙебеҙҙең туған телебеҙҙе, башҡорт халыҡ йырҙарын онотмаҫҡа тейешбеҙ. Мәшһүр йырсыларыбыҙҙы күберәк тыңларға, уларҙы өйрәнергә, уларҙан өйрәнергә - тәжрибә шулай туплана. Ниндәйҙер маҡсат ҡуяһығыҙ икән, шуға өлгәшергә тырышығыҙ. Башта еңел булмай, ләкин барыбер аҙаҡ ул үҙенең һөҙөмтәһен, емешен бирмәй ҡалмай.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**һорауҙар бирҙе.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

## СОҒОЛ КЕШЕ

**Ағиҙелгә таш-ҡаялар араһынан күңелле йүгерекләгән бихисап сол ҡушыла. Ул солдарҙың һыуы үҙе таҙа, үҙе һалҡын. "Сол" тигән һүҙҙең мәғәнәһе ошо һөйләмдәрҙә үк асыла. Шулай ҙа уны төптәнерәк анығлау урынлы.**

**Сол** - бәләкәй йылғаны белдергән һүҙ. *Үтә күренмәле сол. Солда таштар ялтырап ята.*

**Соғол.** Был һүҙ "етди, уйсан" мәғәнәһендә йөрөй ала. *Соғол кеше. Сырайы бик соғол.*

**Синетләү.** Серегән бүрәнәләрен алыштырып, йортто йә бөтән ҡаралтыны йүнәтеү, ипләү "синетләү" була ла инде. *Өйҙө синетләү. Синетләнгән аласыҡ.*

**Синегеү.** Күҙ тейеп ауырыуҙы борон "синегеү" тип тә һөйләгәндәр. *Синеккән мал. Имсе синегеүҙән дә дауалай.*

**Суй.** "Ныҡ, ҡаты" тигән мәғәнәлә ағасҡа ҡарата ҡулланылған һүҙ. *Суй имән. Суй ағастан яһалған әйбер.*

**Шулай итеп, телдәрҙе уңышлы үҙләштереү соғоллоҡ талап иткәнен иҫтә тотайыҡ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ТАУЫШЛЫ ЙОРТТАН...

### тау артына ҡас!

Атың яман булһа, һатып ҡотолорһоң. Ағай-энең яман булһа, ҡасып ҡотолорһоң. Ҡатының яман булһа, нисек ҡотолорһоң?

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҫыл таш бысраҡҡа буялмай.

**(Виктор Гюго).**

Беҙҙең ысын милләтебеҙ - кеше.

**(Герберг Уэллс).**

Бөйөктән көлкөлөгә - бер генә аҙым, көлкөлөнән бөйөккә кире ҡайтыр юл юҡ.

**(Лион Фейхтвангер).**

Хатаны урап үтеү теләге икенсе хатаға килтерә.

**(Гораций).**

Мәғәнилек бейеклеге ҡатын-ҡыҙға мөнәсәбәт менән үлсәнә.

**(Максим Горький).**

Зинһар өсөн, миңә бер күҙле иктисадсы табығыҙ әле. Сөнки бөтә ишеткәнем: "Бер яҡтан ҡараһаң...", "Икенсе яҡтан ҡараһаң..."

**(Герберг Гувер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Конфуций әйтеүенсә, Кеше йөрөгән урынға Йыһан серҙәрен аңлауҙан да ауырыраҡ. Йыһандың эштәре, йәғни уның яҙҙы һәм көҙҙө, йәйҙе һәм ҡышты булдыра икәне һәр кемгә асыҡ, ә бына Кеше йөрәгендә ниндәй хис-тойғолар йәшеренеүен аңлауы бик үк аңһаттан түгел. Шуға ла Конфуций кеше өсөн туғыҙ һынау тәҡдим итә:**

**- тоғролоғон тикшереү өсөн кешене алыҫ юлға ебәреү кәрәк;**

**- ихтирамлы булыуын тикшереү өсөн кешене алыҫ булмаған урынға ебәреү кәрәк;**

**- һәләтлеген тикшереү өсөн кешегә ауыр үтәлә торған эш ҡушырға кәрәк;**

**- отҡорлоғон тикшереү өсөн кешегә көтөлмәгән һорау биреү кәрәк;**

**- ышанып буламы, юҡмы икәнен тикшереү өсөн кеше алдына тиҙ генә ҡарар ҡабул итә торған мәсьәлә ҡуйырға кәрәк;**

**- намыҫлылығын тикшереү өсөн кешегә байлыҡ ышанып тапшырырға кәрәк;**

**- түҙемлеген тикшереү өсөн кешегә ниндәйҙер хәүеф тураһында хәбәр килтерергә кәрәк;**

**- ниндәй насар ғәҙәттәре барлығын белеү өсөн кешене иҫерткәнсе эсереү кәрәк;**

**- тотанаҡлылығын тикшереү өсөн кешене ҡатын-ҡыҙҙар араһында тотоу кәрәк;**

**Ошо туғыҙ һынауҙан һуң кеше тураһында бер фекер төйнәргә була ла инде..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү танығлыҡы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
20 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 112068